ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

3-9 октябрь (карасай) 2015

№40 (666)

Золотой фонд прессы 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ваҡиғалар уртаһында...**

"Ислам дәүләте" хәүефе



5

**Тыуған иленде...**

әсәйендә яратҡан кеүек ярат



6

**Вәлиди идеяларын дауам итеп...**



Башҡортостанда көнсығышты өйрәнеүселәрҙең Х Бөтә Рәсәй съезы үтәсәк

8-9,11

**Хыялдар тыуһа...**

мөмкинлектәр үҙенән-үҙе асыла



10

**ТВ-программа** 14

***"Бер итексе танылған рәссам Апеллесҡа уның картинаһында итек һүрәтенең дөрөҫ эшләнмәүе тураһында әйтә. Апеллес уның был тәнҡитен ҡабул итә. Ләкин итексе, ҙур белгес һымаҡ ҡыланып, рәссамдың бөтөн картинаһын тәнҡитләй башлағас, Апеллес түҙмәй: "Әй, итексе, итектең кимәлен онотма", - тип уны туҡтата".***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ни өсөн аҙыҡ-түлекте сит илдән ташыйбыҙ, илде үҙебеҙ туйындыра алмайбыҙмы ни?

***Искәндәр СӘФӘРҒӘЛИН, Әбйәлил районы, фермер:*** Киләһе йылда Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу кампанияһы уҙасаҡ. Был эшмәкәрлек илдең ауыл хужалығы өлкәһендәге бихисап тәртипһеҙлектәрҙе асырға һәм, иң мөһиме, уларҙы хәл итергә ярҙам итер, тип ышанам. Был - илде үҙебеҙҙә етештерелгән аҙыҡ-түлек менән генә тәьмин итә башлауға тәүге аҙымдыр, тип уйлайым, сөнки әлеге ваҡытта беҙҙә күпме ер эшкәртелеүе, уларҙың ниндәй уңыш биреүе, ауыл хужалығында эшләүселәрҙең реаль һаны - барыһы ла яҡынса ғына билдәле. Ләкин нисек кенә булмаһын, ҡайһы бер сит ил тауарҙарына булған мохтажлыҡты беҙ ҡаплай алмаясаҡбыҙ. Мәҫәлән, сәй, төрлө емештәр, кофе һәм башҡа аҙыҡ-түлекте беҙ һәр ваҡыт сит илдән һатып алырға мәжбүрбеҙ, сөнки үҙебеҙҙә үҫтереү һәм етештереү мөмкинлеге юҡ. Шулай уҡ әлеге мәлдә эре ауыл хужалығы холдингтары хатта үҙебеҙҙең илдә үҫкән картуф орлоғононң да 80 процент тирәһен сит илдән килтерә. Ә илде нәҡ ошондай эре ойошмалар ғына туйындырырға мөмкин, сөнки төрлө төбәктәге эрелеваҡлы фермерҙарҙың уңышы хатта үҙе йәшәгән төбәкте туйындырыу өсөн дә етмәй. Шулай уҡ үҫентеләрҙе һаҡлау саралары - пестицид, гербицид, фунгацид һәм башҡалар ҙа - 100 процент импорт тауарҙар. Бындай һаҡлау сараларын етештереүсе Рәсәй химик заводтарында ла тейешле матдәләрҙең 90 проценты сит илдән килтерелә. Ауыл хужалығы техникаһы йәһәтенән дә хәлдәр шәптән түгел. Һуңғы ун йылда Рәсәйҙә, "АСМ-холдинг" мәғлүмәттәренә ҡарағанда, йылына 10 мең трактор эшләнә. Сағыштырыу өсөн, мәҫәлән, 1913 йылда илдә 7,6 мең трактор сығарылған. Ләкин бер быуат элек булған тормош менән бөгөнгө көндө сағыштырып булмай бит - улар араһында ғәйәт ҙур айырма. Ғөмүмән, әлеге мәлдә беҙҙә ер, һыу һәм эшсе ҡулдар ғына етерлек, тип әйтергә мөмкин. Әйткәндәй, һуңғы ваҡытта эшсе ҡулдарға ла ҡытлыҡ кисерәбеҙ, сөнки аҡсаһыҙ ауыл хужалығында бил бөгөргә теләүселәр һаны көндән-көн кәмей.

Шулай уҡ фермерлыҡ өлкәһенә ҡағылышлы ҙур мәсьәлә - етештергән тауарҙы реализациялау. Эре супермаркеттар ваҡ фермерҙар менән эш итеүҙе бәләгә һанай, улар өсөн иң ҡулай ысул - ниндәйҙер складтан йәки сит илдән күмәртәләп һатып алыу. Ә урындағы фермерҙарҙың миҙгелле генә эшмәкәрлеге уларҙы ҡыҙыҡһындырмай. Көҙөн ойошторолған ауыл хужалығы йәрминкәләре генә йыйып алынған уңышты һатып, фермерҙарға килем алыуға ярҙам итә алмай, сөнки бөтә уңышты һатып бөтөү мөмкин түгел. Ә фермер нәҡ көҙгө уңышынан яҙғы сәсеүҙә кәрәк буласаҡ аҡса туплап ҡалырға тейеш. Шулай итеп, һатылмай ҡалған уңышты юғалтыуҙан ҡурҡып, төрлө алыпһатарҙар менән хеҙмәттәшлек итергә тура килә. Улар иһә өмөт иткән килемдең яртыһын тиерлек "ҡыҫа". Ә бит шул аҡсанан эшселәргә эш хаҡы түләргә лә, орлоҡ һатып алырға ла, яғыулыҡ мәсьәләһен хәл итергә лә кәрәк. Унан ҡалһа, балаларҙы ла ашатаһы, кейендерәһе бар.

Эре мал тотоусы фермерҙар ҙа ошо уҡ проблема менән осраша. Һөт тә бар, ит тә бар, ләкин реализациялау ауырға төшә. Ғөмүмән, был өлкәлә башҡараһы эштәр бихисап.

**(Дауамы бар).**

*ИҒТИБАР!*

## ӘЙҘӘГЕҘ, БАШ ҠАЛАҒА БАЙРАМҒА!

**Өфө Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларация иғлан ителеүҙең 25 йыллығын байрам итергә әҙерләнә. Байрам программаһы, һәр ваҡыттағыса, төрлө сараларға бай буласаҡ, баш ҡала халҡының һәм ҡунаҡтарҙың күңеленә хуш киләсәк.**

**(Дауамы 5-се биттә).**




12+

✓ *Ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелһен өсөн бөгөн сит ил аҙығынан баш тартып, тиҙ арала уны үҙебеҙҙә етерлек кимәлдә етештерә башларға ынтылыу уңышҡа килтермәйәсәк. Тәү сиратта, аңыбыҙҙы, фекерләүебеҙҙе төптән үҙгәртергә кәрәк.*



*ҠОТЛАЙБЫҘ!*

# ӨЛКӘНДӘР ҘӘ, УҠЫТЫУСЫЛАР ҘА...

## әүҙем уҡыусыларыбыҙ иҫәбендә

**Шундай бер риүәйәт бар. Ул беҙҙең Оло йәштәгеләр көнө һәм Уҡытыусылар көнө уңайынан әйтеләһе һүҙебеҙгә фекер ебе бирер кеүек.**

Бер урам сатында ҙур алмағас үҫеп ултырған. Кешеләр үткән-сүткәндә уның төбөндәге эскәмйәгә ултырып, ял итеп, алмаһын өҙөп алып ашап китә икән. Бына бер саҡ өлкән генә ҡарт килеп ултырған алмағас төбөнә. Үтеп барған йәш егет ҡартҡа алма өҙөп алып биргән. Ҡарт уға рәхмәт әйткән. Егет киткәс, алмағас телгә килгән һәм ҡартҡа: "Һеҙ, кешеләр, бик тә ҡыҙыҡһығыҙ. Минең күләгәмдә ултырып ял итәһегеҙ, алмамды ашайһығыҙ, ә рәхмәтте миңә түгел, бер-берегеҙгә әйтәһегеҙ..." - тигән. Ҡарт: "Эйе, минең үҙемдең алма өҙөргә буйым етмәҫ ине, был егет шуны аңлап, миңә изгелек эшләне, шуға мин уға рәхмәт әйттем. Беҙ, кешеләр, изгелекте рәхмәт һүҙе менән баһалайбыҙ", - тигән. Бер аҙҙан алмағас үҙенең ғәйебен таныуын белдереп, шулай тигән: "Хәҙер аңланым. Мин дә һеҙгә рәхмәт әйтәм..." - тигән. "Ни өсөн?" - тип аптыраған ҡарт. "Ә бит һин туҡтамай үтеп тә китә ала инең. Тап минең күләгәмде һайлағаның һәм минең емешемде өҙөп ҡапҡаның өсөн рәхмәт..."

Был риүәйәттең фекер төйөнө шул: беҙ ҙә уҡыусыларыбыҙға матбуғат баҙарындағы күп төрлө баҫмалар араһынан тап "Киске Өфө"нө һайлағандары өсөн ҡайта-ҡайта рәхмәт уҡыйбыҙ.

Ә уҡыусыларыбыҙ араһында гәзит-журнал уҡыуҙы ғәҙәтенә һеңдергән, шулай уҡ "Киске Өфө" гәзитен дә сыға башлаған көндәренән яҡын иткән оло йәштәгеләр бик күп. Улар баҫмабыҙҙы үҙҙәре генә уҡып ҡалмай, ә башҡалар араһында әүҙем тарата ла, яҙышып та тора. Аҡыл һәм тормош тәжрибәһе хазинаһына эйә уҡыусыларыбыҙҙы Оло йәштәгеләр көнө менән ҡотлайбыҙ. Уларҙың күңел ихласлығына һоҡланыуыбыҙҙы белдерәбеҙ, бәхетле көндәренең ишле-ишле булыуын теләйбеҙ.

Риүәйәттәгесә, үҙҙәренең өҫтәл баҫмаһы, тәрбиә эшендә ярҙамсы итеп тап "Киске Өфө"нө һайлаған уҡытыусыларға ла сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Бынан ун өс йыл элек гәзитебеҙҙе сығара башлағанда уҡ, мәктәпте, уҡытыусыларҙы, балалы ғаиләләрҙе күҙ уңында тотоп, уның йөкмәткейүнәлешен тәрбиәүи юҫыҡҡа борғайныҡ. Уҡытыусылар быны тиҙ шәйләне һәм баһаланы. Бөгөн улар беҙҙең иң тоғро уҡыусыларыбыҙ. Байрамдары менән ҡотлайбыҙ уларҙы ла. Заман бөгөн айырыуса уҡытыусыларҙы һынай, әммә уларҙы һындыра алмай. Киләсәктә лә ҡаҡшамаҫ рух, күңел бөтөнлөгө, Уңыш ғәли йәнәптәренең гел генә йәнәш йөрөүен теләйбеҙ.

**"Киске Өфө"ләр.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**2016 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу бара. Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылыу була. Хаҡтар шулай: "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - 545 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 575 һум 76 тин.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

# Ни өсөн аҙыҡ-түлекте сит илдән ташыйбыҙ, илде үҙебеҙ туйындыра алмайбыҙмы ни?

**(Башы 1-се биттә).**



***Әнүәр СӘЛИМЙӘНОВ, Белорет районы, шәхси эшҡыуар:*** Илебеҙҙең көслөлөгөн һәр дәүерҙә лә, һәр ваҡытта ла ауыл тәьмин иткән һәм итәсәк. Нәҡ ауылдан сыҡҡандар фән, мәҙәниәт, сәнғәт, ғөмүмән, бөтә өлкәгә лә яңынан-яңы, саф һулыш өрә һәм алға ебәрә. Шулай уҡ әлеге лә баяғы ауыл эшсәндәре илде туйҙырыусы булып тора. Рәсәй ғәйәт ҙур территориялы ил һәм ерҙең бөтә потенциалын дөрөҫ, урынлы, файҙалы ҡулланғанда илебеҙҙә етештерелгән аҙыҡ-түлек менән үҙебеҙҙе генә түгел, хатта сит илдәрҙе лә туйындырыу мөмкинлегенә эйәбеҙ. Ләкин был уңышҡа өлгәшеү өсөн кәртәләр күп. Беренсенән, нимә генә тимә, беҙҙең ил халҡы ялҡау. Күпселек осраҡта тик бөгөнгө менән генә йәшәй, ә иртәгелекте ҡайғыртыу тураһында уйларға йыбана. Икенсенән, ауылдар бөлгән һәм уларҙың хәле көндән-көн мөшкөлләнә. Тәү сиратта уларҙы аяҡҡа баҫтырмайынса тороп, илде туйындырыу тураһында һүҙ йөрөтөү урынһыҙ һәм мәғәнәһеҙ. Өсөнсөнән, үҙебеҙҙә үҫтерелгән аҙыҡ-түлеккә конкурент булған сит ил тауарҙары күп. Был йәһәттән ике яҡлы санкциялар һөҙөмтәһендә ниндәйҙер алға китеш күренерме тиһәм, хәл үҙгәрмәне. Санкциялар үҙ көсөнә инде, әммә магазин кәштәләре әле булһын сит ил аҙыҡ-түлегенән һығылып тора. Тимәк, санкциялар урындағы етештереүҙе арттырыуға килтерәсәк, тип көтөү урынһыҙ, минеңсә. Дүртенсенән, төрлө кимәлдәге етәкселәрҙең дә, ябай халыҡ кеүек үк, үҙебеҙҙә етештерелгән генә аҙыҡ-түлеккә, еңел машинаға, башҡа техникаға өҫтөнлөк биреүе, балаларын Рәсәйҙә йәшәтеп, уҡытып, эшләтеүе шарт. Юғиһә, барыһы ла ҡоро һүҙ генә булып ҡаласаҡ, ә алға китеш булмаясаҡ.

Бына ошо етешһеҙлектәрҙе йырып сыҡҡанда һәм ауыл хужалығында мәшғүл булғандарға төплө ярҙам күрһәткәндә, Рәсәйҙе туйындырыуҙы тулыһынса үҙ өҫтөбөҙгә алырға мөмкинбеҙ. Фермерҙарға ташламалы кредиттар биреү, бөтә килемен тулыһынса тиерлек тартып алған һалымдарҙан ҡотҡарыу, техника һәм яғыулыҡ йәһәтенән ярҙам итеү кәрәк. Шулай уҡ ил хөкүмәте тарафынан эшләп килгән төрлө программаларҙың бөтә фермерҙарға ҡарата ла тигеҙ эшләүе мөһим, сөнки әлеге ваҡытта кемдер бер-нисә тапҡыр матди ярҙам алһа, икенселәргә бер тин дә эләкмәй.

***Рамаҙан ИМЕЛБАЕВ, Башҡорт дәүләт аграр университеты студенты:*** Рәсәй хәрби көстәрҙе ҡоралландарыу өсөн тиҫтәләгән триллион һум тотона, ә ауыл хужалығы эшсәндәренә ярҙам йөҙөнән ерҙең бер гектарына ни бары 120 һум бүлә. Бындай ҡараш менән ауыл хужалығында ниндәй алға китеш булһын? Дошмандарҙан үҙебеҙҙе һаҡлай алабыҙ ҙа ул, ә нимә ашарбыҙ һуң? Бөгөнгө көндә илебеҙ, статистикаға ярашлы, үҙен тик сөгөлдөр, шәкәр, көнбағыш майы һәм тауыҡ йомортҡалары менән генә тәьмин итә ала. Ләкин көндәлек рационды айҙар, йылдар дауамында тик был аҙыҡ-түлек менән генә төҙөп булмай, туҡ булыу өсөн кешегә башҡа күп төрлө аҙыҡ та кәрәк.

Элегерәк дәүләт ауыл хужалығында эшләүселәргә ашлама һәм яғыулыҡ өсөн сығымдарын ҡапланы һәм был аҙым ер эше менән булғандарға реаль ярҙам була торғайны. Ә хәҙерге көндә фермерҙар осон осҡа ялғап, бер бурыстан икенсеһенә батып, кредит ҡапҡанынан сыға алмайынса көн күрергә мәжбүр. Гәзит уҡыусыларҙың һәр береһе тиерлек ҙур энтузиазм менән ауылда эш башлап та, уңышҡа өлгәшә алмаған кеше менән таныштыр. Бындай эшмәкәрлекте тик көслө теләк менән генә алға ебәреп булмай. Был өлкәлә эш башлаусылар күберәк юғалтыуҙарға дусар булып, эшмәкәрлеген туҡтатырға һәм оҙаҡ йылдар бурыстарын түләргә мәжбүр. Ә сит илдәрҙә фермерлыҡҡа ҡарата ниндәй ҡараш һуң? Мәҫәлән, Францияла яңы эш башлаусы фермерҙарға биш йыл дауамында ҙур күләмдә субсидия бүленә. Швейцарияла ла емешеләк үҫтереүселәр 1 гектарға 625 евро күләмендә йыл да субсидия алыу хоҡуғына эйә. Ә Германияла йыллыҡ субсидия күләме уртаса 500 евроға барып етә (шул уҡ 1 гектарға). Был суммалар менән Рәсәйҙә ҡаралған 120 һумды сағыштырырға мөмкинме? Бына шуға күрә лә помидорҙы Төркиәнән, боросто һәм кишерҙе Израилдән ташырға мәжбүрбеҙ ҙә инде.

Аграр маркетинг өлкәһендәге эксперттар билдәләүенсә, ил баҙарының тик 10 процентын ғына үҙебеҙҙә үҫтерелгән еләк-емеш алып тора, ә ҡалған 90 проценты - сит илдән килтерелгән, оҙаҡ йылдар серемәй һәм боҙолмай һаҡларға мөмкин булған тауар. Беҙҙең илдә йыл да 30 миллион тонна тирәһе картуф йыйып алына, ләкин уны һаҡлау шарттары булмау сәбәпле, серетеп түгелә һәм сит илдән һатып алына. Ҡайҙа бында логика?

Был өлкәлә ниндәй ҙә булһа ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелһен өсөн бөгөн теге йәки был сит ил аҙығынан баш тартып, тиҙ арала уны үҙебеҙҙә етерлек кимәлдә етештерә башларға ынтылыу уңышҡа килтермәйәсәк. Тәү сиратта, аңыбыҙҙы, фекерләүебеҙҙе төптән үҙгәртергә кәрәк. Үҙебеҙҙе ошо ерҙең хужаһы, эшкәртеүсеһе итеп тоя башлау мөһим. Дәүләттең ауыл хужалығы эшсеһенә йөҙө менән боролоуы, уның тиҙ арала хәл итеүҙе талап иткән мәсьәләләрен күреүе һәм проблемалары тураһында ишетеүе зарур.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Индонезия Республикаһы делегацияһы менән осрашты. Делегацияны "Ғәҙеллек һәм именлек" сәйәси партияһы рәйесе Мөхәммәт Әнис Матта етәкләй. Яҡтар сәнәғәт, сауҙа-иҡтисади, фәнни һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен тикшерҙе. 2014 йылда Башҡортостан менән Индонезия араһында тышҡы сауҙа әйләнеше 1 миллион долларҙан ашыу тәшкил иткән. Беҙҙән Индонезияға синтетик каучук (68 процент) һәм көкөрт (31 процент) оҙатыла. Республикаға фильтрлау ҡорамалдары һәм кейем-һалым килтерелә.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәте ултырышы үткәрҙе. Унда юғары мәктәптең һәм производствоның хеҙмәттәшлеге тикшерелде. Билдәләнеүенсә, республикала инновацион үҫештең берләштерелгән моделе ғәмәлгә ашырыла, унда республиканың Фәндәр академияһы һәм Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге, юғары уҡыу йорттары, предприятиеларҙың ғилми подразделениелары йәлеп ителгән.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Гөлназ Шафиҡованы республиканың мәғариф министры итеп тәғәйенләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Республика етәксеһенең икенсе указы менән Әлфис Ғаязов мәғариф министры вазифаһынан бушатылды. Гөлназ Радмил ҡыҙы Шафиҡова 1975 йылдың 19 июлендә Сибайҙа тыуған. Башҡорт дәүләт педагогия институтын "Педагогика һәм психология (мәктәпкәсә)" белгеслеге буйынса, БДПУ аспирантураһын тамамлаған. Психология фәндәре докторы.

✓Республика Башлығы Рөстәм Хәмитовтың бойороғона ярашлы, Әлфис Ғаязов Фәндәр академияһы президентын һайлағанға тиклем Фәндәр академияһы етәксеһе вазифаһын башҡарасаҡ. Башҡортостан Башлығының икенсе бойороғо менән Рәмил Бәхтизин республика Фәндәр академияһы президенты вазифаһынан бушатылды.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ульяновскиҙа Рәсәйҙең Хәүефһеҙлек советы секретары Николай Патрушев менән Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабичтың берлектәге күсмә кәңәшмәһендә ҡатнашты. Кәңәшмәлә һыу менән файҙаланыу өлкәһендәге хоҡуҡ боҙоуҙарға ҡаршы көрәш һәм һыу ресурстарын файҙаланыуҙың һөҙөмтәлелеген күтәреү буйынса саралар тикшерелде.

**✓ Тармаҡ үҙ проблемаһын ябай халыҡтың көсәһе менән дә хәл итеп ҡараны, әммә һаман да мәсьәләне яйлай алмай әле. Почтальондарҙың эш хаҡы ла һаманғаса бөләкәй булып ҡала.**



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Бер кемгә лә сер түгел, һуңғы йылдарҙа гәзит-журналдарға яҙылып та, уны ваҡытында алмауға зарланыусылар арттандан-арта бара. Бының төп сәбәбе, әлбиттә, "Рәсәй почтаһы"нда килеп тыуған проблемалар. Тармаҡтың матбуғат баҫмаларын таратыуға бүленгән 3 миллиард һумлыҡ Хөкүмәт дотацияһынан ҡолаҡ ҡағыуы хәлде үтә ныҡ ҡатмарлаштырҙы. Шул сәбәпле, "Рәсәй почтаһы" баҫмаларға яҙылыу хаҡын ҡырҡа арттырҙы. Һөҙөмтәлә күп кенә төбәктәрҙә гәзит-журналдар үҙ уҡыусыһын, тиражын юғалтты, ә ҡайһы бер матбуғат саралары бөтөнләй нәшер ителеүҙән туҡтаны.**

# ГӘЗИТ-ЖУРНАЛДАРҘЫҢ ВАҠЫТЫНДА КИЛМӘҮЕНӘ КЕМ ҒӘЙЕПЛЕ?

## Сәбәбе ябай ғына...

РФ Дәүләт Думаһы депутаты Ольга Тимофеева белдереүенсә, "Рәсәй почтаһы"ның уйланмаған сәйәсәте арҡаһында гәзит-журналдарға яҙылыу ике тапҡырҙан ашыуға кәмегән, ә был күрһәткес артында яратҡан баҫмаһынан мәхрүм ҡалған 5 миллиондан ашыу Рәсәй халҡы тора. "Хөкүмәт килеп тыуған ситуацияны ҡулға алмаһа, илебеҙ тағы ла күпме уҡыусыһын юғалтыр, күпме гәзит-журналдар үҙ эшмәкәрлеген туҡтатыр?" - тип борсолоу белдерҙе депутат. Тармаҡтың ауыр хәлдә ҡалыуын аңларға була ла ул, тик бынан ғына һуңғы тиндәрен яратҡан гәзит-журналын алдырыуға сығарып һалған халыҡтың хәле еңеләйеп китмәй шул.

Мәсьәләне яйлауҙы һорап, Рәсәйҙең эре федераль матбуғат саралары 2013 йыл аҙағында ил Президенты Владимир Путинға хат та яҙып ҡарағайны, әммә иғтибар тойолманы. "Хөкүмәттең гәзит-журналдар таратыуға субсидия бүлеүҙе туҡтатыуынан бер баҫма өсөн уртаса 700 һум түләргә мәжбүр булған уҡыусы ғына түгел, ә полиграфия хеҙмәткәрҙәре, таратыусылар, подписка менән шөғөлләнеүсе агентлыҡтар ҙа ҙур зыян күрәсәк, һөҙөмтәлә миллиондан ашыу кеше эш урынын юғалтасаҡ", тип белдергәйне Матбуғат продукцияларын таратыу ассоциацияһы ла. Был күҙаллауҙың ни тиклем дөрөҫ булыуын бөгөн үҙебеҙ күреп беләбеҙ.

Халыҡҡа матбуғат баҫмаларын ваҡытында таратыу социаль функция булып һаналһа ла, дәүләт уны субсидиялауҙан туҡтаны. Шул арҡала гәзит таратыу уның хаҡынан да ҡыйбатыраҡҡа барып баҫты. Шуныһы ҡыҙыҡ, был хәл подписка менән шөғөлләнеүсе почтальондарҙы ла борсоуға һалырға тейеш кеүек ине. Әммә подписканың насар булыуы улар өсөн яҡшыраҡ та кеүек тойола әле ул, һәр өй һайын гәзит таратырға ла, ауыр йөк күтәреп йөрөргә лә кәрәкмәй.




Ҡиммәтле хаҡҡа баҫмаларға яҙылып та, уны ваҡытында алмаған уҡыусыларға үҙ хоҡуҡтарын нисегерәк яҡларға һуң? Үҙ тауарын таптырып килеүселәргә, йәиһә шылтыратыусыларға насар хеҙмәтләндереүҙең сәбәбен почтальондар, подписка менән шөғөлләнеүсе хеҙмәткәрҙәрҙең етешмәүе һәм тағы ла ниндәйҙер сәбәптәр менән аңлатырға була, әлбиттә. Ләкин бынан ғына хәл үҙгәреп китмәй шул. Тармаҡтың хәл итә алмаған был проблемаһы арҡаһында ваҡытында барып етмәгән баҫмаларҙа яҙылғандар иҫкергән, кәрәкмәгән мәғлүмәткә әйләнә. Шул сәбәпле гәзит-журналдар тәғәйен маҡсатын юғалта, үҙ бурысын үтәүҙән туҡтай.

## Гондурас беҙҙән әүҙемерәк

"Рәсәй почтаһы"ның үтә һүлпән булыуын, уның Үҙәк Африканың Ангола, Үҙәк Американың Гондурас республикаларынан да насарыраҡ эшләүен 2012 йылда уҡ Гарвард университетының иҡтисад профессоры Андрей Шлейфер иҫбат итеп, Леонтьев миҙалына лайыҡ булған. Санкт-Петербургта үткәрелгән лекцияла ул бер төркөм фекерҙәштәре менән "Хөкүмәттең хаттар ярҙамы менән үлсәнгән эш һөҙөмтәһе" тигән эшен тәҡдим итә. Ғалимдар ябай ғына эксперимент үткәрә. Улар 2010 йылдың декабре һәм 2011 йылдың феврале араһында төрлө халыҡ-ара почта килешеүенә ҡул ҡуйған 159 илдең иң ҙур бер нисә ҡалаһына икешәр хат ебәрә. Был килешеүгә ярашлы, милли почталар хаттарҙы латин хәрефтәре менән тапшырырға, адрес күрһәтелмәгән осраҡта, ебәреүсеһенә кире ҡайтарырға тейеш була. Шлейфер һәм уның компанияһы хаттарҙы хаталы адрес менән яҙып, әгәр тапшырып булмаһа, уны кире ҡайтарырға, тип яҙып ебәрә һәм уларҙың ҡасан кире әйләнеп килеүен көтөп, ваҡытты билдәләй. Лидер урынға АҠШ сыға. Унан алыҫ булған дәүләттәрҙә лә почтаның сәғәт кеүек эшләүе билдәле була. Шулай уҡ Чехияға ебәрелгән хаттар ҙа ике айҙан кире әйләнә. Ә бына Рәсәйгә, Камбоджаға, Тажикстанға ебәрелән хаттарҙың береһен дә кире ҡайтармайҙар. Бер йыл көткәндән һуң, иҡтисадсылар экспериментты туҡтата. Ғалимдарҙы Рәсәй почтаһының Гондурастыҡынан да насар эшләүе ғәжәпкә ҡалдыра. Рәсәйҙә үткәрелгән ошондай уҡ эксперимент һөҙөмтәләре иһә, ил эсендәге саҡрымдар ҙурлығы түгел, ә хаттарҙың тәүлектәр буйы почта бүлексәләрендә ятыуы проблема тыуҙырыуын күрһәтә. "Новые Известия" гәзите "Рәсәй почтаһы"ның матбуғат хеҙмәтенә ғалимдарҙың был тикшеренеүенә баһа биреүҙәрен һорап хат ебәрә, ләкин яуап ала алмай.

Йыл һайын тиерлек ҙур суммала штраф түләүе лә почта тармағының үҙ эшенә һалҡын ҡарауын, халыҡты сифатһыҙ хеҙмәтләндереүен күрһәтә. Тармаҡ үҙ проблемаһын ябай халыҡтың көсәһе менән дә хәл итеп ҡараны, әммә һаман да мәсьәләне яйлай алмай әле. Почтальондарҙың эш хаҡы ла һаманғаса бөләкәй булып ҡала. Ә был иһә хеҙмәткәрҙәрҙең етешмәүенә, эш урындарының тотороҡһоҙлоғона килтерә. Нәҡ ошо проблемалар арҡаһында баҫмаларҙың тиражы күпкә кәмеп, "ат хаҡы"ндай булды ла инде. Һанай китһәң, Рәсәй почтаһының әллә күпме етешһеҙлектәрен, кәмселектәрен табырға була. Тик уларҙы һанау менән генә хәл итеү юлдары табылмай. Шуныһы үкенесле, үҙ хеҙмәте өсөн ҙур хаҡ алып та, уны намыҫ менән үтәмәгән почтанан әлеге лә баяғы ябай халыҡ зыян күрә. Ҡулланыусы булараҡ тауарын ваҡытында алмаған уҡыусыға нимә эшләргә һуң? Баҫмаларҙы таратыуҙы нисегерәк итеп яйға һалыуҙарын талап итергә?

## Насар эшләйһең икән, түлә!

Баҫмаларға яҙылып та, уны ваҡытында алмайһығыҙ, йәиһә бөтөнләй килтермәйҙәр икән, уҡыусы гәзит-журнал килтереүҙең яңы срогын билдәләргә, сығымды ҡаплатыуҙы талап итергә, килтермәгән баҫма өсөн аҡсаны кире ҡайтарыуҙы, подписка килешеүен өҙөүҙе талап итергә хаҡлы.

Таратыусы иһә ун көн эсендә уның талабын ҡәнәғәтләндерергә, килешеү өҙөлгәндән һуң килгән зыянды ҡапларға тейеш. Эшенә һалҡын ҡараусылар һуңлаған һәр көн өсөн таратыу хаҡынан 3 процент неустойка ла түләргә тейеш. Таратыу хаҡын билдәләп булмаһа, неустойка экземплярҙың подписка хаҡынан сығып түләнә.

Һәр кем хоҡуҡтарын белеп эш иткәндә, был хаҡта ваҡытында кәрәкле урынға дәғүә белдергәндә, бәлки, гәзит-журналдарҙы таратыу эшен дә яйға һалып булыр ине, тип ышанғы килә. Ил төкөрһә күл була, йәиһә күмәкләгән яу ҡайтарған, тип бушҡа ғына әйтмәгән бит халыҡ. Күп осраҡта гәзит уҡыусылар дәғүәһен редакцияға шылтыратып белдерә. Редакцияның почта эшенә ҡыҫылышы булмаһа ла, ул һәр уҡыусыһының мәнфәғәтен ҡайғыртырға, проблеманы яйға һалырға тырыша. Гәзит килмәүен бер кемгә лә хәбәр итмәгән уҡыусыларыбыҙ ҙа бихисап.

Үҙ тармағында тәртип булдырыу, гәзит-журналдар таратыу сифатын күтәреү буйынса "Рәсәй почтаһы"на уйланырлыҡ урын бар. Ҡыйбат хаҡтарға ҡарамай, гәзит-журналдарға яҙылып та, уны ала алмағандар был хаҡта редакцияларға шылтыратып белдерә ала. Редакция хеҙмәткәрҙәре һеҙҙең дәғүә буйынса кәрәкле етәкселәргә хат яҙып, хоҡуҡтарығыҙҙы яҡларға тырышыр. Шулай уҡ 8 (347) 276-66-44 һандарына, "Рәсәй почтаһы" ның Башҡортостан буйынса идаралығының "ҡыҙыу линия"һына ла шылтыратырға мөмкин. Бөтәбеҙ ҙә бер һүҙҙән булып, етешһеҙлектәрҙе ваҡытында еткереп, дәғүәләребеҙҙе белдереп барһаҡ, проблеманы саҡ ҡына булһа ла яйлап булмаҫ инеме икән, тигән өмөт бар. "Рәсәй почтаһы" илебеҙҙәге иң ҙур бороңғо тармаҡтарҙың береһе. Тик иҫәп менән сифаттың тура килмәүе ғорурлыҡ тойғолары уятмай. Тармаҡ, үҙ өлкәһендәге проблемаларҙы халыҡ иңенә һалмай, сифатлы хеҙмәтләндереү юлын табырға тейеш.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ШОС илдәренең Ҡытайҙағы презентация майҙансығында Башҡортостандың иҡтисади ҡеүәте күрһәтелде. Алтынсы Евразия иҡтисади форумы сиктәрендә Шэньси провинцияһының Сиань ҡалаһында үткән ШОС илдәре тауарҙары күргәҙмәһе Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған 15 илде, диалог буйынса партнерҙарҙы һәм күҙәтеүселәрҙе берләштерҙе. "Өфө-2015" ШОС БРИКС офис-төркөмөнөң матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостан экспозицияһын өс меңдән ашыу кеше ҡараған.

✓Йыл башынан Башҡортостанда аҙыҡ-түлеккә хаҡтар туғыҙ процентка, Волга буйы федераль округында - 9,3, Рәсәйҙә 9,8 процентка артҡан. Рәсми статистика буйынса, республикала ҡулланыусыларҙың йыллыҡ инфляцияһы 114,5 процент кимәлендә. Рәсәй буйынса - уртаса 115,8 процент. 1 октябрҙә үткән Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы штаб ултырышында Премьер-министр урынбаҫары Илдар Тимерғәлин шундай мәғлүмәттәр килтерҙе.

✓Көҙгө саҡырылышта Башҡортостандан 6300-ҙән ашыу егет хәрби хеҙмәткә алынырға тейеш. Рәсәй Президенты "2015 йылдың октябрь - декабрендә Рәсәй Федерацияһы граждандарын хәрби хеҙмәткә саҡырыу һәм саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәт үтеүселәрҙе хәрби хеҙмәттән бушатыу тураһында"ғы указға ҡул ҡуйҙы.

✓Башҡортостанда хәрби хеҙмәткә саҡырылыш мәсьәләләре буйынса "ҡыҙыу бәйләнеш" телефондары эшләй. Республиканың Хәрби комиссариатына (347) 228-02-92 (консультация-хоҡуҡи пункт - көн һайын иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем), 276-65-76 (юридик бүлек), 253-13-48 (граждандарҙы хәрби хеҙмәткә саҡырыу һәм әҙерләү бүлеге) телефондары буйынса шылтыратырға мөмкин. Өфө гарнизонының хәрби прокуратураһы - 250-05-10. Тиҙ психологик ярҙам - 8-800-7000-183.

✓Ошо арала Башҡортостанда 26,5 гектар урман янды. Белорет районының Отнурок ауылынан һигеҙ саҡрым алыҫлыҡта дүрт гектар майҙанда янғын теркәлгән. Икенсе янғын Туймазы районы Ҡандра-Ҡотой ауылынан дүрт саҡрым алыҫлыҡта сыҡҡан. Хәҙер ике ерҙә урман яна. Тәүгеһе Йылайыр районының Иҫке Яҡуп ауылынан һигеҙ саҡрым алыҫлыҡта урындағы халыҡтың ғәйебе буйынса сыҡҡан. Йәнә бер янғын Күгәрсен районының Ибраһим ауылы эргәһендә теркәлгән.

✓ *Бынан тыш, ҡалала фермерҙар һәм ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәр өсөн сауҙа урындары бүленә һәм уларҙың һаны арттырыла бара. Әммә бөгөн урындарҙың 62 проценты ғына биләнгән, ҡалғандары буш тора.*



## ЕТЕ РАЙОН

**Калинин районы.** Яңы уҡыу йылы башланыу менән райондың барлыҡ мәғариф учреждениеларында спорт, мәҙәни саралар, байрамдар, экскурсиялар осоро башланды. "Белая река" Балалар экологик-биологик үҙәгенең "Йәш крайҙы өйрәнеүселәр" берекмәһе тәрбиәләнеүселәре Планетарийҙа "Майя цивилизацияһының йыһан серҙәре" программаһын ҡараһа, 316-сы балалар баҡсаһында спорт-уйын ярыштары үтте. 87-се мәктәптә балаларҙың именлеге айлығы сиктәрендә янғынға ҡаршы хәүефһеҙлек буйынса фильм күрһәтелеп, дәрес уҙғарылды.

**Совет районы.** Башҡортостан Урмансылары паркында "Йәшә, урман!" һәм "Таҙа урман" тип аталған экологик өмәләр үтте. Территорияны таҙартыуҙан тыш, яңы ылыҫ ағастары ла ултыртылды. Сара һуңында мәҙәни ял ойошторолдо.

**Дим районы.** Районда "Толпар" шахмат-шашка клубы асылды. 137 квадрат метр майҙанлы бина "АғиҙелИнвестСтрой" компанияһынан халыҡҡа бүләк булды. Ул көнөнә 150 кешене хеҙмәтләндереү ҡеүәтенә эйә. Тантанала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов бындай клубтарҙың ҡаланың һәр районында ла буласағына ышаныс белдерҙе.

**Киров районы.** Софья аллеяһы дүртенсе тапҡыр халыҡ байрамын уҙғарыу урынына әйләнде. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, сит илдәрҙән килгән ҡунаҡтар унда XXV Халыҡ-ара Аксаков байрамын тамаша ҡылып, XIX быуат мөхитенә сумды. Быйыл беренсе тапҡыр сарала ҡаланың барлыҡ райондары ла ҡатнашты. Традицион Аксаков балы алдынан ҡатнашыусылар яҙыусының бюсына сәскәләр һалды.

**Ленин районы.** 1-се, 11-се мәктәптең, 2-се башҡорт лицейының 8-се синыф уҡыусылары өсөн Халыҡтың мәшғүллек үҙәге профориентация көнө үткәрҙе. Белгестәр "Һөнәрҙәр донъяһы" фильмын күрһәтеп кенә ҡалманы, уҡыусыларҙың ниндәй һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныуы барлығын компьютер тесты аша тикшерҙе. Сарала барлығы 120 үҫмер ҡатнашты.

**Орджоникидзе районы.** "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексы майҙанында үткән "Милләттәр кросы" ысын мәғәнәһендә спорт һәм сәләмәт йәшәү рәүеше байрамы булды. Унда урындағы халыҡ ҡына түгел, мәктәп уҡыусылары ла, үҫмерҙәр клубтары тәрбиәләнеүселәре лә, дауахана, завод һәм предприятиелар хеҙмәткәрҙәре лә ҡатнашты. Призлы урын алыусыларға Маҡтау ҡағыҙҙары, дипломдар һәм миҙалдар тапшырылһа, дүртенсе-алтынсы урында ҡалыусыларға киноға билет таратылды.

**Октябрь районы.** Республика адреслы инвестиция программаһы сиктәрендә 2016-2017 йылдарға Нуғай ауылын үҫтереүгә 28 миллион һум самаһы аҡса бүлеү планлаштырыла. БР Хөкүмәтендә белдереүҙәренсә, былтыр ошо программаны тормошҡа ашырыу яҡшы һөҙөмтәләр күрһәткән: барлыҡ тармаҡтар буйынса сафҡа индерелгән объекттарҙың һаны артҡан, тамамланмаған төҙөлөш кәмегән, проблемалы объекттар бөткән.

## ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Башҡортостан аграр төбәк булараҡ, донъяла барған сәйәси болғаныштарҙың эҙемтәләре әллә ни тойолманы ла кеүек. Ауыл кешеһе элек нисек шәхси хужалығы ярҙамында көн күргән, һаман да шулай йәшәүен дауам итә. Ә бына цивилизация тормошона өйрәнеп киткән ҡала кешеһе был йәһәттән ниндәй үҙгәрештәр тойҙо, ҡулланыу баҙары уға ниндәй "сюрприздар" әҙерләне икән? Ошо мәсьәләгә асыҡлыҡ индереү йәһәтенән Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Сауҙа һәм хеҙмәттәрҙе координациялау идаралығы начальнигы Ольга ЗАВЬЯЛОВАҒА мөрәжәғәт иттек.**



# ҮҘЕБЕҘҘЕКЕ - ҮҘӘКТӘ!

- Рәсәй территорияһына айырым аҙыҡ-түлек тауарҙарына эмбарго индереү ситләтеп кенә булһа ла **бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа** йоғонто яһаны. Йәғни ауыл хужалығы продукцияһын етештереүсе һәм ҡулын һәр ваҡыт пульста тотоусы ҡайһы бер эшҡыуарҙар мәлде оҫта файҙаланып, етештереү күләмен һәм һатыу баҙарын киңәйтеүгә өлгәште. Улар ҡулланыу баҙарындағы һәр үҙгәреште файҙаланып ҡалырға тырыша. Ватан етештереүсеһен хуплау маҡсатында "Башҡортостан продукты" маркаһы булдырылды һәм ошо марка аҫтында сауҙа нөктәләре асылып, тиҙ арала үҙенең һатып алыусыһын тапты. Шул арҡала ҡаланың сауҙа баҙарында тотороҡлоҡ хөкөм һөрә, тиергә мөмкин: хаҡтар ҡапыл үргә һикермәне, теге йәки был тауарҙы һатыу, уларҙың дефициты проблемаһы юҡ. Шулай булмау мөмкин дә түгел, сөнки ҡалалағы 6 мең сауҙа һәм йәмәғәт туҡланыуы предприятиеларының 99 проценты шәхси ҡулдарҙа һәм эшҡыуарҙар яйлап булһа ла заман ҡуйған яңы талаптарға эйәрә. Был йәһәттән хакимиәт тә уларға уңайлы шарттар тыуҙырырға тырыша: ҡалалағы 26 сауҙа һәм сауҙа-сервис комплексы ауыл хужалығы продукцияһын етештереүселәргә сауҙа урындары бирә. Өҫтәүенә тағы ла дөйөм майҙаны 250 мең квадрат метр тәшкил иткән 29 ҙур сауҙа объекты төҙөлә. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда етештерелгән һәм социаль әһәмәттәге аҙыҡ-түлек тотош ҡулланыу баҙарының 60 процентын алып тора.

Ҡалала стационар булмаған сауҙа селтәре 1479 киоск һәм павильонды үҙ эсенә ала, шулай уҡ "лоток", "автоцистерна", "автофургон" тибындағы 680 объектҡа урын бүленгән. Бынан тыш, ҡалала фермерҙар һәм ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәр өсөн сауҙа урындары бүленә һәм уларҙың һаны арттырыла бара. Әммә бөгөн урындарҙың 62 проценты ғына биләнгән, ҡалғандары буш тора.

**Халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү** өлкәһендә баш ҡалала 2301 предприятие һәм шәхси эшҡыуар эшләй, уларҙа дөйөм алғанда 18 мең кеше эш менән тәьмин ителгән. Эконом-класс предприятиелары киң күләмле хеҙмәт күрһәтә. Ғөмүмән, бәләкәй эшҡыуарлыҡ өҫтәмә эш урындары булдырыуға, хеҙмәт ассортиментын киңәйтеүгә, һалым базаһын тулыландырыуға, дәғүәселекте, сауҙа, йәмәғәт туҡланыуы, көнкүреш хеҙмәте өлкәһен артабан үҫтереүгә инвестициялар йәлеп итеүгә йоғонто яһай.

Ҡулланыу баҙарын ауыл хужалығы продукцияһы менән тултырыу маҡсатында ауыл хужалығы йәрминкәләре тамамланыу менән апрелдән алып фермер хужалыҡтарына һәм шәхси хужалыҡта етештерелгән ауыл хужалығы продукцияһы менән сауҙа итеү өсөн 9 яңы майҙансыҡ асылды һәм унда 500 урын булдырылды.

Рәсәйгә ҡарата санкциялар индереү бәләкәй эшҡыуарлыҡ өсөн яңы мөмкинлектәр асһа, **туҡланыу индустрияһы өсөн**, киреһенсә, кире йоғонто яһаны. Сөнки премиум-класс предприятиелары, тейешле сеймал булмау сәбәпле, ресторандарын ябырға йәки уларҙың форматын үҙгәртеп, ватан продукцияһын ҡулланып, уртаса хаҡтар сегментына төшөргә мәжбүр булды. Бөгөн уларҙа уртаса чек хаҡы ике тапҡырға тигәндәй кәмене. Һорау булмағас, рестораторҙар клиенттарҙы һаҡлап ҡалыу өсөн яңынан-яңы ысулдар эҙләй. Ҡайһы бер предприятиелар хаҡтарҙы 15-20 процентҡа тиклем төшөрһә, башҡалар бизнес-ланч өсөн махсус меню төҙөнө. Шулай уҡ лояллек программалары һәм ташламалар индерә башланылар, хатта ҡуртым хаҡтары кәметелеүгә ҡарамаҫтан, йәмәғәт туҡланыуы клиенттарын юғалтмаҫ өсөн осһоҙ һәм ылыҡтырғыс булырға мәжбүр булды. Бындай шарттарҙа һығылмалы хаҡтар сәйәсәте булған ойошмаларҙың ғына артабан да йәшәү мөмкинлеге бар.

Йәйгеһен Өфө ШОС һәм БРИКС дәүләттәре башлыҡтарының саммиттарын үткәргән ваҡытта йәмәғәт туҡланыуы теләһә ниндәй кимәлдәге ҡунаҡтарҙы ла ҡаршы алыу мөмкинлегенә эйә икәнен раҫланы. Әммә бында ла проблемалар бар: баш ҡалала башҡорт һәм рус кухняһы ресторандары юҡ. Булған ресторандарҙа ла милли кухня ризыҡтары күренмәй. Башҡортостан кеүек бай тарихлы һәм бай мәҙәниәтле күп милләтле республикала килгән ҡунаҡтарҙы алып барырлыҡ милли кухня булмауы, әлбиттә, ғәфү ителмәй торған хәл.

Булып үткән ҙур саралар Өфөнө бөтөн донъяға танытты һәм киләсәктә баш ҡалаға **туристар ағымы** көсәйер тигән өмөт бар. Әлеге ваҡытта ҡала хакимиәте тарафынан Өфөнөң имиджын формалаштырыу буйынса эшмәкәрлек алып барыла. Был уның инвестицион ғына түгел, туристик ылыҡтырыуын да арттырыр тигән өмөт бар. Был йәһәттән махсус программа эшләй. Ул эске туризмды ла үҙ эсенә ала һәм өҫтөнлөклө йүнәлеше булып пенсионерҙар, инвалидтар, социаль приюттарҙа тәрбиәләнеүселәр, етем балалар, мәктәп балалары өсөн социаль туризмды, мәғлүмәт ресурстарын үҫтереү тора. Программаны тормошҡа ашырыу осоронда барлығы 13 социаль тур ойошторолдо. Беренсе тапҡыр туристик эшмәкәрлек тураһында мәғлүмәттәр йыйылып, эшкәртелде, туристик хеҙмәттәр баҙары өйрәнелде һәм Өфө ҡалаһының туристик паспорты төҙөлдө. Шулай уҡ туристик ресурстар мәғлүмәттәре банкы булдырылған, ҡунаҡхана һәм туристик бизнес предприятиелары дислокацияһы тормошҡа ашырыла. Даими рәүештә туристик ойошмалар эшмәкәрлеге, эске туризм һәм килгән туристар буйынса социологик тикшеренеүҙәр мониторингы алып барыла. Һуңғы ваҡытта ҡалала Мәғлүмәт-туристик үҙәктәр асылды. Уларҙың төп бурысы булып баш ҡала халҡы һәм килгән ҡунаҡтар өсөн уңайлы мәғлүмәт мөхитен булдырыу, Өфөнөң туристик продуктын Рәсәй һәм халыҡ-ара туристик баҙарға сығарыу тора.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Рәсәй башҡорттары" программаһы сиктәрендә Өфөгә Пермь крайы Барҙа районынан мәктәп делегацияһы килде. Сәфәрҙе ойоштороусы - Башҡортостандың Халыҡтар дуҫлығы йорто. Өфө буйлап экскурсия Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатынан башланды. Башҡортостандың Милли музейы балаларҙа ҙур тәьҫораттар ҡалдырҙы. Ҡунаҡтар Дуҫлыҡ монументына, Салауат Юлаев һәйкәленә барҙы һәм башҡа иҫтәлекле урындарҙа булды.

✓Башҡортостанда 11 октябрҙә Республика көнөн байрам итеүгә бәйле пенсия таратыу ваҡыты үҙгәрҙе. Өфө һәм Благовещен ҡалаларында, Благовещен, Кушнаренко һәм Өфө райондарында ул 7 октябрҙә - 7 һәм 10, 8 октябрҙә - 8 һәм 11, 9 октябрҙә - 9 һәм 12 октябрь өсөн таратыласаҡ. Рәсәй Пенсия фонды төбәк бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, республиканың башҡа райондары һәм ҡалаларында халыҡ түләүҙәрҙе графикка ярашлы аласаҡ.

✓Өфөнөң Октябрь районындағы 4600 гараждың 2600-ө һүтелергә тейеш. Баш ҡала хакимиәтендә ошондай ҡоролмаларҙы асыҡлау буйынса аналитик эш ойошторолған. Күптән түгелге фажиғәле хәлгә бәйле ҡала хакимиәте башлығы тейешле хеҙмәттәргә Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәген һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарын йәлеп итеп, мәктәптәр эргәһендә законһыҙ һалынған гараждарҙы һүтеүҙе әүҙемләштерергә ҡушты.

✓Башҡортостанда 3021 мең тонна иген йыйып алынған. Гектарынан уртаса уңыш 17,9 центнер тәшкил итә. Был былтырғыға ҡарағанда 433 мең тоннаға күберәк. Ауырғазы (116 мең тонна), Баймаҡ (106,5 мең), Дәүләкән (103,3 мең), Илеш (120 мең), Мәләүез (144 мең), Стәрлетамаҡ (171,8 мең) һәм Саҡмағош (134,6 мең) райондары игенселәре республика бураларына тос өлөш индерҙе - 100 мең тоннанан ашыу иген һалды. Әле 1696 мең гектар (97 %) майҙанда иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар сабылған, 1685 мең гектарҙа (97 %) - һуғылған.

✓Өфө ғаилә уңышһыҙлығын иҫкәртеү һәм балаларға ярҙам итеү буйынса эштә лидер тип танылды. Башҡортостандың баш ҡалаһы "Муниципаль проект" номинацияһында диплом менән бүләкләнде. "Ставрополь" күргәҙмә үҙәге залдарында ойошторолған "Балалар хаҡына бергәләп" VI Бөтә Рәсәй күргәҙмә-форумында 62 төбәктән 560 делегат ҡатнашты.

КӨН ҠАҘАҒЫ

# ВАҠИҒАЛАР УРТАҺЫНДА...

## "Ислам дәүләте" хәүефе

**Был аҙнала донъя йәмәғәтселеге игтибарын үҙенә йәлеп иткән бер нисә мөһим ваҡиға булды. Улар иҫәбенә Нью-Йоркта булып үткән Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Генераль Ассамблеяһының 70-се сессияһын, Рәсәй һәм АҠШ Президенттары осрашыуын һәм Рәсәй хәрби авиацияһының Сириялағы ИГИЛ террористары урынлашҡан урындарҙы утҡа тотоуын индерергә мөмкин. Уларҙы берләштергән дөйөм тема - "Ислам дәүләте" тарафынан көсәйгән хәүеф һәм уны хәл итеү юлдары.**



Ассамблеялағы сығышында Рәсәй башлығы күп темаларға туҡталды. Ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт итеп, Владимир Путин: "Президент Әсәдтың хөкүмәт ғәскәрҙәренән һәм курд ополчениеһынан тыш, Сирияла "Ислам дәүләте" һәм башҡа террористик ойошмалар менән көрәшеүселәр юҡ икәнлеген, ниһайәт, танырға кәрәк", - тине. Ул шулай уҡ Көнбайыштың ундағы баш күтәреүселәрҙе ҡоралландырыуын ҡаты тәнҡитләне һәм уларҙың һуңынан ИГИЛ ягына күсеүҙәрен билдәләне. Владимир Путин шулай уҡ донъяла яуызлыҡ һәм кешене күрә алмаусанлыҡ сәсеүсе террористарға ҡаршы тороусы халыҡ-ара көс булдырыу мөһимлеген һәм ул коалицияның төп көүәтен нәҡ мосолман илдәре тотоп торорға тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Рәсәй Президенты шулай уҡ Яҡын Көнсығыштағы һәм Төньяҡ Африкалағы хәлдәргә тышҡы агрессив ҡыҫылыуҙар һөҙөмтәһендә ваҡиғаларҙың кире боролош алыуына борсолоу белдерҙе. "Әлбиттә, ундағы халыҡ үҙгәрештәр булыуын теләне. Ләкин улар реформалар, демократия һәм үҫеш урынына йәбер-золом, хәйерселек һәм бәлә-ҡазаларға дусар булды", - тине ул. Ошо ситуацияны булдырыусылар үҙҙәренең ниндәй мәғәнәһеҙлек тыуҙырыуын аңлаймы икән, тигән һорауына үҙе үк: "Үҙ-үҙенә ныҡ ышанған, үҙенең үҙенсәлекле булыуына һәм язаһыҙ ҡалыуына инанған сәйәсәттән баш тартмаусылар был һорауға яуап бирә алмаясаҡ", - тип нығымта яһаны. Европаны баҫып алған ҡасаҡтар проблемаһын юҡ ителгән дәүләтселектәрҙе яңынан тергеҙеү генә ыңғай хәл итергә мөмкинлек бирәсәк, тине Рәсәй башлығы.

Украиналағы хәл-ваҡиғаларға туҡталып, Владимир Путин, илдәге граждандар һуғышы башланыуға тыштан һалынған ҡотҡо булышлыҡ итте, тип билдәләне. Рәсәй Президенты тик Минск килешеүҙәрен тулы һәм намыҫлы үтәү генә был ҡан ҡойошто туҡтатырға мөмкин, тигән фекерен еткерҙе трибунан һәм ҡурҡытыу, ҡорал көсө менән Украинаның бөтөнлөгөн һаҡлап ҡалыу мөмкин түгел, тип аныҡланы.

Рәсәйгә ҡаршы ҡулланылған санкциялар хаҡында ла үҙ фекерен белдерҙе ил Президенты. Бөгөнгә көндә уларҙың бер яҡлы ғына булыуы ҡағиҙәгә әйләнә барыуын һәм сәйәси маҡсаттарҙы күҙ уңында тотоуҙан бигерәк, баҙарҙағы конкуренттарҙы юҡ итеү ысулы булараҡ ҡулланыла башлауын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Тантаналы ултырыштан һуң Владимир Путин АҠШ Президенты Барак Обама менән осрашты. Уның һөҙөмтәләре буйынса Владимир Путин: "Һөйләшеү ихлас булды һәм ике яҡтың дөйөм мәсьәләләр өҫтөндә бергә эшләй алыу мөмкинлеген күрһәтте. Ғәжәпкә ҡаршы, беҙҙең күп нәмәлә фекерҙәребеҙ тура килә. Шулай ҙа ҡапма-ҡаршылыҡлы ҡараштар ҙа юҡ түгел", - тине.

Осрашыуҙан һуң уҙған матбуғат конференцияһында Владимир Путин Сирияла Рәсәй һауа ғәскәрҙәре көстәрен ҡулланыу мөмкинлеген ҡарауы тураһында раҫланы. Ләкин был операциялар халыҡ-ара нормаларға тура килергә, йәғни Сирия хөкүмәте ярҙам һорап мөрәжәғәт итергә тейеш, тине ул. Һәм Бәшәр Әсәдтең "Ислам дәүләте" террористик төркөмөнә ҡаршы көрәштә ярҙам итеү үтенесе оҙаҡ көттөрмәне. 30 сентябрь Рәсәй Совет Федерацияһы Рәсәй Президентына Сирияла РФ Һауа көстәрен ҡулланыуға рөхсәт бирҙе. Шул уҡ көндә Рәсәй авиация төркөмө 20 осош эшләп, террористарҙың 8 объектын - һуғыш припастары, яғыулыҡ-майлау материалдары һаҡланған складтарҙы, идара итеү пункттарын, бәйләнеш ҙәүкәтрен һәм транспорт саралырын утҡа тотто.

Рәсәйҙең Сириялағы конфликтҡа ҡушылыуы илдә ҡапма-ҡаршылыҡлы бәхәстәр тыуҙырҙы. Берәүҙәр, был аҙым илде һуғыш ҡапҡанына тығыу, тип ҡабул итһә, икенселәр уның ваҡытлы һәм кәрәк булыуына баҫым яһай. Ә ысынында Бәшәр Әсәдҡа ИГИЛ менән көрәштә ярҙам итеү кәрәкме? Бында "юҡ", тиеүгә ҡарағанда, "эйе", тип яуап биреү дөрөҫөрәктер. Ни тиһәң дә, потенциаль хәүефте алыҫта һәм тиҙ юҡ итеү, Рәсәй биләмәһендә һуғыш алып барғансы, башҡа территорияла көрәшеү күпкә яҡшыраҡ. Ә ИГИЛдың яңы баш ҡалҡыта ғына башлаған, көсһөҙ сағын ҡулдан ысҡындырыу сәбәпле артабанғы көрәш ауыһыҙ һәм ҡыҙыу буласаҡ. Шуға күрә, терроризмға ҡаршы берҙәмлек күрһәткәндә генә, уның тамырҙары Рәсәйгә һәм донъяның башҡа илдәренә үтеп инә алмаҫлыҡ шарттар тыуҙырырға мөмкин.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

ИҒТИБАР!




# ӘЙҘӘГЕҘ, БАШ ҠАЛАҒА БАЙРАМҒА!

(Башы 1-се биттә).

Байрам 9 октябрҙә Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыу менән башлана. Ошо уҡ көндө "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Республика көнөнә арналған тантаналы йыйылыш үтә. Төрлө рәсми, мәҙәни, спорт һәм күңел асыу саралары менән бер рәттән, яңы социаль объекттарҙы сафҡа индереү ҙә ошо көндәргә билдәләнгән. Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов белдереүенсә, Республика көнө ҙур халыҡ байрамына әүереләсәк, ҡаланың бөтөн райондарында ла мәҙәниәт усаҡтарында, концерт майҙансыҡтарында, ял итеү парктарында алдынғы хеҙмәткәрҙәрҙе ҡотлау тантаналары, концерттар уҙасаҡ. Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы, "Нур" Өфө дәүләт татар театрында, Өфө балалар филармонияһында, Ҡала мәҙәниәл итеү үҙәгендә, балалар ижады йорттарында ла ҡыҙыҡлы программалар ҡаралған. Мәктәптәр, гимназиялар, лицейҙар, музыка мәктәптәре уҡыусылары һәм балалар баҡсалары, балаларға өҫтәмә белем биреү учреждениелары тәрбиәләнеүселәре араһында "Дуҫлыҡ сәскәлеге" ҡала балалар милли мәҙәниәттәр фестивале ойошторола. "Халыҡ йолаларының тере шишмәһе" тип аталған биҙәүҡулланма халыҡ ижады буйынса иң яҡшы эштәр күргәҙмәһе эшләйәсәк. Унда республиканың бөтөн райондарынан балалар ҡатнаша. Мәҙәниәт һәм сәнғәт, мәғариф буйынса идаралыҡтар музыка, нынлы сәнғәт һәм сәнғәт мәктәптәрендә, шулай уҡ ҡаланың урта белем биреү усаҡтарында белем алыусы иң яҡшы уҡыусыларға стипендиялар тапшыра. Ҡаланың Физик культура һәм спорт комитеты баскетбол буйынса ҡала беренселеге, ушу буйынса чемпионат һәм "Спорт һәм сәләмәтлек" спартакиадаһы сиктәрендә "Народный" тигән фестиваль үткәрә. "Йәш ғаилә - 2015" ҡала конкурсының йомғаҡлау этабы ла ошо көндәрҙә буласаҡ.

11 октябрь Ленин исемендәге майҙанда "Оҫталар ҡалаһы" заманса һәм традицион һөнәрселек һәм кәсепселек күргәҙмә-йәрминкәһендә оҫталар үҙ эштәрен тәҡдим итмәксе. Ҡайын туҙынан эшләнгән әйберҙәр, ҡорама ысулы менән тегелгән кәрәк-яраҡтар, таш, балсыҡ, ағас сувенирҙар, тире һәм йөндән тегелгән милли кейемдәр, кейеҙ һәм тиренән тегелгән аяҡ кейемдәре, бал һәм унан эшләнгән башҡа продукция, ювелир изделиелары ҡала халҡы һәм ҡунаҡтарының күңеленә хуш килер, моғайын. Ошонда уҡ милли ризыҡтарҙы тәмләргә мөмкин буласаҡ. Сара көндөҙгө сәғәт 12-лә башлана.

10-11 октябрҙә ҡаланың 16 майҙанында ауыл хужалығы тауарҙары йәрминкәләре ойошторола. Унда республика райондарынан яҡынса меӊ ярым машина йәшелсә, ит, һөт, бал килтерәсәк тип көтөлә.

11 октябрь киске сәғәт 7-лә Рус дәүләт академия драма театры алдындағы майҙанда байрамса программа башлана. Баш ҡаланың сәнғәт оҫталары, коллективтары, шул иҫәптән "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле тамашасылар алдында сығыш яһаясаҡ. Байрам саралары фейерверк менән тамамлана.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Астма

❖ 10 грамм етен орлоғо, укроптың "Фенхель" тигән сортының 10 грамм орлоғон бергә ҡушып болғарға. 4 балғалаҡ ҡатнашмаға 1 стакан һыу ҡойоп, 2 сәғәт тәнәтергә һәм утҡа ҡуйып, 2-3 минут ҡайнатырға. Шуны көнө буйы эсеп бөтөргә.

### Тән бешкәндә...

❖ Бешкән урынға 10-30 минут дауамында боҙһоҙ һалҡын һыу ҡойоп торорға. Шулай уҡ спирт һөртөргә була, спирт быуға әйләнеп, бешкән урындан эҫелекте алып бөтөрә.

### Үлән ваннаһы

❖ Бауыр һәм үт ҡыуыығы ауыртҡандарға үләнле, эҫе һыулы ванна файҙалы. Тигеҙ өлөштә ер тамыры (аир), ҡайын япрағы, күксәсәк (василек), арсан (вереск), шинмәсәл (бессмертник) алып, ҡайнар һыуҙа 1,5-2 сәғәт тәнәтергә һәм 1:10 өлөш күләмендә һыу ҡушып, ванна инергә.

### Үт юлы

❖ Үт юлы ауыртһа, шешһә, 1 стакан ҡайнаған һыуға 1 балғалаҡ ҡайын бөрөләрен һалып, 1 сәғәт тәнәтергә һәм ашарҙан арты сәғәт алда стакандың өстән бер өлөшө күләмендә аҙ-аҙ ғына йотоп эсергә.

### Шпор

❖ Үксә шпорынан, терһәк һәм тубыҡтарҙағы ауыртыуҙан ҡотолоу өсөн кесертккәнде ит турағыстан үткәреп, дегәнәк япрағының аҫҡы яғына һылап, ауыртҡан ергә ябырға, полиэтилен менән йылытып, компресты төнгөлөккә ҡалдырырға.

❖ Тигеҙ өлөштә шыйыҡ глицерин, һеркә эссенцияһы, араҡыны ҡушып, үксәгә һөртәһең. Бармаҡ аралары боҙолғанда ла килешә.

### Аңҡау ауыртһа...

❖ Аңҡау ауыртһа, пародонтоз булһа, дарыуханала һатыла торған дегетте иртән һәм кисен ауыртҡан ерҙәргә һөртөгөҙ. Бер аҙ яндырыр, әммә 2-3 көндән ауыртыу бөтәр, сөнки дегет микроб-фәләнде тиҙ үлтерә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Хәҙерге заманда төрлө сит ил геройҙары тураһында күп мәғлүмәт алып, шуларға оҡшарға тырышҡан тиҫтерҙәрем өсөн был дәрестәр бик ҡыҙыҡлы булыр ине. Үҙебеҙҙең батырҙар менән ғорурланырға кәрәк.*

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ӨЙРӘК ЙОЛҠҠАНДЫҢ...

## гонаһы булмай

**Башҡорт фольклорында ай менән ҡояштың өйрәккә әүерелеүе, өйрәктең ерҙе барлыҡҡа килтереүсе булараҡ сығыш яһауынан тыш, изгеләштерелгән был ҡош тау-урмандар эйәһе булараҡ та ҡабул ителә.**

Яңауыл районында яҙып алынған "Йөгәмәш тауы" легендаһында һөйләнеүенсә, бейек тауҙың башында күл булған. Был тауҙың башына менеп етеүсе булмаған. Ошо күлдә инә өйрәк менән ата өйрәк йәшәгән, улар тауҙың эйәһе булған, тип һөйләгәндәр. Бер ваҡыт бер һунарсы был тауҙың башына менеп, өйрәк атып алған. Ата өйрәк һауаға күтәрелеп, тауҙы уратып оҙаҡ осоп йөрөгән, һуңынан ҡаяға ташланып, һәләк булған. Тап шул мәлдә дауыл ҡупҡан, көслө ел ағастарҙы тамырынан һурып алған, тау тетрәгән һәм тау башындағы күл юҡҡа сыҡҡан. Уның урынында тәрән бер соҡор ғына ҡалған. Һунарсы атып алған өйрәген өйөнә алып ҡайтҡан. Өс көн (бер вариантта ете көн) өйрәк ите ҡаҙанда ҡайнаған, әммә барыбер бешмәгән, ташҡа әйләнгән. Хужалар уны ташларға мәжбүр булған. Тау ҙа яйлап ер аҫтына киткән.

Легенданың тағы бер вариантында әйтелеүенсә, был өйрәк тау башындағы күлдең эйәһе булған. Бер һунарсы уның эйәһе - өйрәкте атып алғас, күл кипкән, ти. "Аҡбуҙат" эпосында ла өйрәк һыу эйәһе булараҡ ҡабул ителә, алтын өйрәк - Нәркәс һыу аҫты батшаһы Шүлгәндең ҡыҙы.

Борай районында яҙып алынған мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, өй эйәһе төрлө ҡош-хайуанға, шул иҫәпкә өйрәккә лә әүерелә ала. Бындай күренештәр башҡа халыҡтар фольклорында ла осрай. Боронғо славян халҡы һыу эйәһе өйрәк булып күренә, тигәнгә ышанған. Ул ямғыр яуҙырыусы, йәшен йәшнәтеүсе илаһи йән. "Өйрәктәр тауышланып ҡысҡырышһа - ямғырға, тынлыҡ һаҡлаһалар - йәшенгә", тигән әйтем бөгөн дә бар.

Изге ҡош булараҡ, өйрәктең кеше яҙмышын яҡшы яҡҡа үҙгәртеү һәләте лә бар. Бер әкиәттә геройға ярҙам итеү өсөн өйрәк батша баҡсаһына төшөп алма урлаған яуыз ҡоштарҙы суҡып үлтерә. "Ҡараса батыр", "Әхмәт батыр менән Ҡасим батыр" әкиәттәрендә өйрәк батырға батша ҡыҙын эҙләп табырға ярҙам итә, үлтерелгән геройҙы терелтеү өсөн тере һәм үле һыу алып килә. "Еҙтырнаҡ" әкиәтендә йәш көтөүсегә һыу аҫты батшалығында йәшәгән аттарҙы бүләк итә, "Ике туған" әкиәтендә өйрәк ике алтын йомортҡа һалып, уларҙы мохтажлыҡ кисереп йәшәүҙән ҡотҡара.

Нух бабай хазинаһы тураһындағы легендала өйрәк ошо хазиналарҙың хужабикәһе була. Төндәрен ул бабайға килер булған. Ҡарт үҙенең хужалығындағы өйрәктәрҙең береһен һуйып, уны алтынға алыштыра торған булған. "Аҡбуҙат" эпосында ла алтын өйрәк төп геройға күп һанлы мал бүләк итә. Пермь крайының Барҙа районы Солтанай ауылында бер тарих һөйләгәйнеләр: Ғата исемле хәҙрәт күлгә барған һәм унда йөҙөп йөрөгән алтын өйрәкте күреп ҡалған. Уғын тоҫҡап атҡан һәм ҙур байлыҡтың хужаһы булған.

Башҡорттарҙа шундай ышаныу бар: өйрәк йәки ҡаҙ йолҡканда шул кешенең бөтөн гонаһтары бөтә, ҡаурыйҙарҙағы магик көс кешене киләсәктә лә ауырыу-сирҙәрҙән һаҡлап тора. Өйрәк ҡойроғон баланың башлығына тегеп ҡуйыу - йәш баланы күҙ тейеүҙән һаҡлаусы иң көслө сара. Тәҙрә яңаҡтарына өйрәк һүрәтен төшөрөп ҡуйыу ҙа ошо маҡсаттан сығып эшләнгән булырға тейеш. Ирҙәрҙең билбауы - ҡәмәрҙәрҙә өйрәк башы формаһындағы көмөш биҙәүҙәр осрай.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БАЛАЛАР ҠОРО

# ТЫУҒАН ИЛЕҢДЕ...

## әсәйеңде ятраҡан кеүек ярат



**Бөгөн беҙ балаларҙың рухи тәрбиәһенә, илһөйәрлек тойғоһон үҫтереүгә иғтибарҙы тейешенсә бүлеп еткерәбеҙме икән, тигән һорау күптән борсой. Ошолар хаҡында балалар үҙҙәре ни уйлай икән? Республика иҡтисад лицей-интернатының 11-се синыф уҡыусылары Нияз Харрасов, Гөлназ Кинйәбаева һәм Ренат Ямалтдинов менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**➔ Һеҙ илһөйәрлекте нисек аңлайһығыҙ?**

**Нияз:** Илһөйәрлек - ул тыуған илеңде ғаиләнде һәм әсәйеңде яратҡан кеүек яратыу һәм һаҡлау булалыр, тип аңлайым.

**Ренат:** Минеңсә, илһөйәрлектең төп билдәһе - ул Ватанға бурысыңды ҡайтарыу. Һуңғы йылдарҙа армияға барыуҙан ҡасыу күренеше ғәҙәтигә әйләнде һәм был яҡшы түгел. Тимәк, кешеләр үҙҙәре йәшәгән ерҙе яҡларға, һаҡларға теләмәй. Ә беҙҙең ата-бабаларыбыҙ борон-борондан үҙ иле өсөн ғүмерен аямай һуғышҡан.

**Нияз:** Армиянан ҡасҡан кешеләрҙе мин аңлап етмәйем. Ир-егеттәргә тормошто ныҡлап аңлау өсөн төрлө мөхиттә йәшәп, үҙен һәр яҡлап һынап ҡарау кәрәк. Мин лицейҙы тамамлағас, иң тәүҙә армияға барып килергә, һуңынан юғары уҡыу йортона уҡырға инергә йыйынам. Диңгеҙ пехотаһында хәрби хеҙмәт үтергә хыялланам. Беҙҙең уҡыу йортонда асылған "Яугир" хәрби-патриотик клубы миңә был ниәтемде тормошҡа ашырырға ярҙам итер, тип уйлайым. Клуб эше менән бөтәһе лә ҡыҙыҡһына, унда синыфыбыҙҙан 16 кеше яҙылдыҡ.

**Гөлназ:** Был хәрби-патриотик клубҡа егеттәр генә түгел, ҡыҙҙар ҙа йөрөй ала. Унда төрлө спорт күнекмәләре, һуғыш алымдарынан тыш, медицина ярҙамы күрһәтеү буйынса ла дәрестәр үткәреләсәк. Балаларҙың белемен камиллаштырырға, төрлө яҡлап үҫешергә мөмкинлек бирәсәк ул.

**➔ Хәрби-патриотик клуб тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, уның эшмәкәрлеге хаҡында ентекләберәк һөйләгеҙ әле. Шундай ойошмалар киләсәк быуынды, йәғни һеҙҙе тәрбиәләүгә нисек булышлыҡ итә?**

**Ренат:** "Яугир" хәрби-патриотик клубын асыу тантанаһына хәрби марш менән үтергә өйрәнгәндә түңәрәккә йөрөүселәрҙән ҡаты тәртип, етдилек талап ителеүенә төшөндөк. Етәксебеҙ Салауат Сирғәлин аңлатыуынса, хәрби хеҙмәткә ҡағылышлы бөтә ҡағиҙәләрҙе - теоретик курстарҙа, ә практикала ҡул һуғышы, кикбоксингҡа, атырға өйрәнәсәкбеҙ. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ икәнен беләбеҙ һәм был клубтағы күнекмәләр беҙҙе сыныҡтыра ғына. Туристик походтар, һуғыш ветерандарына ярҙам күрһәтеү, төрлө реконструкцияларҙа һәм эҙләнеү эштәрендә ҡатнашасаҡбыҙ. Иң ҡыҙығы, парашюттан һикереү, миналар менән эш итеү, граната ырғытыу буйынса ла күнекмәләр үтәсәкбеҙ. Әле хәрби сборҙа ысын АК-74 автоматынан атырға өйрәндек.

**Нияз:** Хәрби-патриотик клуб бушҡа ғына "Яугир" тип аталмаған. Башҡорт яугирының һәр ваҡыт өлгөлө һуғышсы булғанлығы билдәле, юҡҡа ғына ата-бабаларыбыҙҙы "Төньяҡ амурҙары" тип атамағандар. Аҙнаһына дүрт тапҡыр үткәрелгән дәрестәрҙә башҡорттарҙың батырлыҡтары, ил тарихы, һуғыш яҙмалары һәм архив документтары менән дә яҡындан танышыу мөмкинлеге була, тинеләр. Хәҙерге заманда төрлө сит ил геройҙары тураһында күп мәғлүмәт алып, шуларға оҡшарға тырышҡан тиҫтерҙәрем өсөн был дәрестәр бик ҡыҙыҡлы булыр ине. Үҙебеҙҙең батырҙар менән ғорурланырға кәрәк, илһөйәрлектең бер сифаты инде ул да.

**➔ Республика иҡтисад лицей-интернатында малайҙар һәм ҡыҙҙар айырым белем ала. Ҡайһы саҡта, бөтәһе кеүек, ҡыҙҙар һәм малайҙар бергә уҡырға ине, тип теләмәйһегеҙме?**

**Гөлназ:** Баш ҡалаға уҡырға килергә ниәтләгәс тә таныштар аша, интернет селтәрендә төрлө уҡыу йорттары тураһында мәғлүмәт йыйҙыҡ. Беҙҙең лицей тураһында тик ыңғай фекерҙәр ишеттем. Малайҙар һәм ҡыҙҙарҙың айырым уҡыуы ла оҡшай, был барыбер яҡшы күренеш, сөнки ҡыҙҙар мәғлүмәтте бер төрлө, малайҙар икенсе төрлө ҡабул итә бит. Унан һуң, тәртип буйынса ла айырылабыҙ. Малайҙар, ғәҙәттә, ҡыҙҙар алдында ҡуҡырайыр өсөн үҙен иркен тота, шаяра. Ә малайҙар араһында улар барыбер бындай ҡылыҡтарынан азат, тип уйлайым.

**Нияз:** Ҡыҙҙар менә айырым уҡығас, башта күңелһеҙ була торғайны, шаярып алғы ла килә бит ҡайһы саҡ. Ләкин баш ҡала лицейы менән ауыл мәктәбен сағыштырып булмай бит инде, шаярырға ваҡыт та ҡалмай. Лицейҙа уҡытыусылар мәғлүмәтте лә күп бирә, талаптары ла юғары. Шул сәбәптән уҡыуға етди ҡарарға, бар ваҡытыңды белем алыуға ғына йүнәлтергә тура килә.

**Ренат:** Беҙҙе шулай бүлеп уҡытыуҙарының яҡшы икәнен әле, 11-се синыфҡа еткәс, бигерәк тә ныҡ аңланым. Алда ҡатмарлы имтихандар көтә, ҡыҙҙарға ҡарап, уҡымай ултырырға түгел. Ә былай беҙ ҡыҙҙар менән аралашып торабыҙ, йыш ҡына параллель синыфтар менән төрлө конкурс-сараларҙа ҡатнашабыҙ, түңәрәктәр бергә үтә. Шундай бергә үткән сараларҙы көтөп алабыҙ, олимпиада, ғилми конференцияларҙа күберәк ҡатнашырға тырышабыҙ.

**Гөлназ:** Ә ундай конференциялар, конкурстар бик йыш үткәрелә лицейҙа. Мин уҡыусыларҙың "Белем академияһы" ғилми ойошмаһы ағзаһы, яңы проекттар, ғилми тикшеренеүҙәр үткәрәбеҙ. Халыҡ алдында сығыш яһарға, командала эшләргә, бизнес-проекттар яҙырға өйрәндек. Иҡтисад лицейы тип аталһа ла, беҙҙә һәр бала үҙенә оҡшаған йүнәлеш буйынса белемен камиллаштыра ала. Ә иҡтисадты беҙ төп дәрестәрҙән тыш, өҫтәлмә рәүештә өйрәнәбеҙ. Сөнки был заман талабы, баҙар иҡтисады шарттарында йәшәгәс, уның принциптарын да белергә тейешбеҙ.

**➔ Әйткәндәй, мәктәп программаһына өҫтәлмә рәүештә тағы бер сит телде өйрәнеү индерелде бит әле...**

**Нияз:** Эйе, беҙ инглиз теленән тыш немец телен өйрәнә башланыҡ. Уҡытыусыбыҙ дәресте бик ҡыҙыҡлы итеп үткәрә, тәүге дәрестән үк ҡыҙыҡһыныу уятты. Миңә ҡалһа, ике сит тел өйрәнеү артыҡ булмаясаҡ. Мөмкинлек булһа, мин тағы ла испан телен өйрәнер инем, бик матур тел. Тик сығарылыш синыф булғас, ваҡыт етмәй, БДИ-ға әҙерләнергә кәрәк.

**Ренат:** Беҙҙә ике сит тел өйрәнеү мотлаҡ, тағы ла француз, ҡытай, япон, испан телдәрен өйрәнеү буйынса өҫтәлмә курстар асылды. Ул дәрестәрҙә телде өйрәнеп кенә ҡалмайһың, тағы бер сит мәҙәниәт менән яҡындан танышаһың, уларҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнәһең. Әлеге мәлдә Рәсәй менән Ҡытай араһында бәйләнештәр яйланыуын иҫәпкә алып, ҡытай телен дә өйрәнергә кәрәк беҙгә. Кем белә, киләсәктә кәрәге тейеүе бар.

**➔ Төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашып, тиҫтерҙәрегеҙ менән аралашып йәшәгәс, дуҫтарығыҙ ҙа күптер?**

**Ренат:** Эйе, дуҫтар һәм таныштар бик күп. Улар менән йыш ҡына ҡыҙыҡ хәлдәргә лә тарып бөтәбеҙ. Интернатта беҙ көн һайын сәғәт иртәнге етелә тороп, күнекмәләр эшләргә сығабыҙ. Старосталар һәм дежур тәрбиәселәр килеп уятҡанда йәшенеп йоҡлап ҡалыусылар була, әлбиттә. Ҡайһы берҙәре шкаф эсендә, карауат аҫтында йәшенеп ҡала. Ә бер ваҡыт душ бүлмәһендә йоҡлап ултырған иптәшебеҙҙе тоттоҡ.

**Нияз:** Ҡыҙыҡ хәлдәргә көн дә тиерлек тарып торабыҙ инде. Бына бөгөн, мәҫәлән, редакцияға килергә йыйынғанда мин костюм-салбар кейеп сыҡһам, Ренаттың спорт кейемендә икәнен күргәс, бүлмәмә ҡабат инеп, уныңса кейенеп сыҡтым. Сыҡһам, Ренат костюм-салбарҙа баҫып тора. Баҡтиһәң, ул шулай уҡ миңә ҡарап, кейемен алмаштырып сыҡҡан икән. Шулай, һәр ерҙә бер-беребеҙгә ҡарап өлгө алып йәшәргә күнеккәнбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо ҡыҫҡа ғына һөйләшеүҙә лә Республика иҡтисад лицей-интернаты уҡыусылары үҙҙәренең һәр яҡлап камиллыҡҡа ынтылыусан булыуҙарын күрһәтеп өлгөрҙө. Иң мөһиме, улар ил тарихын, халыҡ яҙмышын дөрөҫ аңлай, милләте менән ғорурлана һәм уның мәнфәғәттәрен шәхсән үҙеңдекен яҡлаған кеүек ҡайғыртыу кәрәклеген яҡшы белә. Әммә... Һөйләшеүҙә ҡатнашыусы балаларҙың (Нияздан башҡаларының) үҙ туған телендә түгел, ә русса аралашыуы ғына бер аҙ күңелде ҡыйҙы. Ә бит үҙ туған телендә һөйләшкән бала сит телдәрҙе лә тиҙерәк һәм еңелерәк үҙләштерә. Тимәк, мәктәп программаһына ике сит телде өйрәнеү мотлаҡ итеп индерелгән бөгөнгө көндә был хәҡикәтте ата-әсәләр ҙә, мәктәптәр ҙә етди иғтибарға алырға тейештәр.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*✓ Баҙарҙа уны аҡсаға алмаштыра һәм ғаиләһенә аҙыҡ-түлек, кейем-һалым алып, бик бәхетле булып ҡайта. Тик 1933 йылда был ғаиләнең бар мөлкәте тартып алына. Көнсөлдәр уларҙы табылған алтын аҡсаһына байыны тип яҙып бирә.*

*ЙӘШӘГӘН БИТ БАТЫРҘАР!*

**Илебеҙ 2012 йылда 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығын билдәләне. Юбилей йылы фәһемле иҫтәлектәр, хәтирәләр менән бай булды, әммә беҙ ул һуғыштың 1812 йылда ғына үтеп китмәгәнен дә белергә тейешбеҙ. 1813-1814 йылдарҙа Рәсәй ғәскәрҙәренең Көнбайыш Европаны азат итеү һәм Наполеон режимын бөтөрөү маҡсатында ойошторолған сит ил походы үтә. Башҡорт халҡының был һуғышта ҡатнашыу темаһы бик бай һәм уны бары тик юбилей датаһына ғына бәйләп ҡуйыу хата булыр ине. Был тәңгәлдәге тикшеренеүҙәр әленән әле яңы фәнни һәм тарихи асыштарға алып килеп тора. Был мәҡәләлә гәзит уҡыусыларҙы әлегә бер тарихи әҙәбиәттә лә донъя күрмәгән яңылыҡтар менән таныштырғы килә. Әле бәйән итә торған мәғлүмәттәр 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығын билдәләгәндән һуң ғына табылған. Һүҙ бында беҙҙең данлы яҡташыбыҙ, 14-се Башҡорт полкы командиры Абдулла Сурағолов хаҡында бара.**



# ПОХОД СТАРШИНАҺЫ АБДУЛЛА СУРАҒОЛОВ

## Уның дворянлыҡ титулы уландарына ла тапшырылған

Билдәле булған һуғышҡа башҡорт халҡы 1812 йылдың хәрби хәрәкәттәрендә һәм 1813-1814 йылғы походта ҡатнашҡан 22 полк бирә. 1813-1813 йылғы сит ил походында рус армияһы союздан Англия, Пруссия, Швеция ғәскәрҙәре менән берлектә Европанан Наполеон армияһын ҡыуа һәм 1814 йылдың 19 (31) мартында Парижға бәреп инә. Улар араһында 9 башҡорт полкы, шул иҫәптән 1812 йылдың сентябрендә үҙ эсенә хәҙерге Әбйәлил, Баймаҡ, Учалы һәм Белорет райондарын алған 6-сы Башҡорт кантонында төҙөлгән 14-се башҡорт полкы ла була. Рус офицерҙарынан Орск гарнизон батальоны майоры П. Селезнев 14-се Башҡорт полкының командиры булып тора. Командир ярҙамсыһы итеп башҡорттоң Абдулла Сурағолов тигән старшинаһы тәғәйенләнә һәм 1812 йылдың сентябренән 1814 йылдың декабренә ҡәҙәр етәкселек итә. Айырым документтарҙа был кеше полк командиры йәки полктың башҡорт командиры вазифаһында йөрөй.

Быға тиклем Абдулла Сурағолов хаҡында аныҡ ҡына бер нәмә лә билдәле түгел ине. Беҙ уны Теләү волосының Әбләз ауылы (хәҙерге Учалы районы) кешеһе тип уйлағайныҡ. Әммә һуңғы тикшеренеүҙәр был уйҙан кире ҡайтырға мәжбүр итә. 1812 йылғы һуғышта, 1813-1814 йылғы сит ил походында ҡатнашыусы башҡорт кантондары чиновниктары, урядниктары һәм һуғышсыларының биографияларын өйрәнеүҙә мөһим сығанаҡ булып теге йәки был кантондарҙың "Чиновник һәм урядниктарҙың хеҙмәте хаҡындағы формуляр исемлеге" тора. Әммә был теҙмәлә Абдулла Сурағоловтың исем-шәрифтәре булмай сыҡты. Һаман да өмөт өҙмәй, беҙ тикшеренеүҙәрҙе 6-сы башҡорт кантоны ауылдарынының ревиз теркәүҙәре (ревизские сказки) материалдарына күсерҙек һәм Верхнеурал өйәҙе Ҡарағай-Ҡыпсаҡ олоҫона ингән Таһир ауылы буйынса бирелгән материалдарҙың VII ревизында (1816 й.) бик мөһим бер мәғлүмәткә юлыҡтыҡ. Был документтарҙан күренеүенсә, Таһир ауылында "Абдулла Сурағолов, йорт старшинаһы, 1813 йылдың 31 октябренән 14 класта, 43 йәш" йәшәгән. Ғаиләһе түбәндәгесә булған: ҡатыны - Итбикә, 32 йәш, ҡыҙы - Сәхибә, 5 йәш, улдары - Мөхәмәтдин, 9 йәш, Әбүбәкер, 1 йәш. Ревиз теркәүҙәре аҙағында йорт старшинаһы Абдулла Сурағоловтың ғәрәпсә ҡуйылған ҡултамғаһы тора. Тимәк, ул төрки телендә яҙа белгән. Ҡултамға янында аңлатмаһы ла бар: "Юртауай старшина Ғабдулла Сурағул уғлы ҡулым ҡуйдым".

Был документтарҙа 14-се Башҡорт полкы командиры ярҙамсыһы Абдулла Сурағолов хаҡында һүҙ барыуын ниндәй факттар дәлилләне, тигән һорау тыуырға ла мөмкин. Иң беренсе сиратта "1813 йылдың 31 октябре" тигән датаға иғтибар итәйек. Ревиз теркәүҙәре буйынса был көндө Верхнеурал өйәҙе Ҡарағай-Ҡыпсаҡ олоҫона Таһир ауылында йәшәүсе Абдулла Сурағолов 14-се класлы чинға күтәртелә. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең полк командиры ла шул уҡ йылдың шул көнөндә ошо чинға үрләтелә. Бына документтар:

"Приказ по армии. Главная квартира, г. Килбе. Октября 31 дня 1813 года № 85.

В воздаяние оказанного мужества, усердия и отличия г.-д. штаб и обер-офицеров в сражении противу неприятеля 6-го и 7-го чисел октября под городом Лейпцигом бывшим, по силе данной мне власти награждаются.

В следующие чины:

Прапорщик легкой роты № 1 Ефремов, казачьих полков полковой командир 9-го башкирского полка Алмалид Уразгулов, полковой командир 14-го Башкирского полка Абдул Сурагулов...

Подлинной подписал генерал от кавалерии генерал Бенигсен..."

1813 йылдың 27 декабрендә төҙөлгән "Список отличившимся зауряд чиновникам Башкирского войска" тигән документ та Абдулла Сурағоловтың класс чины менән бүләкләнеүен иҫбатлай:

"Башкирских кантонов... 6-го... В следующие чины:

Походный старшина Абдулла Сургулов - октября 30 за отличие в сражении под Лейпцигом. О коем с приказа от 31 октября 1813 года № 85 доставлена копия, засвидетельственная кантонным помощником Аккуловым..."

**Фуат СӨЛӘЙМӘНОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Башҡорт йыр ижадының үҙенсәлекле һыҙаты булып яңы быуын һайын йырҙарҙың алышынып тора икәнлеген билдәләгәйнем инде. Заманса йырҙар элекке, революцияға тиклемгеләренән айырмалы, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы халыҡ тормошоноң барлыҡ тармаҡтарына алып килгән барлыҡ яңылыҡтарҙы сағылдыра. Заман йырҙарында элеккеләре, мөхәббәтлирик йырҙар менән бер рәттән йәмғиәт тормошо ла киң сағылыш тапты.

Әгәр Ә. Н. Кирәйев билдәләүенсә, Октябргә тиклем йырҙар репертуарында оҙон көй өҫтөнлөк итһә, Октябрҙән һуң беренсе урынға ҡыҫҡа көй сыға.

Элек халыҡ йыры бары тик телдәнтелгә тапшырылһа, хәҙер ул сәсәндәр тарафынан яҙып алына һәм киң тарала. 1943 йылдың БАССР Юғары Советы Президиумы Указы менән халыҡ сәсәне исеме булдырыла һәм ул халыҡ артисы исеменә тиңләнелә. Әлеге ваҡытта был юғары исемде Фәррәх Дәүләтшин менән Сәйет Исмәғилев йөрөтә.

Революцияға тиклем башҡорттар иҫке төрки телен яҙма һәм әҙәби тел итеп файҙаланған.

18 быуаттың һуңғы сирегендә, Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡытында, туған халҡына бағышланған шиғырҙары менән Салауат Юлаев сығыш яһаған. Ул батыр, үҙ халҡының юлбашсыһы ғына түгел, шағир-импровизатор ҙа булған. Әммә Салауаттың идея мотивтары артабан XX быуат башында башҡорт халыҡ шағиры М. Ғафури ижадында ғына үҫеш ала.

Октябрь революцияһынан һуң совет милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә башҡорт халҡы үҙ яҙмаһын, үҙенең матур әҙәбиәтен булдыра, марксизм классиктарының әҫәрҙәрен туған телендә уҡыу мөмкинлеген ала.

Башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы булып Мәжит Ғафури тора. Уның традицияларын Сәйфи Ҡудаш, Ғариф Ғүмәр, Ғайнан Хәйри, Сәғит Агиш һәм йәш быуын яҙыусылары дауам итә.

Һуғыш алды биш йыллыҡтарында башҡорт шағирҙары һәм әҙәбиәтселәренең төп кадрҙары формалаша. Үҙ әҫәрҙәрендә улар совет Башҡортостаны тормошондағы яңылыҡты сағылдырырға тырыша. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында башҡорт яҙыусылары патриотизм менән һуғарылған үҙ әҫәрҙәрендә совет кешеһенең фронттағы һәм тылдағы ҡаһарманлығын бәйән итә. Башҡорт шағирҙары һәм яҙыусыларының (Р. Ниғмәти, С. Агиш, Ә. Вәли, С. Күлибай, М. Кәрим, Х. Кәрим, К. Мәргән һ.б.) һуңғы йылдарҙағы иң яҡшы әҫәрҙәре уларҙың оҫталығы, идея асыҡлығы һәм форма үҙенсәлеге үҫеше хаҡында һөйләй. Улар совет ысынбарлығын тулыһынса сағылдырырға тырышып, яңы темалар алып килә. Башҡортостандың иң яҡшы яҙыусылары М. Горький, В. Маяковскийҙың традицияларын дауам итеп һәм рус классиктарынан өйрәнеп, етди ижади уңыштарға өлгәшә.

*ХАЛЫҠ ТЕЛЕНДӘ*

# ТЫҢЛАҺАҢ - ЫШАНҒЫ,

## ышанһаң - белге килә

**Ғәҙәттә, журналистың хәтер һандығында дәлилле мәғлүмәттәрҙән тыш, ышанырға йә ышанмаҫҡа ла белмәгән, әммә шундай ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс ваҡиғалар, риүәйәттәр ҙә йәшәй. Уларҙы һин артыҡ етдигә алмаҫҡа, иғтибар бирмәҫкә лә тырышаһың, тик улар ишеткән көндән алып, "Яҙ, һөйлә, башҡалар ҙа белһен!" тигән кеүек, күңелде ҡытыҡлап тик тора. Бер уйлаһаң, бындай тарихтарҙың ғүмере лә ана шул телдәнтелгә күсеүҙә, һөйләнеп ҡалдырылыуҙа бит.**

### Батый хандың алтыны

**Был легендалар Ырымбур ерлегендә барлыҡҡа килгән. Александровка районы Күрпәс ауылы ҡыҙы - 1924 йылғы Нәбирә Йәндәүләтова теленән яҙып алынған.**

Риүәйәт буйынса, был ауыл аша заманында ярты донъя хужаһы булған Батый хан юлы үтә. Олуғ хаким һанһыҙ ғәскәре башында алтын кырандаста килә. Тап ауыл эргәһендә генә арбаһының күсәре һынып китә бының. Хеҙмәтселәр, тимерселәр кырандасты йүнәтергә ташлана, оҙаҡ ҡына маташалар, әммә күсәрҙе тоташтыра алмайҙар. Шул ваҡыт ярһыған хан эргәләге тау башына тәрән соҡор ҡаҙҙыртып, кырандасын шунда төшөртөп күмдерә. Ул тау Мәжит тауы тип атала. Ул ваҡытта тауҙың исеме нисек булғандыр, булғандырмы-юҡмы - билдәһеҙ. Хан китә, ә был ерлектә шул легенда тороп ҡала.

Бер табыш был тарихтың ысынбарлыҡҡа яҡын икәнлегенә ишара яһай. 1930 йылда Күрпәс ауылы ҡатын-ҡыҙҙары, һәр йылдағыса, Мәжит тауына еләккә йөрөй башлай. Ҡатындар араһынан Үзбәкова Сәлимә тигәне ял итергә ултырған ерҙә суҡайып ятҡан нимәнелер күреп ҡала. Соҡоп сығарып ала ҡатын был ҡылыс һабына ла, ишек тотҡаһына ла оҡшаған нәмәне. Табыш ятҡан ерҙе ямғыр юлы йыуып өңгән һәм йырын яһаған булған. Сәлимә табышын ямғыр күләүегендә йыуып алып, еләккә сыҡҡандарҙың барыһына ла күрһәтә. Ауыл ҡатындары ғына булһалар ҙа, бының алтын икәнлеген аңлайҙар.

Өйгә ҡайтҡас, алтын тағы ла яҡшыраҡ итеп таҙартыла, ялтыратыла, үлсәп ҡараһалар, бер килонан ашыу тарта. Өй хужаһы табышты сепрәккә төрөп алып, йәрминкәгә алып китә. Баҙарҙа уны аҡсаға алмаштыра һәм ғаиләһенә аҙыҡ-түлек, кейем-һалым алып, бик бәхетле булып ҡайта. Тик был бәхеттәре оҙаҡҡа бармай. 1933 йылда был ғаиләнең бар мөлкәте тартып алына. Көнсөлдәр уларҙы табылған алтын аҡсаһына байыны тип яҙып бирә. Ә бар мөлкәт ул алтынға тиклем үк хәләл көс менән йыйылған була. Йортһоҙ-ерһеҙ ҡалған ғаилә башлыҡтары аслыҡтан һәм ауырыуҙан үлеп китә, балалары ҡайҙа етте, шунда таратылып бөтә.

Был риүәйәт һәм әлеге табыш бик күптәрҙең башын әйләндерә. Хатта тотош геофизик экспедициялар килеп ҡаҙынып ята тауҙа. Әммә тау серен сисмәй - табылмай алтын кырандас.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

**Көнсығышты өйрәнеү, комплекслы фәнни тәрбиә булараҡ, беҙҙең илдең йәмәғәт һәм сәйәси тормошонда һәр ваҡыт мөһим роль уйнай килгән. Бөгөн дә Көнсығыш халыҡтары тарихын, мәҙәниәтен, был илдәр араһындағы бәйләнеш ҡанундарын өйрәнеү төбәк-ара һәм шул уҡ ваҡытта глобаль проблемаларҙы хәл итергә ярҙам итә. Халҡыбыҙҙың беренсе көнсығыш илдәрен өйрәнеүсеһе - Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡортостан һәм башҡорттар хаҡындағы мәғлүмәтте көнсығыш илдәренә тәү башлап ул еткергән. 2015 йылдың 7-10 октябрендә республикабыҙҙа үтәсәк "Рәсәй һәм Көнсығыш: илдәр һәм халыҡтарҙың бер-береһенә йоғонтоһо" Х Бөтә Рәсәй съезында ла ошо бәйләнештәргә яңы һулыш өрөләсәк. Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы ХИСАМЕТДИНОВА һәм Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының Халыҡ-ара ТӨРКСОЙ ойошмаһындағы вәкиле, тарихсы Әхәт Ғөбәй улы СӘЛИХОВ менән әңгәмәлә ошо сараның маҡсаты, көнсығышты өйрәнеүҙең әһәмиәте тураһында һөйләшәбеҙ.**

# ВӘЛИДИ ИДЕЯЛАРЫН

## Башҡортостанда көнсығышты

**▸ Бихисап абруйлы ғилми үҙәктәр көнсығышты өйрәнеүселәрҙең Х Бөтә Рәсәй съезын ойоштороусылар исемлегендә тора. Асыҡлап китәйек әле, съездың маҡсаты нимәлә һәм ул үҙ эсенә ниндәй проблемаларҙы ала?**

**Ә. Сәлихов:** Форум эшендә Рәсәйҙең Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡаҙан, Өфө, Екатеринбург, Новосибирск, Владивосток, Краснодар, Якутск, Ҡыҙыл, Абакан, Липецк, Чебоксар ҡалаларынан һәм Әзербайжан, Беларусь, Иран, Ҡаҙағстан, Ҡытай, Ҡырғыҙстан, Молдова, Тажикстан, Төркмәнстан, Төркиә, Үзбәкстан, Украинанан өс йөҙҙән ашыу ғалим ҡатнаша. Улар тарафынан Рәсәйҙең Көнсығышты өйрәнеү үҙәктәренең тарихы һәм бөгөнгө хәле, Рәсәйҙең көнсығыш илдәрен өйрәнеү тарихы һәм перспективаһы, тарихта һәм бөгөнгө тормошта исламдың роле, Рәсәй менән көнсығыш бәйләнешенең матди мәҙәниәттәге сағылышы, Рәсәй - көнсығыш тел бәйләнештәре, көнсығышты өйрәнеүҙәге лингвистика мәсьәләләре ҡараласаҡ. Әхмәтзәки Вәлиди Туған һәм көнсығышты өйрәнеүҙең актуаль мәсьәләләре (Әхмәтзәки Вәлидиҙең 125 йыллығына ҡарата), Рәсәй халыҡтары әҙәбиәтендә көнсығыш яҙма мәҙәниәте сағылышы (Шәйехзада Бабичтың 120 йыллығына ҡарата), Төрки телдәрҙең, тороошо һәм перспективалары, С.И. Руденконың гуманитар фәндәр үҫешенә индергән өлөшө (130 йыллығына ҡарата), көнсығышты өйрәнеүҙе үҫтереүҙә фронтовик-ғалимдарҙың һалған хеҙмәте һәм көнсығыш халыҡтарының фольклоры һәм мифологияһы тигән темаларға симпозиумдар ойоштороласаҡ. Шулай уҡ 2014 йылдың ноябрь айында асылған көнсығыш ҡулъяҙмалары бүлегенең эше лә ҡараласаҡ. Шулай итеп, съездың маҡсаты - халҡыбыҙҙың көнсығыш менән тығыҙ бәйләнештә булған тарихын, яҙма мәҙәниәтен, фольклорын һәм арҙаҡлы шәхестәрен, уларҙың хеҙмәтен өйрәнеү, был ҡиммәттәрҙе киләсәк быуындарға тапшырыу.

**▸ Боронғораҡ дәүерҙә көнсығышта башҡорт халҡының тарихы һәм теле менән ҡыҙыҡһыныусылар булғанмы? Бөгөн был мәсьәләгә ҡараш нисек?**

**Ф. Хисаметдинова:** Башҡорт халҡының тарихы менән бик боронғо ваҡыттан сәйәхәтсе ғалимдар ҡыҙыҡһынған. Беренселәрҙән булып ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн Фаҙлан башҡорттар тураһында яҙып сыҡҡан. Урта быуаттарҙа Венгрия ғалимдары башҡорттар араһына килеп, уларҙың тарихын өйрәнә, сөнки ҡасандыр мадъярҙарҙың ата-бабалары Уралдан Дунай буйҙарына күсеп ултыра. Башҡорт һәм мадъяр телдәре араһында дөйөм оҡшашлыҡ һәм үҙенсәлектәр барлығын ғалимдар күптән раҫлай. Шуға ярашлы, 1925 йылдан башлап Будапешт университетында башҡорт телен өйрәнәләр. Төркиәнең иң боронғо уҡыу йорто - Византия империяһы тар-мар ителгәс, 1453 йылдың 29 майында Солтан Мәхмүт II бойороғо буйынса Изге София соборы нигеҙендә асылған мәшһүр Истанбул университетында башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу һәм өйрәнеү халҡыбыҙ күңелендә ғорурлыҡ уята. Был юғары уҡыу йорто - мәғариф, фән һәм мәҙәниәттең үҫешен тиҙләткән, көнбайыш һәм көнсығыш ҡиммәттәрен бер урынға туплаған, уларҙың күсәгилешлелеген һаҡлаған, Төркиәгә һәм бөтә донъяға юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләгән үҙәк. Төркиәлә 175 университет иҫәпләнә, шуның 46-һы Истанбулда. Барлыҡ юғары уҡыу йортонда 4,2 миллион студент белем ала. Истанбул университетының Евразия институты бүлегендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте факультеты эшләй. Истанбул университетының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, филология фәндәре докторы Исмәт Бинәр 2014 йылдың майында Истанбул нәшриәтендә төрөк һәм башҡорт телдәрендә башҡорт теленең грамматикаһын баҫтырып сығарҙы. 240 битлек китабында ғалим башҡорт теленең фонетикаһы, морфологияһы, орфографияһы, синтаксис һәм пунктуация тураһында төрөксә һәм башҡортса тулы мәғлүмәттәр бирә. Ошо дәреслек аша Истанбул университетының Евразия бүлеге студенттары башҡорт халҡының тарихын, уның тел үҙенсәлектәрен, әҙәбиәтен өйрәнә. Башҡорт теле башҡа төрки телдәргә ҡарағанда ҡатмарлы булыуға ҡарамаҫтан, доктор Исмәт Бинәрҙең ғилми яҡтан эшкәртеп башҡортса дәреслек баҫтырып сығарыуы - үҙе бер батырлыҡ. Китап АҠШ-та һәм Ҡытайҙа юғары баһа алған. Китапҡа баш һүҙҙе үҙем яҙҙым. Унда башҡорт шағирҙарының иң аҫыл ижад өлгөләре Б. Бикбайҙың "Туған тел", Р. Бикбайҙың "Халҡыма хат", К. Кинйәбулатованың "Туған телем", Ш. Бабичтың "Беҙ", "Башҡорт халҡына көйлө хитап", "Башҡортостан", Р. Ғариповтың "Башҡортостан", С. Юлаевтың "Уралым" шиғырҙары, әҙәби әҫәрҙәр ингән. Шулай уҡ башҡорт халыҡ ижадынан ҡобайырҙар, әкиәттәр, мәҡәлдәр төрөксә бирелә.



***Төркиәнең иң боронғо уҡыу йорто - Византия империяһы тар-мар ителгәс, 1453 йылдың 29 майында Солтан Мәхмүт II бойороғо буйынса Изге София соборы нигеҙендә асылған мәшһүр Истанбул университетында башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу һәм өйрәнеү халҡыбыҙ күңелендә ғорурлыҡ уята. Был юғары уҡыу йорто - мәғариф, фән һәм мәҙәниәттең үҫешен тиҙләткән, көнбайыш һәм көнсығыш ҡиммәттәрен бер урынға туплаған, уларҙың күсәгилешлелеген һаҡлаған, Төркиәгә һәм бөтә донъяға юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләгән үҙәк. Төркиәлә 175 университет иҫәпләнә, шуның 46-һы Истанбулда. Барлыҡ юғары уҡыу йортонда 4,2 миллион студент белем ала. Истанбул университетының Евразия институты бүлегендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте факультеты эшләй.***

**▸ Бөгөн бөтә халыҡтар, бигерәк тә төрки телле халыҡтар латин графикаһын үҙ итә. Компьютерҙар ҙа шул яҙмала. Ә беҙ ҡасандыр латин графикаһынан кириллицаға күсерелгәнбеҙ. Көнсығыш күҙлегенән ҡарағанда, мәҫәлән, бөгөнгө кириллица әҙәби тарихы, шәжәрәләре шул яҙмала булған халҡыбыҙҙың мәҙәни байлығын һайыҡтырып күрһәткән кеүек түгел микән?**

**Ф. Хисаметдинова:** Тарихҡа күҙ һалһаҡ, халҡыбыҙ 1929 йылға тиклем белем һәм тәрбиәне меңәр йылдар буйы ғәрәп графикаһында ала, әммә шул уҡ йылда ғәрәп яҙмаһын латин алфавитына, ә 1939 йылда бер кемдән дә һорап тормайынса, кириллицаға күсерәләр. 1929-1930 йылдарҙа, латин алфавитына күсеү дәүерендә, "грамотаһыҙ" халыҡты уҡытыу өсөн һәр ауылда ликбездар ойошторола. Һәр уҡый-яҙа белгән кеше һигеҙ-ун кешене грамотаға өйрәтергә бурыслы була. Һуңынан, йәнәһе, башҡорт халҡы революцияға тиклем тома наҙан, яҙмаһы ла, әҙәбиәте лә булмаған, тип үҙәк гәзит-журналдар бөтә донъяға ялған хәбәр таратырға ашыға. Мәҫәлән, 1987 йылдың 11 майында "Правда" гәзите: "Башкирский народ, не имевший даже своей письменности, совершил удивительный исторический скачок от патриархального уклада жизни к высотам, с которых виден всему миру", - тип яҙҙы.

Бөгөн мәғарифы, мәҙәниәте, сәнғәте, медицинаһы юғары кимәлгә күтәрелгән башҡорт халҡы, үҙенең яҙмаһы булмаһа, ерен, халҡын, һыуын, телен, динен яҡлап 200 йыл буйы колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәшә алыр инеме? Ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, халҡыбыҙ үҙ-ара хәбәрләшкән, илдә барған хәл-ваҡиғаларҙы бер-береһенә еткереп торған. XVII-XIX быуаттарҙа һәр ауылда уҡый-яҙа белгән кешеләр етерлек булған. Барлыҡ күтәрелеш етәкселәре лә халыҡҡа һәр төрлө яҙма мөрәжәғәттәр, фармандар менән оран һалған. 1755 йылдың 15 майында Талҡаҫ һәм Ирәндек буйында башланып киткән ихтилалда, уның етәксеһе Батырша (Ғабдулла Ғәли улы) яҙма өндәмәһен уҡыған икәне билдәле. Рәсәй империяһының ҡотон алған Аҡай, Күсем, Алдар, Ҡараһаҡал, Салауат, Юлай, Кинйә кеүек шәхестәребеҙ белемһеҙ булһа, шундай ҙур хәрәкәткә етәкселек итә алырҙар инеме?

Әхмәтзәки Вәлиди һәм уның көрәштәштәре лә, белемле һәм аңлы эш итеп, Рәсәй составында иң тәүге автономиялы республиканы төҙөй алған. Халҡыбыҙҙа уҡый-яҙа белеү Ислам дине инеү менән башлана. Һәр бер ауылда мәсет, уның янында мәҙрәсәләр була. Улар халыҡты уҡырға, яҙырға өйрәткән, яҡшы тәрбиә биргән.

*Табаҡ та ғына табаҡ,*
*ай, аҡ ҡағыҙ*
*Буранбайҙың яҙған хаттары.*
*Буранбайҙың яҙған хатын уҡып,*
*Зар илайҙар ауыл ҡарттары.*

Халҡыбыҙ наҙан булһа, бындай хаттарҙы уҡый алыр инеме? Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ VII - VIII быуаттарҙа руник яҙыу, ә IX быуаттан, Ислам динен индереү менән, ғәрәп алфавитын ҡуллана башлай. Меңәр йыл буйы ошо ғәрәп яҙмаһы ярҙамында аралашҡан, аң-белем алған, яҙышҡан. Тик үткән быуаттың 30-сы йылдарында латин, ә 40-сы йылдарында урыҫ яҙмаһына күсеп, ғәрәп алфавитын онотоп ҡуйҙыҡ, шул алфавитта яҙылған документтарҙы, тарихи яҙмаларҙы бөгөн уҡый алмауыбыҙ үтә үкенесле булһа, бөгөн иһә ул серҙәрҙе асыр ғалимдарыбыҙ бар. Көнсығышҡа килгәндә, улар беҙҙең тап ана шул тарихи яҙмышты өйрәнеп тә, беҙҙе үҙҙәренеке итеп ҡабул итә.

**▸ Тимәк, башҡортто халыҡ һәм милләт булараҡ төрки илдәренә асыусы шәхесебеҙ Әхмәтзәки Вәлиди ҙә һеҙ әйтеп үткән мәҙәниәттә тәрбиәләнгән. Уны бөгөн беҙ белгән кимәлдәге ғалим итеп үҫтереүгә йоғонто яһаған факттарҙы ҡарап сығайыҡ әле...**

**Ә. Сәлихов.** Әхмәтзәки ҙур уҡымышлы ғаиләлә үҫә. Атаһы Әхмәтшаһ хәҙрәт ауылда мәҙрәсә тота. Мөғәллимә әсәһе төрки телдәрендә байтаҡ шиғырҙарҙы яттан белә. Улына ла Аттар, Руми, Науаи, Йәсәүи, Аллаһияр кеүек боронғо классик шағирҙарҙың китаптарын уҡыта. Ваҡыты еткәс, Ә. Вәлидиҙе

***✓ Вәлиди теүәл 50 йыл эмиграцияла йәшәй, ошо ярты быуат ваҡыт эсендә уға бер генә мәртәбә булһа ла Башҡортостан тупрағына ҡайтып аяҡ баҫырға мөмкинлек бирелмәй.***

# ДАУАМ ИТЕП...

## өйрәнеүселәрҙең X Бөтә Рәсәй съезы үтәсәк

Үтәк ауылы мәҙрәсәһенә уҡырға бирәләр. Бында ул ғәрәп теле һәм әҙәбиәте буйынса белемен камиллаштыра, тарих, фәлсәфә, география, математиканан шәхси дәрестәр ала. Әхмәтзәки Вәлидиҙең шәхес булып формалашыуындағы иң мөһим фактор - уның кесе йәштән үк тау башҡорттарының боронғо йәйләү тормошон, йыр-мондарын, тарихи риүәйәттәрен, ҡобайырҙарын тыңлап, ошо мөхиттең юғары рухиәтен күңеленә һеңдереп үҫеүе.

1908 йылдың 29 июнендә Вәлидиҙең тормошонда өр-яңы дәүер башлана. "Шура" журналының баш мөхәррире Ризаитдин Фәхретдин менән осрашып, уның кәңәштәрен тыңлай. Шунан һуң Ҡаҙанға барып, ең һыҙғанып фән, ғилем, ижад эшенә тотона. Ҡаҙанға килеүенең тәүге йылында уҡ ул ваҡытлы матбуғат биттәрендә әҙәбиәт һәм тарих буйынса мәҡәләләр баҫтыра. Бында ул лекциялар тыңлай, имтихандарға әҙерләнә. Ҡаҙан университеты һәм Рәсәй Фәндәр академияһы Ә. Вәлидиҙе Төркөстанға фәнни командировкаға ебәрә. Илдә барған сәйәсәт уның ғилми эшен туҡтатып тора. Ул сәйәсәткә күсә һәм барыбыҙға ла билдәле сәбәптәр арҡаһында илде ташлап китергә мәжбүр була.

**Ф. Хисаметдинова:** Ул Париж, Берлин, Прага, Будапешт ҡалаларының китапханаларында иҫке ҡулъяҙмалар, китаптар менән таныша, уларҙы өйрәнә. Шулай итеп, үҙенең ғүмерен, тормошон тулыһынса тиерлек ғилми эшмәкәрлеккә арнай. Ҡалған 45 йыл ғүмере университетта төрки тарихы уҡытыусыһы, донъяға танылған шәреҡсе профессор сифатында, үҙе әйткәнсә, "Осман дәүләтендә быуаттар буйы ҙур тырышлыҡ менән йыйылған тарихи сығанаҡтарҙы һәм документтарҙы баһалау менән" үтә. 1944 йылдың 15 майында пантөркиселек эшмәкәрлегендә ғәйепләп, Ә. Вәлидиҙе ҡулға алалар. Ул 17 ай һәм 10 көн буйына төрмәлә ултырып сыға. Тотҡонлоҡта ултырған сағында "Ғөмүми төрк тарихына инеш" тигән китабын ҡайтанан эшләп, 1946 йылда нәшер итә.

1950 йылда "Тарихи ысул" исемле хеҙмәтен баҫтырып сығара. Ошо дәүерҙә ул төрки халыҡтарының тарихын, географияһын, мәҙәниәтен, яҙма тел ҡомартҡыларын, этнографияһын, бөйөк тарихи шәхестәр тормошон өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирә. Ғүмеренең һуңғы йылдарында ғалим "Төрки мәҙәниәте белешмәһе" тигән монументаль хеҙмәт өҫтөндә эшләй, 1969 йылда атаҡлы "Хәтирәләр" әҫәрен баҫтырып сығара. Уның ғилми хеҙмәттәр библиографияһы 400-гә яҡын ҡулъяҙманан тора. Был хеҙмәттәрҙең ҡырҡтан ашыуы - ҙур күләмле китаптар һәм монографиялар.

Иң элек шуны әйтәйек: Ә. Вәлиди Туған ғалим булараҡ та, легендар милли геройыбыҙ менән бер тиң тороролоҡ шәхес сифатында ла беҙҙең аңыбыҙҙа ҡабатланмаҫ күркәм бер күренеш булып йәшәй. Сөнки ул, беренсенән, донъя йөҙөндә бөйөк тарих белгесе булып танылһа, икенсенән, халҡыбыҙ яҙмышының һынылышлы бер осоронда үҙе шул тарихты тыуҙырыусы, тарихтың ижадсыһы, милли юлбашсы һәм азатлыҡ хәрәкәттәренең идеологы рәүешендә күтәрелә. Уның шәхес һәм ғалим булараҡ иң ҙур үҙенсәлеге лә шундалыр. Икенсенән, тарихты өйрәнеүсе булараҡ, Вәлидиҙе биографтары иң элек киң профилле, универсаль характерҙағы ғалим-төркисе һәм шәреҡсе тип билдәләй. Европа ғалимдары уны хаҡлы рәүештә Европа менән Шәреҡ фәнен тоташтырып тороусы тип атай. Башҡорт тарихы, этнографияһы буйынса ғилми хеҙмәттәре лә мөһим әһәмиәт ҡаҙана. Ә. Вәлиди мираҫында беҙҙе айырыуса ҡыҙыҡһындырған ғилми әҫәрҙәренең береһе - "Башҡорттарҙың тарихы". Был әҫәр боронғо дәүерҙән алып 1919-1920 йылдарға тиклемге ваҡиғаларҙы үҙ эсенә алған ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ҡырҡ бүлексәнән тора һәм художестволы әҫәр кеүек уҡыла.

**▸ Төрки ғалимдары араһында уның эшен дауам итеүселәр, уны уҡытыусылары тип һанаусылар бармы икән? Ғөмүмән, төрки ғалимдар уның хеҙмәтен нисек баһалай?**

**Ә. Сәлихов.** Ә. Вәлидиҙе яҡындан белеп, күреп, аралашып йөрөгән ғалимдар уны бөйөк ғалим эйәһе булараҡ та, кешелек сифаттары йәһәтенән дә бик юғары баһалай. Төркиәлә уны үҙҙәренең остазы тип иҫәпләгән бер төркөм арҙаҡлы шәхестәр үҫеп сыҡты. Улар араһынан профессор Тунжер Байҡара 1990 йылда " Әхмәт-Зәки Вәлиди Туған" тигән исем аҫтында бөйөк ғалимдың тормошона һәм ижадына арналған монография баҫтырып сығарҙы.

Әхмәтзәки Вәлиди Туған 1970 йылда - һикһәненсе йәшендә яҡты донъя менән хушлаша. Профессор Карл Ян уның үлеменә ҡарата: "...XIX быуат аҙағы - XX быуат башы урыҫ тарихсылары мәктәбе йәшәүҙән туҡтаны, сөнки В. Бартольд менән В. Минорскийҙан һуң хәҙер Әхмәтзәки Вәлиди Туған арабыҙҙан китте", - тип, бөйөк ғалимдың донъя шәреҡселек фәнендә тотҡан урынына бик юғары баһа бирә.

Һәр халыҡта уның рухын, мәҙәниәтен, тарихын тәрән, тулы һәм баҙыҡ кәүҙәләндергән шәхестәр була. Ғәҙәттә, улар меңәр йылға бер тыуа. Шундай арҙаҡлы шәхестәрҙең береһе - Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Ул ысынлап күп яҡлы талант эйәһе, бөтә донъя кимәлендә билдәле булған бөйөк ғалим һәм тарихсы була. Бик күп төрки телдәрен яҡшы белгән, фарсы, ғәрәп, урыҫ, немец телдәрендә иркен һөйләшкән, шулай уҡ инглиз, француз телдәрен үҙләштергән ғалим. Тәүге китабы "Төрөк һәм татар тарихы" Әхмәтзәки Вәлидигә егерме бер йәш булғанда ғына баҫылып сыға. Үҙенең тәүге үҙ аллы тарихи-этнографик эҙләнеүҙәрен бөрйән башҡорттары араһында башлай. 1913 йыл "Шура" журналында "Бөрйән башҡорттары" исемле мәҡәләләре баҫылып сыға. Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың "Хәтирәләр" китабында был турала түбәндәге юлдар яҙылған: "Мин башҡорттарҙың ифрат бай фольклорының татарҙар һәм рустар йоғонтоһо аҫтында ярлылана барыуын, шулай ҙа боронғо төрөк мәҙәниәтенең ҡайһы бер сифаттарын иң тулы кимәлдә һаҡлаусылар бөрйән башҡорттары булыуын, милли мондоң һәм дастандарҙың бында әле булһа йәшәп килеүен тасуирланым... Улар ҡоралды батырҙарса ҡулланыуы, атта йөрөү маһирлығы менән хәҙерге көндә лә боронғо төрөк тарихы ғәскәрҙәренең рухын йәшәтеп килә".



***Вәлидиҙе яҡындан белеп, күреп, аралашып йөрөгән ғалимдар уны бөйөк ғалим эйәһе булараҡ та, кешелек сифаттары йәһәтенән дә бик юғары баһалай. Төркиәлә уны үҙҙәренең остазы тип иҫәпләгән бер төркөм арҙаҡлы шәхестәр үҫеп сыҡты. Улар араһынан профессор Тунжер Байҡара 1990 йылда " Әхмәт-Зәки Вәлиди Туған" тигән исем аҫтында бөйөк ғалимдың тормошона һәм ижадына арналған монография баҫтырып сығарҙы. Әхмәтзәки Вәлиди Туған 1970 йылда - һикһәненсе йәшендә яҡты донъя менән хушлаша. Профессор Карл Ян уның үлеменә ҡарата: "…XIX быуат аҙағы - XX быуат башы урыҫ тарихсылары мәктәбе йәшәүҙән туҡтаны, сөнки В. Бартольд менән В. Минорскийҙан һуң хәҙер Әхмәтзәки Вәлиди Туған арабыҙҙан китте", - тип, бөйөк ғалимдың донъя шәреҡселек фәнендә тотҡан урынына бик юғары баһа бирә.***

Әхмәтзәки Вәлиди фольклор материалдарын йыйған, археологик һәм этнографик эҙләнеүҙәр алып барған, һирәк осрай торған ҡулъяҙма китаптар менән ҡыҙыҡһынған. Күренекле сәйәхәтсе Ибн Фаҙландың яҙмаларын табып, уларҙы өйрәнеп, немец телендә докторлыҡ диссертацияһы яҡлаған. Бынан тыш та ғалимдың бик күп хеҙмәттәре донъя күрә. Ғүмеренең аҙаҡҡы йылдарында ул "Хәтирәләр" китабы өҫтөндә эшләй. Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙе һайлаған фәндең мәшһүр вәкиле булып тора, сөнки ғилми эшмәкәрлегенең әһәмиәте бөгөнгө көндә лә баһалап бөткөһөҙ.

**▸ Ғайса Хөсәйенов Ә. Вәлиди ижадын өйрәнеп, "Фәндең өс йүнәлешендә - тарих (төрки халыҡтарының дөйөм тарихы), этнография, текстология өлкәһендә фронталь рәүештә тикшеренеүҙәр алып бара, был йүнәлештәрҙең һәр береһендә донъя төркиселегенә һәм шәрҡиәтселегенә баһалап бөткөһөҙ ҙур өлөш булырҙай фундаменталь хеҙмәттәр яҙа", ти. Башҡорт тарихынан тыш, дөйөм төрки тарихында ла эҙе бар, тимәк, Вәлидиҙең?**

**Ф. Хисаметдинова:** Ә.З. Вәлиди, дөйөм төрки мәҙәниәте өлкәһендә икһеҙ-сикһеҙ белемгә эйә булыусы, уның төп йүнәлештәрен һәм проблемаларын билдәләй белеүсе ғалим булыу менән бергә, тарих методологияһының бөйөк остазы булараҡ та оло абруй ҡаҙана. Уның иң күренекле капиталь монографияларынан "Ғөмүми төрк тарихына инеш" һәм "Тарихи ысул" иң әүәл нәҡ бына шул йәһәттән ҙур ғилми әһәмиәткә эйә. "Ғөмүми төрк тарихына инеш" китабы төрки донъяһының иң боронғо дәүерҙәренән алып XIV-XV быуаттарға тиклемге тарихын тикшереүгә арналған. Был хеҙмәт донъяның төрки халыҡтарының алыҫ ата-бабалары, боронғо һәм урта быуаттар ҡәбилә союздары һәм төрки дәүләттәре, боронғо әҙәби һәм фольклор ҡомартҡылары, Орхон-Йәнәсәй, руна яҙмалары, ырыуҙар тарихы, төрки халыҡтарының матди һәм рухи мәҙәниәте буйынса төплө тикшеренеү өлгөһө була ала. Ә. Вәлиди, төркиәтселек һәм шәрҡиәтселектең, алда әйткәнебеҙсә, бер юлы бер нисә йүнәлешендә ҡолас йәйеп эшләүсе ҙур ғилем эйәһе булараҡ та, Хоҙайҙан бирелгән тәбиғи таланты һәм фекерләү ҡеүәһе менән дә ысын мәғәнәһендә энциклопедист ғалим ул. Был ғәжәйеп белем һәм хәтер, ҡараштар һәм дөйөмләштереүҙәр киңлеге уның ижадының тәүге осоронда ап-асыҡ күренеп тора.

**▸ Белеүебеҙсә, ошондай ғалимыбыҙ, Салауат Юлаев кеүек легендар милли батырыбыҙ кеүек үк, тыуған яҡтарынан айырылып, уны бер күреүгә зар-интизар булып йәшәргә мәжбүр була. Асылда, уйлап ҡараһаң, тыуған ерҙән айырылыу ғазабынан да михнәтлерәк тойғо бар микән?**

**Ф. Хисаметдинова:** Эйе, Ә. Вәлиди теүәл 50 йыл эмиграцияла йәшәй, ошо ярты быуат ваҡыт эсендә уға бер генә мәртәбә булһа ла Башҡортостан тупрағына ҡайтып аяҡ баҫырға мөмкинлек бирелмәй. Әммә ғүмер буйына үҙ ере һәм үҙ моңо, үҙ милләтенең һәм үҙ мәмләкәтенең яҙмышы тураһындағы мөҡәддәс уй-тойғолар менән йәшәй. Ә инде ҡурай һәм башҡорт халыҡ йырҙары мәңгелек бер йыуанысына әйләнә. Ә. Вәлидиҙең ҡыҙы профессор Иҫәнбикә Туған иһә атаһының ҡурайҙа иң йыш уйнаған бер көйө мәшһүр "Илсе Ғайса" йыры булғанлығын хәбәр итә. "Иң яҡын дуҫы Ғәлимйән Таған үлгәс, мәмләкәтендәге тау-урмандарға оҡшатҡан Болу тауҙарында йырҙар йырлап иланы", - тип яҙа ул "Атайымды иҫкә алған саҡта" тигән мәҡәләһендә.

Ә. Вәлидиҙең Төркиәләге уҡыусыларынан береһе профессор Әнүәр Ҡонуҡсы: "Уны үҙ мәмләкәте хәсрәтенән һис бер ваҡыт тынысландыра алманыҡ", - тигән. Ә инде Иҫәнбикә Туған, атаһының был тиклем дә ғәзиз күргән халыҡ араһында уны бер мөғәллим сифатында хәтерләүҙәренә иғтибар итеп һәм шуға ҙур әһәмиәт биреп, ошондай бер һөйләшеүҙе иҫенә төшөрә: "Әсәйем бер ваҡыт: "Йәнем, һин был ҡәҙәр, мәмләкәтем, мәмләкәтем, тиһең, хәҙер унда ҡайтһаң, һине ҡабаттан дәүләт башлығы итерҙәр инеме икән?" - тип һораған. Атайым иһә: "Юҡ, Нәжмиәкәйем, ҡайтһам, ауылымда ҡалып, мөғәллим булыр инем", - тип яуап биргән". Ә бит хәҙер ул, оло мәғәнәһендә, халыҡтың Мөғәллиме, милләтебеҙҙең ауыр һынауҙарға дусар ителгән оҙон тарих юлдарында аҡыллы кәңәшсеһе булып та, ҡыйыу һәм тәүәккәл юлбашсы һынында ла күҙ алдына баҫа.

**(Дауамы 11-се биттә).**

***✓ Миңә ҡалһа, мөхәббәт ул бирәү һәм ул һәр саҡ беҙҙең үҙебеҙҙең булмышыбыҙҙа йәшәй. Ул әҙәм балаһына бирелгән иң мөҡәддәс һәҙиәләрҙең береһе, иң оло бүләк. Бөтәһе лә мөхәббәттән башлана.***

*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*

**Башҡорт әҙәбиәтендә Һ. Дәүләтшиналар, З.Биишевалар рухын дауам иттереүсе әҙибәләребеҙҙең береһе Гөлсирә Ғиззәтуллинаның ижады һәм ошо ижадтан сығып яҙыусы үҙе лә уҡыусыны бик ҡыҙыҡһындыралыр. Уның әҫәрҙәрендәге фәлсәфә, геройҙар донъяһының серлелеге, бәлки, һәр китап һөйөүсегә аңлашылып та етмәҫ. Йәшәйешкә ҡыҙыҡлы ҡарашы булған әҙибә үҙе лә, ижады, фекерләүҙәре, аралашыуы, мөнәсәбәттәре менән тотошлайы бер мөғжизәле утрау кеүек. Бөгөн беҙ уға мөрәжәғәт иттек өс һорау менән.**

# ХЫЯЛДАР ТЫУҺА...

## мөмкинлектәр үҙенән-үҙе асыла



**➔ Һеҙ әҙәбиәттә ҡатын-ҡыҙҙы яҡлаусы, уҡыусыға уның әллә ни төр күңел ҡатламдарын күрһәтеүсе, серҙәрен, уй-хыялдарын, теләктәрен асыусы. Һеҙ был "ҡатын-ҡыҙ" тигән донъяны бер туҡтауһыҙ кемгәлер нығыраҡ төшөндөрөргә, аңлатырға тырышаһығыҙ кеүек. Кемгә?**

- Борон-борондан ҡатын-ҡыҙ тураһында, ғәҙәттә, ирҙәр яҙған һәм уларға үҙҙәре күрергә теләгән сифаттарҙы биргән, үҙҙәренең төпкө аңда йәшерелгән теләктәре, хыялдары, рәнйеүҙәре һ.б. күҙлегенән ҡараған һәм баһалаған. Шуға күрә был һүрәтләүҙәр йыш ҡына ҡатын-ҡыҙҙарҙың хайран ҡатмарлы һәм тәрән, нескә күңел донъяһын үтә ҡойто, һаран һәм примитив яҡтырта. Донъяға ҡатын-ҡыҙ күҙҙәре менән ҡараған кеше булараҡ, ул донъяны, шулай уҡ ғүмер буйы йәнәш йәшәргә, ябай һәм ҡатмарлы мөнәсәбәттәргә инергә мәжбүр булған ир-аттарҙы нисек күреүебеҙҙе һүрәтләргә ынтылыш - мине ҡулыма ҡәләм алырға дәртләндергән теләктәрҙең береһе. Шул уҡ ваҡытта, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, яҙыу процесында мин, ғөмүмән, уҡыусыны бөтөнләй күҙ уңында тотмайым. Әгәр ҙә нимә тураһындалыр яҙам икән, был миңә, иң тәүге сиратта, үҙем өсөн кәрәк.

Бәләкәйҙән үк мине ҡатын-ҡыҙҙы беҙҙең йәмғиәттә икенсел итеп, ирҙәрҙән түбәнерәк тип ҡарау бик ныҡ сәмләндерә ине. Хәҙер беҙгә, үҫешкән һәм хатта ҡайһы берҙә артығыраҡ булып киткән феминизм осоронда йәшәүселәргә, бәлки, был сәйерерәк тә тойолор, әммә беҙ үҫкәндә был ҡараш көслө ине әле. Ҡатын-ҡыҙҙар менән ирҙәр араһындағы бер-береһен аңламауҙан килеп сыҡҡан фажиғәләрҙе мин ул ваҡытта айырым шәхестәр кимәлендә хәл итергә тырышҡанман. Йоҡа тиреле, артыҡ нескә тойоусан, бөтә нәмәне лә самаһыҙ яҡын ҡабул иткән кеше булараҡ, был аңлашылмаусанлыҡтар мине һүрәтләп биргеһеҙ күңел төшөнкөлөгөнә килтергән ваҡыттар булды. "Өмөтөмдө ҡалдыр", "Йөҙ ҙә бер ғүмерем" тигән китаптарыма тупланған хикәйәләрем тап ана шул осорҙарҙа яҙылған. "Башҡортостан ҡыҙы" журналында эшләгән сағымда гендер мәсьәләләре менән махсус ҡыҙыҡһына башланым, конференцияларҙа ҡатнаштым һәм мәҡәләләр серияһы яҙҙым. Тап бына шул ваҡытта үҙем өсөн тәбиғәттең аяуһыҙ ғәҙеллеген һәм бөтә нәмәнең төп маҡсатҡа йүнәлтелгәнен күрһәткән нәмәләр хаҡында белдем. Беҙ - ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар - беребеҙ ҙә артыҡ та, кәм дә түгелбеҙ, беҙ төрлөбөҙ. Был төрлөлөк беҙгә тәбиғәт тарафынан йөкмәтелгән бурыстарҙан килеп сыға. Тәүрат китабында әйтелгәнсә, Аллаһы Тәғәлә кешеләргә: "Үрсегеҙ һәм ишәйегеҙ", - тигән. Ирҙәргә мөмкин тиклем күберәк нәҫел ҡалдырыу, ә ҡатын-ҡыҙҙарға баланы йөрәк аҫтында йөрөтөп, табып, бағып, аяҡҡа баҫтырыу бурысы ҡуйылған. Йөкмәтелгән бурыстарға ҡарап, беҙгә уларҙы атҡарып сығырлыҡ биологик сифаттар һалынған. Шуға мин хәҙер "Ҡатын-ҡыҙҙар яҡшыраҡмы, әллә ирҙәрме?" тигән бәхәстәргә ҡатнашмайым. Беҙ барыбыҙ ҙа шәп, тик төрлөбөҙ төрлөсә.

**➔ Сит ерҙәрҙә ғүмер итеп ҡайтыуығыҙҙы беләбеҙ. Нимә эҙләнегеҙ: толҡамы, мажарамы, ғибрәтме?**

- Мин Үзбәкстанда тыуғанмын һәм атайымдың йәнтөйәге - Ейәнсура районы Иҙәш ауылына күсеп ҡайтып килгән саҡта Ырымбур вокзалында атлап киткәнмен. Сәйәхәт минең ҡанымдалыр тип уйлайым. Китап уҡый башлағандан бирле Африка тураһында хыялландым. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, илебеҙгә, быға тиклемге тарихыбыҙға, ғөмүмән, бөтә нәмәгә ҡара яғыу модаға инеп китте, Көнбайышта бөтәһе лә ал да гөл, беҙҙә бөтәһе лә насар, тигән фекер бик әүҙем рәүештә аңыбыҙға һеңдерелә башланы. Бына шул ваҡытта минең башыма әллә ҡайҙан Амстердам тигән һүҙ һәм унда йәшәп ҡарау теләге килеп инде. Ни өсөн тап Амстердам икәне минең үҙемә лә һаман сер, әммә минең өсөн бынан да ҡулайыраҡ урынды табыуы ҡыйын булыр ине, тип уйлайым. Ундағы рухи азатлыҡ, кешегә, тик кеше булған өсөн генә лә тәрән ихтирам - былар барыһы ла миңә әйтеп биргеһеҙ кинәнес бирҙе. Хәйер, мин алғараҡ киттем. Тик мине туризм түгел, ә тап унда бер ни тиклем йәшәү һәм кешеләр менән көндәлек шарттарҙа аралашыу мөмкинлеге ҡыҙыҡһындыра ине. Хыял тыуғас, яйлап ҡына мөмкинлектәр ҙә асыла башланы. Голландияла йәшәгән бер йылым офоғомдо ғәйәт киңәйтте. Беренсенән, мин донъяның бик күп тарафтарынан килгән студенттар мөхитендә йәшәнем. Был бик файҙалы тәжрибә: беҙҙең бөтәбеҙгә лә еңел булмаған шарттарҙа (үҙегеҙ беләһегеҙ, белем алыу - энә менән ҡойо ҡаҙыу) бер-беребеҙгә таяныс булып, икмәк-тоҙона тиклем алмашып, бик тығыҙ аралашырға тура килде. Бына шунда мин төрлө культураларҙың айырмаһын көндәлек тормошта күреп белдем. Икенсенән, уҡығанда "Лингвистик антропология", "Мәҙәни антропология" тигән фәндәр, боронғо йәһүд, инглиз телдәрен тәрәнерәк өйрәнеү донъялағы халыҡтар һәм минең үҙемдең халҡымдың ул халыҡтар араһында тотҡан урыны хаҡында тәрәнерәк уйланырға форсат бирҙе. Хатта беренсе ҡарашҡа ваҡ-төйәк күренгән мәсьәләләрҙә лә, мәҫәлән, ни өсөн Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙары биҙәнеүгә, кейемгә нығыраҡ иғтибар бирә, ни өсөн голландтар өйгә кеше килеп инеү менән беҙҙең һымаҡ сәй ҡуйырға йүгермәй, ни өсөн инглиздар йыш ҡына хатта лифтта йөҙмә-йөҙ осрашҡанда ла һаулыҡ һорашып бармай, ни өсөн беҙ үтә самалы, ә американдар артыҡ мул йылмая? "Ни өсөн?" тигән һорауҙың бик файҙалы һәм емешле икәнен аңланым. Факттар артында уның сәбәптәрен дә күреү ғәйәт мауыҡтарғыс. Шул уҡ ваҡытта сит ил пропагандаһының, сәйәсәттең ике төрлө стандарттарға ҡоролоуын үҙ елкәмдә татып белдем. Европала закондарҙың ни тиклем һәм ни өсөн бик теүәл эшләүен, кешеләрҙең унда ни тиклем күп һәм башкөллө бирелеп, сифатлы эшләргә тырышыуҙарын (үҙемдең таныштарым һәм дуҫтарым миҫалында әйтәм), шул уҡ ваҡытта Ер йөҙөндә ожмахтың булмауын һәм бер нәмәнең дә буштан ғына килмәүен һәм килергә тейеш тә түгеллеген аңлау күңелгә тыныслыҡ бирҙе. Инде Африканың иң ярлы илдәренең береһе булған Буркина-Фасола һәм Тогола булыу, бер нисә көн буйы ярлы ғына Африка ауылында ҡурсалап тороусы дуҫтарһыҙ, үҙем генә йәшәп ҡарау тағы ла бик күп нәмәләр асты. Донъяға яҙыусы күҙе менән баҡҡан кеше өсөн был тәжрибә, был тәьҫораттар баһалап бөткөһөҙ ҡиммәт һәм мауыҡтырғыс.

**➔ Йәшлек мөхәббәте барыһына ла хас, ә урта йәштәрҙә килергә мөмкин булған хистәргә нисек ҡарайһығыҙ? Бындай һөйөү кеше тәбиғәтендәге аномалиямы, әллә бәхетме?**

- Һөйөүгә төрлө аспекттан ҡарарға мөмкин. Биология, физиология, химия, рухи... Ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе кешеләр меңдәрсә йылдар буйы күҙәтә, моғайын, инде миллиондарса том китаптар яҙылған, әммә был һаман иң ҙур серҙәрҙең береһе булып ҡала. Миңә ҡалһа, мөхәббәт ул бирәү: үҙ-үҙеңә, тормошҡа, донъяға, тәбиғәткә, кешеләргә, сабыйыңа, ата-әсәңә һ.б. һөйөү һәм ул һәр саҡ беҙҙең үҙебеҙҙең булмышыбыҙҙа йәшәй. Ул әҙәм балаһына бирелгән иң мөҡәддәс һәҙиәләрҙең береһе, иң оло бүләк. Бөтәһе лә мөхәббәттән башлана. Мин был тойғо һәр беребеҙгә тыуыштан программа рәүешендә бирелгән һәм ҡайһы бирәүҙәрҙә "пуск" тигән нөктәгә баҫылмағандыр ғына тип уйлайым. Был - әсә кешенең бурысы. Иң төп бурысы. Сөнки һөйөү кешенән тышта түгел, ул эстә. Ни тиклем нығыраҡ яратаһың, шул тиклем нығыраҡ һөйөү менән солғанып алғанһың. Минең быны үҙемдең тойғаным бар. Ғәҙәти хәлемдә мин кешеләрҙе яратам һәм был миңә үҙемде ғәйәт бәхетле тойорға мөмкинлек бирә. Әммә ҡайһы бер күңелем ҡатып киткән, һөйөү түгел, ә йән көйөү, рәнйеү, үпкә биләп алған мәлдәрҙә донъяның ни тиклем шыҡһыҙ, һалҡын булып ҡалғанын тоям. Бына ҡайҙа ул бәхетһеҙлек! Кемдеңдер беҙҙе яратыуын теләү, бәхетле итеүен көтөп, шуға өмөтләнеп йәшәү - үҙ-үҙеңде күрәләтә ҡорбан хәленә ҡуйыу, ғүмерҙе бушҡа үткәреү, тип ҡарайым. Кемгәлер ғашиҡ булыуға килгәндә, әгәр ҙә уны эргә-тирәндәге яҡындарың өсөн фажиғәгә әйләндермәҫкә ихтыярың етһә, ул һәр йәштә лә ҡыуаныс. Әгәр ҙә ысын мәғәнәһендә яратаһың икән, һин ғашиҡ булған кешенең яуабы ла мотлаҡ түгел бит. Иң мөһиме, ул был донъяла бар, донъяла ысынлап та мөхәббәт тигән тойғо бар һәм әле һин шуның нурында ҡойонаһың. Минеңсә, был илаһи тойғо. Инде ҡалғаны: мотлаҡ ул кешене үҙеңдеке итергә тырышыу, унан нимәлер өмөт итеү, хатта талап итеү - улар барыһы ла икенсел тойғолар. Минеңсә... Һәр кемдең үҙенсә... Һәм шулай булыуы бик шәп.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**һорауҙар бирҙе.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БАШҠОРТ ҠЫҘЫ ОБРАЗЫ НИНДӘЙ?

Мәскәүҙә йәшәүсе бер милләттәш шундай һорау бирҙе:

- Башҡорт ҡатын-ҡыҙы образы бармы, ул ниндәй?

Икенсе милләт ҡыҙына өйләнеп, байтаҡ йылдар Мәскәүҙә йәшәп, икенсе милләт балаларын ишәйтеп ятҡан егеттәребеҙҙең береһе ине ул. Ахыры, аҡылына килә, уйлана башлаған был, үҙенекенә тартылыу ошо һорауҙы тыуҙырғандыр, тигән ҡарарға килдем һәм:

- Бар, әлбиттә! - тип ғорур яуап ҡайтарҙым.

- Ә ниңә мин уларҙы башҡаларҙан айыра алмайым? "Ниңә кейәүгә сыҡмай йөрөйһөң?" тим бирәүһенә. "Миңә тиң ир тыумаған әле!" тип кенә эре сирттерҙе. Ошомо башҡорт ҡатын-ҡыҙы образы? Ир-егеттәрҙе һанға һуҡмаған, ирҙәрҙән алда хәбәр һөйләгән, ирҙәрҙең ирлеген һанламағандар башҡорт ҡатын-ҡыҙы буламы? Хәҙер бит күберәк шундайҙарҙы ғына осратаһың...

Мин милләттәш ир менән бәхәсләшергә итеп, бер-нисә һүҙ әйтеп өлгөрҙөм, әммә ул минең ауыҙҙы ябыр шундай дәлил килтерҙе:

-Илленән уҙғас, икенсе милләттән булған ҡатыным менән талаш-тартыш башланды. "Башҡорт ҡыҙҙарына етмәй инде!" тип ысҡындырғанмын бер талаш ваҡытында. Ҡатыным өйгә бер башҡорт әхирәтен алып ҡайта башланы. Бергәләп эсәләр, һүгенәләр былар, саманан сығып шашыналар. Аҙаҡ ҡатыным:

"Башҡорт ҡатындарын минән яҡшыраҡ тип уйлай инең, күрҙеңме инде?"- тине. Шулай рәхәтләнеп үс алды минән...

Ысынлап та, беҙме был?..

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

ДИАЛОГ

# ВӘЛИДИ ИДЕЯЛАРЫН ДАУАМ ИТЕП...

## Башҡортостанда көнсығышты өйрәнеүселәрҙең X Бөтә Рәсәй съезы үтәсәк

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Бөгөн ҡайһы бер баҫмаларҙа, интернетта Вәлидиҙең шәхесе хаҡында төрлө фекерҙәр бар...**

**Ф. Хисаметдинова:** Әгәр Советтар Союзында уның тураһында донъя күргән барлыҡ материалдарҙы ла бергә туплаһаҡ, бер нисә том хасил булыр ине: аҡ гвардеец, башҡорт халҡының һәм, ғөмүмән, барлыҡ совет кешеләренең дошманы, милләтсе, сит ил разведкалары агенты... Ә "Ҙур совет энциклопедияһы"нда иһә "Валидовщина" тигән айырым термин да бар. Әгәр Әхмәтзәки Вәлидиҙең оппоненттары - Иҙел-Урал милли-мәҙәни автономия идеяһы яҡлылар - баҫтырып сығарған "хеҙмәттәр"ҙе бергә йыйһаҡ, шулай уҡ "ҡурҡыныс" бер образ барлыҡҡа килә: "Берҙәм төрки-татар халыҡтарын айырыусы", "инҡилап йылдарында берҙәм төрки-татар хәрәкәтен бүлгеләүсе", "авантюрист", "КГБ агенты" һәм башҡалар... Шундай төр бүтән материалдарҙы йыйнай китһәк, беҙ тағы ла "төрөктәрҙең дәүләти хәүефһеҙлегенә мәкер менән янаған ҡотҡосо", "хатта Ататөрктөң үҙе менән иҫәпләшмәгән боласы", һуңғы ваҡытта иһә күберәк "Гитлерҙың серле дуҫы һәм теләктәше", "СС полковнигы" һәм башҡа шундай бик күп образдар менән осрашырбыҙ. Ә инде Әхмәтзәки Вәлидиҙең Япониянан алып ғәрәп дәүләттәренәсә күпселек илдәрҙә, Төркиәлә, Европала һәм Америкала күпләп баҫылып сыҡҡан, әле һаман да донъяның иң билдәле шәрҡиәтселәре тарафынан ныҡлап өйрәнелгән, фәнни хеҙмәттәрендә нигеҙ булараҡ ҡулланылған том-том ғилми яҙмаларын йыйһаҡ, ҙур бер китапхана барлыҡҡа килер ине. Был осраҡта иһә беҙҙең алға ул төрлө тарихи дәүерҙәрҙә фарсы, ғәрәп һәм төрки телдәрендә яҙып ҡалдырылған, Урта Азия, Афғанстан, Иран, Һиндостан, ғәрәп илдәре, Төркиә, Европа һәм Америка китапханаларында һаҡланған боронғо, урта быуат һәм бүтән тарихи сығанаҡтарҙы иң-иң яҡшы өйрәнгән оло ғалим сифатында килеп баҫа. Һәм быларҙың барыһы ла бер үк кеше - ғүмере буйы тыуған Көҙәне, Уралы, Башҡортостаны тураһында уйлап янған ябай башҡорт уланы. Ваҡытында ул башҡорт халҡы өсөн күп эшләгән һәм, ниндәйҙер яҡтан алып ҡарағанда, ғүмерен ҡорбан иткән. Бөгөн иһә беҙ уның өсөн эшләргә - уның аҫыл исемен бысратырға юл ҡуймаҫҡа тейешбеҙ.

**Ә. Сәлихов:** Ататөрк режимы тарафынан идеологик ҡыҫым башланғас, Әхмәтзәки Вәлиди, Истанбул университетын ташлап, Венаға китә, шундағы университетҡа уҡырға инә һәм бер үк ваҡытта заманында үҙе табып алған "Ибн Фаҙлан юлъяҙмалары"н немец телендә баҫтырып сығарыуға әҙерләй башлай. Вена университетын тамамлаған, уҡыу йылдарында немец телен өйрәнеп ҡалыу ғына түгел, шул телдә үҙенең Ибн Фаҙлан тураһындағы китабын да әҙерләп өлгөргән тарихсыны Бонн, аҙаҡ Геттинген университеттарына уҡытырға саҡыралар. 1938 йылда Лейпцигта уның китабы ла донъя күрә. Шул рәүешле Әхмәтзәки Вәлиди шәрҡиәтселәрҙең ғилми түңәрәктәрендә билдәлелек яулай. Шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙәге инҡилаптарҙа һәм Граждандар һуғышында ҡатнашыусы, ҡыҙылдарҙың да, аҡтарҙың да иң билдәле лидерҙары менән күҙгә-күҙ осрашып һөйләшеүсе сәйәси эшмәкәр менән, әлбиттә, Германияның махсус хеҙмәттәре лә ныҡлап ҡыҙыҡһына. Шулай итеп, большевиктарҙың тоталитаризмы, Ататөрктөң авторитаризмы бында уға Гитлерҙың фашизмы сифатында "һөжүм итә". Сит илдәрҙә Әхмәтзәки Вәлиди ғүмеренең аҙағынаса бер ҡағыҙәне тота: үҙең эмиграцияла булған илдең эске эштәренә ҡыҫылмаҫҡа һәм мөмкин булғанса был турала яҙмаҫҡа. Шуға ла уның нацистар тураһында яҙып ҡалдырған ниндәй ҙә булһа баһалламаларын минең әлегә осратҡаным юҡ. Әммә былар уға бер ниндәй ҙә яла ягыуға хоҡуҡ бирмәй.

**Вәлидиҙең ижады өйрәнелеп бөткәнме, архивтары араһында беҙҙә тағы ла ғәжәпкә ҡалдырырлыҡ, ниндәйҙер асыштар яһарлыҡ яңылыҡтар ятмаймы икән?**

**Ф. Хисаметдинова:** Бик мөмкин, сөнки әле уның ижадының бары өстән бер өлөшө генә билдәле. Иҫәнбикә ханым мине уның эш кабинетына алып ингәйне. Унда китапқа тип йыйналған материалдар папка-папка ята ине. Шуларҙа ниндәй генә аҡыл, белем юҡ тиһең? Ул ижад итеү, бер генә мәҡәлә яҙыу өсөн дә иң башта ул өйрәнәсәк өлкәне уға тиклем кем өйрәнгән, кем нимәләр яҙған, ҡайһы илдә, ҡайһы телдә баҫылған икәне хаҡында мәғлүмәт туплаған. Ғалимдарыбыҙ Вәлиди ижадын йылдан-йыл тәплөрәк үҙләштерер һәм киләсәктә уның бар ижады, яҙмалары ла ҡулъяҙмалары ла беҙгә билдәле булыр, тип өмөт итәбеҙ.

**Бөгөн баш ҡалабыҙҙа Әхмәтзәки Вәлидигә ҡуйылған бер һәйкәл дә юҡ, ошо мәсьәлә һеҙҙе борсомаймы?**

**Ф. Хисаметдинова:** Әлбиттә, борсой. Беҙ был һорауҙы съезд резолюцияһына индерәсәкбеҙ һәм мәсьәлә тиҙ арала ыңғай хәл ителер, тип уйлайбыҙ. Республика етәкселеге лә, халҡыбыҙ зыялылары ла олуғ шәхесебеҙҙең абруйлы юбилейын билдәләү алдынан ошо проблемаға битараф ҡалмаҫ, моғайын.

**Әхмәтзәки Вәлиди идеяларының актуаллеге бөгөнгө көнгә тура киләме?**

**Ә. Сәлихов:** Быны раҫлаған бер-нисә генә миҫал килтерәм. Мәҫәлән, Вәлиди, милләтте тел, дин һәм ерҙәрҙе һаҡлау йәшәтәсәк, тигән, беҙ шулар өсөн көрәшәбеҙ. Төрки илдәрен берләштереү яҡлы булған - бөгөн беҙ берләшеүгә табан барабыҙ. Әле үтәсәк съезд тап шуның бер матур өлгөһө лә инде. Тимәк, беҙ Вәлиди идеялары менән йәшәйбеҙ, сөнки ул беҙҙең халыҡтың, милләттең идеялары.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
әңгәмә ҡорҙо.

ЗАУЫҠ

*Риф ӘХМӘҘИЕВ*

# АУЫЛЫМДЫҢ БӨРЛӨГӘНЕ УҢҒАН,

## Йыйып ҡына алыр кеше юҡ...

### Донъя - дарья

*Оло ғалим Рәғиб Имаевҡа арнайым*

Юлға сыҡҡан берәү.
Әлегә ул үҫмер ир бала.
Әле уның ерҙә эҙе түгел
Күҙҙәренән тамып, нур ҡала.

Ашыға ул
Бер сәхифә итеп,
Ибрай менән Абзан араһын.
Мәктәпкә тип бара.
Юҡһа, ашыҡмаҫҡа
Табыр ине берәй сараһын.

Килә малай
Уның барыр юлын
Ас бүреләр осрап ҡыйманы.
Ул маҡсатлы булып,
Хатта дошманының
Яуызлығын ҡайсаҡ тойманы.

Юлсы егет
Хәҙер ил ағаһы,
Изгелекле, ябай йәмғесә.
Йәшәй кеше.
Рәғиб кеүектәрҙән
Бар донъяға сәм һәм ғәм күсә.

### Йәйғор ғүмере

*Композитор С. Низаметдиновтың яҡты иҫтәлегенә*

Ғәжәйеп хәл күреп ҡалдым
Йәйге ҡала кисендә -
Бер нигә лә юраманым,
Яҡшыға ла, яманға ла,
Ысынға ла, ялғанға ла,
Тик ошо хәл ни эшләптер
Һеңеп ҡалды күңелгә...
Киңәйәле булған был хәл,
Шауҡымы ташып тора -
Йәйғор һынына һарылып
Салауат баҫып тора,
Фанилыҡҡа китеп торған
Салауат - маэстро...
Тәҡдир сикләнгән булһа ла,
Үлсәмгә һыймай ғүмер,
Һинеке ише яҙмышҡа
Кем сыҙар ҙа, кем түҙер -
Торғаны утлы күмер.
Әллә шунан арынырға
Теләп, күккә үрелдең.
Йәнең шунда тынлыҡ тапты,
Йәйғор булып һүрелдең...
Исемең менән,
Бигерәк есемең менән
Астың мондоң серҙәрен,
Һалып ғәмле күңелдәргә
Салауат күперҙәрен.
Сәнғәттә лә һинә,
Йәннәттә лә һинә
Хас бер хикмәт, бер ырым -
Ул - мәңгелек моңо,
Үлемһеҙ моң,
Һинең йырың - "Күҙ нурым".
"Күҙ нурым"...

* * *

Үткәндәргә ҡайтам,
(Беләйем тип,
Бөгөнгөнөң ғәмен бигерәк) -
Булған унда хата, алданыуҙар,
Әммә аңлашыуҙар күберәк.
Яҙмыш минә мәрхәмәтле булды,
Яҡты булды биргән көндәре.
Мөмкин икән,
Мин тик үткәндәрҙән
Эҙләр инем һине элгәре.
Күктән йондоҙ инде эҙләмәйем,
Буй етмәҫлек улар - юғары!
Янып, ергә төшкән йондоҙҙарҙың
Ярсыҡтарын йыям ни бары...

Улар, бәлки, ярсыҡ түгелдер ҙә,
Минең йөрәк сәскән осҡондор!
Белгең килһә
Йөрәгемдең хәлен -
Кил дә күсәренән ысҡындыр.

* * *

Мөмкинме һуң
Кеше иҫән саҡта
Тыуған йорттоң уты һүнергә?
Аяныслы, ләкин бындай хәлдә
Насип була икән күрергә

Тәбиғәттең серле көсө бар ҙа,
Кеше хәлен аңлар хисе юҡ
Ауылымдың бөрлөгәне уңған,
Йыйып ҡына алыр кеше юҡ.

Зарлыларҙы аңламаҫ та инем,
Етемлектән күңелем тулмаһа.
Иҫән китер, тыуған ерең булып,
Ҡайтыр йортоң әгәр булмаһа.

Йәшәйеш ул һаман элеккесә,
Һиндә, миндә уның эше юҡ.
Ауылымдың иртәләрен йәмләп,
Көтөү ҡыуырлыҡ бит кеше юҡ.

✓ *Әсеү ташлағанда иң ауыры тәүге көн. Эсеңдә ятҡан теге хәшәрәтте тонсоҡторҙом тип тә уйламайһың, сөнки уның ҡаны оҙайлы йылдар буйы минең дә ҡаныма күскән.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ГҮЗӘЛ ЗАТТЫҢ...

## идеаль үлсәмдәре

■ Стресс гормоны - кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа "Neuroscience" журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытҡа күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә иғтибар көсәйә, ул кешегә тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире эҙемтәләргә килтерә: аш һеңдереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьҫире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа осрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

■ Тиреләге һырҙарҙы төрлө үлән һәм емеш-еләк төнәтмәләре өҫтәлгән боҙ ярҙамында бөтөрөргә була. Һәр иртә һайын бит тиреһен боҙ менән ышҡыу тирене шымарта, матдәләр алышыныуын, ҡан әйләнешен яҡшырта. Ғалимдар бер ай буйына үткәргән һынауҙарҙа 2 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙың береһе иртәле-кисле боҙ ҡулланған, икенсеһе битен һыу менән йыуған. Һөҙөмтәлә, тәүге ҡатнашыусыла күҙәнәктәр ҡартайыу процесы яйланғанлығы асыҡланған.

■ Дархэм университеты неврологы Аманда Эллисон белдереүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда һалҡын тейҙереү һәм киҙеү симптомдарын ауырыраҡ кисерә. Доктор әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттең баш мейеһе үҫешенең бер осоронда айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Күп күрһәткестәр, шул иҫәптән, тән температураһы өсөн яуап биреүсе баш мейеһе өлөшө ир-егеттәрҙә тестостерон бүленеп сығыу һөҙөмтәһендә тиҙерәк үҫешә. Мейенең был өлөшө организмға инфекция инеүенә шунда уҡ тәьҫир итә һәм үҙенең эшен башлай, һөҙөмтәлә, тән температураһы күтәрелә. Тимәк, ирҙәрҙә дәүмәл яғынан ул ҙурыраҡ булыу сәбәпле, улар ныҒыраҡ сирләй.

■ Америка йоҡо медицинаһы академияһы хеҙмәткәрҙәре белдереүенсә, көндөҙ бер туҡтауһыҙ йоҡоға тартып тора икән, был организмда D витамины етешмәүенең бер билдәһе булыуы ихтимал. Сомнологта иҫәпә тороусы пациенттарҙы тикшереп ҡарағандан һуң, уларҙың барыһына ла тап ошо витамин етешмәүе асыҡланған. Шул уҡ ваҡытта, көн һайын йоҡоһо туйып уяныусы кешеләрҙе табыуы һирәк, ти белгестәр. Болотло көн, тынсыу эш бүлмәһе лә йоҡоно килтерә. Сөнки был осраҡтарҙа атмосфера баҫымы түбәнәйә һәм баш мейеһе кислород менән насар тәьмин ителә. Тәшкә аштан һуң да был күҙәтелеүе ихтимал, сөнки ҡан ашты эшкәртеү өсөн ашҡаҙанға тулыша, һөҙөмтәлә мейе тағы ла энергияһыҙ ҡала. Был осраҡтарҙа саф һауаға сығырға, хәрәкәт итергә кәрәк.

■ Хайфа сәләмәтлек милли институты (Израиль) ҡатын-ҡыҙҙар өсөн идеаль параметрҙар иҫәпләп сығарған. The Epoch Times яҙыуынса, иҫәпләүҙәр һөҙөмтәһендә асыҡланыуынса, буйы 170 сантиметр булған ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауырлығы 77 килограмм булырға тейеш. Күптән түгел Израилдә подиумға ябыҡ моделдәрҙе сығармау тураһында закон ҡабул ителде. Был сара модель стандарттарына ярарға тырышҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙа барлыҡҡа килеүсе анорексияны булдырмауға йүнәлтелгән. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ матурлығы идеалына килгәндә, эштәр былайыраҡ тора. Әгәр ҙә 2012 йылда үткәрелгән һорау алыуҙар буйынса ҡараһаҡ, гүзәл заттың ирендәре Скарлетт Йохансондыҡына, сикәһе ҡара тәнле һылыу Холли Берриныҡына, тиреһе Эмми Адамс һәм тәне Пенелопа Круска оҡшаһа, ул матур, тип иҫәпләнер ине.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәләр - һабаҡ, кемдәргәләр кәңәш һүҙе булһын...

### 2-се һабаҡ: "Иң ауыры - тәүге көн"

... Көнмө был, төнмө? Тәҙрәнән урамға ҡараһам, көн һымаҡ, диҡҡәтемде бүлмә эсенә күсерһәм, күҙ алдыма төн баҫа. "Туҡта, был минме әле ул?" тип, көҙгөгә ҡараш ташлайым. Унан минә тексәйеп ҡарап торған бәндәне танымайым да һымаҡ. Кем һуң ул? Ҡайҙалыр осраҡҡан да, күргән дә кеүекмен. Күҙҙәремде йомоп, кире асам. Бер аҙ сырамыттым, үҙемә оҡшаған икән дәһә...

Тик тороуым тағы ла йөрәккә көс төшөрҙө, фатирымдың һәр бүлмәһенә сығып, һәр таҡтаһына баҫып, бик оҙаҡ йөрөнөм. Саҡ-саҡ ҡына хәл ингәндәй булды. Үҙ хәлемә ситтән ҡарап эш итергә кәрәк икәнлеген иҫемә төшөрҙөм. Был һабаҡты бер агай өйрәткәйне. Ул шунан ғибәрәт: иң ҡыйын саҡта үҙлегеңде ситкәрәк ҡуйып, үҙ-үҙеңә икенсе кеше күҙлегенән ҡарау. Оҙаҡ көттөрмәне, сәсрәтә әйтте минә ҡарап торған кеше: "Әхмәр, нишләүең был, һинә бит аяҡ һуҙырға ла оҙаҡ ҡалмаған. Үлеп-нитеп китһән, туғандарың башҡалар алдында оятҡа ҡаласаҡ бит. Көллө мир һөйләп, аяҡ күтәреп көләсәк. Балаларың ғүмер буйы: "Беҙҙең атай эсеп үлгән", - тигән мәсхәрә утында янасаҡ. Был бүлмәлә ҡалма, тиҙерәк, тиҙерәк ысҡын бынан..."

Ҡаланан алыҫ түгел ауылда йәшәүсе бер туған апаймыҙ иҫкә төшөрҙөм. Эйе, һис юғы уның менән хушлашып өлгөрәйем. Көс-хәл менән кейенеп, шаулап торған ҡала урамына сыҡтым. Йорттар ауып барған һымаҡ, машиналар баштүбән йөрөгәндәй. Сайҡалып, ҡолай яҙҙым. Трамвайға ултырҙым, тик инеүем булды, йөрәк йәнә туҡтай яҙҙы. Бер туҡталыш барғас, төшкәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Кеше һирәгерән йөрөгән урамдар, тыҡрыҡтар буйлап, автовокзал яғына һәлпәнләйем. Тейешле маршрутка билет алып, автобус көтәм. Кешенең күплеге. Ниңәләр барыһы ла шат йылмая, сәбәп юҡтан, һылтау табып, хахылдаша. Әллә минән көләләрме? Береһе килеп, бер ауыр һүҙ әйтһә, ҡысҡырып илап ебәрерҙәймен. Бөтә кешеләр алдында ниндәйҙер ғәфү итмәҫлек гонаһ ҡылған кеүекмен.

Оҙаҡ көттөрмәне, килде кеше ташығыс арба. Йөҙ кеше һыйҙырышлы автобусҡа ике йөҙлән кеше һыя икән, әммә был минең файҙаға түгел. Тын алғыһыҙ. Йөрәк өлпөлдәргә тотондо, ул туҡтамаһын өсөн берҙән-бер сарам - хәрәкәт. Берберенә тығыҙ һылышҡан кешеләр араһында ҡыҫылып торған килеш ҡыймылдарға, йәшәргә тырышам. Мең бәлә, йөҙ ыҙа менән, пассажирҙарҙан әрләнә-әрләнә, саҡ үлмәй, ауылға барып еттем.

Мине күргән апайым илап ебәрҙе, йүгереп йөрөп сәй ҡуйҙы, тәғәм хәстәрләне. Уларҙы ауыҙға ҡабыу түгел, күтәрелеп тә ҡарай алмайым. Апайым менән хушлашып уҡ бөттөм, тағы ла икеүләшеп илашып алдыҡ. Кискеһен дә ни ашай, ни сәй эсә алмай, апайым һалып биргән урынға ятырға уйланым. Барлығы биш секундтай ғына ойоғанмындыр, үҙемә таныш булған кисереш аша тағы ла упҡынға тәгәрәйем.

Хәҙер инде мин өс көн, өс төн керпек тә ҡаҡмағанмын. Өйҙәгеләргә ҡамасауламаҫ өсөн, тышҡа сыҡтым. Ихата уртаһында тауҙай бесән өйөлөп ята. Еҙнәм уны көндөҙ "Беларусь" менән алып ҡайтҡан. Тел осомда "Хәрәкәт, хәрәкәт" тигән һүҙҙәрҙе ҡырҡ ҡабатлап, ихата буйлап бергилке әйләндем дә, ҡулыма һәнәк алдым. Ипләп кенә, осоҡ ҡына бесән сәнсеп, әүеҫлек башына ташланым, тағы ла сәнстем, тағы...

Унынсы ҡат өҫкә бесән елгәргәндә, маңлайымдан ағып төшкән бер тамсы тир ғәләмәтен тойҙом. Тәнем буйлап һыуыҡ һауа ағымы йүгереп үтте. Был юлы инде һәнәгемә күберәк бесән эләктерҙем. Тағы ла биш тапҡыр ынтылғас, арҡам лыҡма һыу булды. Бер аҙҙан шыбыр тиргә баттым, ҡапыл хәлем бөттө. Соланға инеп, биҙрәлә ултырған һыуға йомолорға иттем. Эскән генә шыйыҡса кире ауыҙҙан китте.

Минең хәлемде уйлап, йәнен ус эсендә тотҡан апайым өйҙән килеп сыҡты. Ул бер ҡулымдағы сүмескә, икенсе ҡулымдағы һәнәккә ҡарап, хәлемде үҙенсә баһалап, кире өйгә йомолдо. Мин тағы ла бер нисә һәнәк бесән ташлағансы, иҙелгән ҡорот һурпаһы сығарҙы. Үҙемде ошондай саҡтарҙа мең тапҡыр ҡотҡарған ҡеүәтле шыйыҡсаны бер тынала эстем. Әммә эсемдәге теге "үлгән бесәй" ҡорот әселеген үҙһенмәнеме, ауыҙымдан кире сығарҙы. Шулай ҙа маңлайҙан туҡтауһыҙ тир аға башланы.

Бер аҙҙан апайым ҡайнар сәй яһап алып сыҡты. Эҫе шыйыҡса нисектер эскә төшөп ятты кеүек, әммә оҙаҡҡа түгел, тағы ла кирегә китте. Ахырыны теге "үлгән бесәй" танһыҡ ризығын таптырып ҡырталаша, икенсе төрлө шыйыҡса ҡойһаң, әллә үсегеп инде, баш тарта.

"Бесәй" менән таң атҡансы көрәштек: мин бер йөк бесәнде әүеҫлек башына ташлап бөтөрҙөм, апайым иһә өйҙән минә бер туҡтауһыҙ шыйыҡса ташыны.

Әсеү ташлағанда иң ауыры тәүге көн. Эсеңдә ятҡан теге хәшәрәтте тонсоҡторҙом тип тә уйламайһың, сөнки уның ҡаны оҙайлы йылдар буйы минең дә ҡаныма күскән. Наркологтар әйтеүенсә, ҡанды тулыһынса таҙартыр өсөн кеше кәмендә 13 йыл эсмәҫкә тейеш. Тәүбә төнөмдәге иң ҙур еңеүем шунан ғибәрәт: мин тәүге тапҡыр баш төҙәтмәнем.

Бесәнен төн оҙононда әүеҫлек башына мендергәнем өсөн эй ҡыуанды еҙнәм. Иртәнсәк: "Әйҙә, ҡойнеш, һыныҡ яҙҙыр" тип, ҡойоп та биреп ҡараны. Мин тәүге тапҡыр рюмкаға үрелмәнем.

Иң ауыры тәүге көн, тиҙәр. Артабанғы көндәрҙә лә еңел булманы.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ

## Илаһи белем көслөрәк




Дуҫым минә:

- Һеҙҙең шундай мәрхәмәтле, иғтибарлы, һәр нәмәне кисереүсе Раббығыҙ Үҙенең рәсүленә балаһын һуйырға нисек бойора ала һуң? Был ике төшөнсәне берләштереү бик ҡыйын, - тине.

- Әммә әлеге ваҡиғаның дауамы Аллаһының маҡсаты Бәйғәмбәрҙең тоғрологон һынау булғанлығын күрһәтә. Бының дәлиле - үлтереүҙең булмауы. Был һынауҙың мәғәнәһе: Ибраһим ғәләйһиссәләм үҙенең улы Исмәғилгә булған ҡайнар һөйөүен, саманан тыш бәйләнгәнлеген "һуйырға" тейеш булған. Сөнки Бәйғәмбәр йөрәге Алланан башҡа берәүгә лә бәйләнгән булырға тейеш түгел.

Ҡартайған көнөндә генә тыуған улын Ибраһим бик ныҡ ярата, ә былдай һынау менән Алла Ибраһимдың Раббыға тоғрологон һынаған. Ибраһим, Алла әмерен ишетеп, буйһона һәм бысаҡты улының муйынына терәгәндә ҡүктән Исмәғилде азат итеү әмере ишетелә.

- Ибраһим менән ғәжәп бер мөғжизәле ваҡиға булған, ул утҡа кереп, зарарһыҙ ҡалған, был турала ни әйтерһең? Таяҡты йыланға әйләндереп, ул таяҡ менән йылға һыуын киҫкән Муса ғәләйһиссәләм тураһында ни әйтерһең? Ҡултыҡ аҫтына тыҡҡан һәм унан сығарған ваҡытта нур сәскән ҡулы хаҡында? Был шарлатанлыҡ, цирк сәнғәте булып тойолмаймы һинә?

Ниңә Алла үҙ ҡөҙрәтен аҡылға һыймаған шундай нәмәләр менән күрһәтә? Ғаләмдең тәртибе, аҡыл мөмкинлектәре, донъя яратылышының ныҡлы законлары, галактикаларҙың теүәл хәрәкәте Алла ҡөҙрәтенә дәлил түгелме ни? - тине дуҫым.

- Һин мөғжизәне дөрөҫ аңламағанһың һәм дөрөҫ ҡуҙалламағанһың. Мөғжизә, һиненсә, ул - трюк, абсурд, тик асылы бында түгел. Әйтәйек,

КИТАБЕННАС

# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында




**Ливан яҙыусыһы Хәлил Джебрандың "Бәйғәмбәр" исемле был китабы XX башында донъя күргән. Китап бынан ике быуат элек яҙылһа ла, ундағы фекерҙәр уҡыусы күңелендә шаңдау таба, аңды яҡтырта. Үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ.**

### "Беҙгә доға ҡылыу тураһында һөйлә", тигән берәү.

"Мохтаж булғанда йә ҡайғы килгәндә генә ғибәҙәт ҡылып, Алланан һорайһығыҙ, - тигән Бәйғәмбәр. - Ә бит һеҙ шатлыҡлы һәм етеш көндәрегеҙҙә лә доға ҡыла алаһығыҙ. Сөнки доға ҡылыу, намаҙ уҡыу - ул Күктәге "Мин"егеҙҙең Илаһи дауамы. Ҡараңғы уй-тойғоларығыҙҙы Күккә бушатып, еңеллек тояһығыҙ икән, ә ниңә һуң йөрәгегеҙҙәге яҡты уй-шатлыҡтарығыҙҙы ла шулай өләшмәйһегеҙ? Доға ҡылған саҡта һеҙ юғары күтәреләһегеҙ һәм үҙегеҙ кеүек доға ҡылыусылар менән Күктә осрашаһығыҙ. Доға ҡылмайынса бер ваҡытта ла осрашмаҫ инегеҙ. Шуға күрә күҙгә күренмәгән был ҡорамға сәфәр ҡылыуығыҙ һоҡланыуҙан һәм шатлыҡтарҙан ғына торһон. Һораныу өсөн генә барһағыҙ, үтенесегеҙ ҡабул булмаҫ. Үҙегеҙҙе кәмһетһәгеҙ, һеҙҙе күтәрмәҫтәр. Башҡаларҙың именлеген ҡайғыртып барһағыҙ, һеҙҙе ишетмәҫтәр. Үҙегеҙ барыуығыҙ еткән. Һеҙҙең доғаларығыҙҙың һүҙҙәрен һеҙгә мин бирә алмайым. Хоҙай һеҙҙең һүҙҙәрегеҙҙе тыңламай, үҙенең һүҙҙәрен һеҙҙең аша ишетә.

Мин шулай уҡ урман-тауҙарҙың, диңгеҙҙәрҙең доғаһын да һеҙгә өйрәтә алмайым. Ләкин урман-тауҙарҙың, диңгеҙҙәрҙең балалары булараҡ, тәбиғәттең доғаһын үҙ йөрәгегеҙҙә табырһығыҙ. Төн тынлығына ҡолаҡ һалығыҙ һәм ишетерһегеҙ:

*"Йә, Аллаһ, Илаһи "Мин"ебеҙ һинән.*
*Һинең ихтыярың беҙҙең аша бойора.*
*Һинең теләгең беҙҙең аша теләй.*
*Һинең төндәрең*
*һинең теләк аша килә.*
*Яҡтылыҡты ла Һин бирәһең.*
*Беҙ Һинән бер нәмә лә*
*һорай алмайбыҙ,*
*Сөнки беҙҙең мохтажлыҡты*
*беҙҙән алда беләһең.*
*Беҙҙең мохтажлығыбыҙ Һинән.*
*Үҙеңде күберәк биргән һайын*
*Беҙгә нимә кәрәк,*
*бөтәһен дә бирәһең".*

### "Ә нимә ул ләззәт?" тип һораған дәрүиш.

"Ләззәт - ул азатлыҡ йыры, ләкин азатлыҡтың үҙе түгел, - тигән Бәйғәмбәр. - Ул - теләктәрегеҙҙең сәскә атҡан сағы, ләкин емеше түгел. Күңелегеҙ ләззәт теләүенә ҡаршы түгелмен, әммә уның йырын йырлағанда йөрәгегеҙҙе юғалтма күрмәгеҙ. Арағыҙҙа ләззәт эҙләүсе йәштәр бар, ләкин уларҙы һеҙ күп ләззәттәрҙән тыйып өлгөргәнһегеҙ. Мин дә уларҙы яманлаһам, эҙләнеү мөмкинлектәрен сикләр инем. Әлбиттә, улар үҙҙәре эҙләгәнен табасаҡ һәм юғалтасаҡ, сөнки ләззәттең ете һылыуы бар, уларҙың береһе икенсеһенән матурыраҡ. Арағыҙҙа ләззәт тураһында үкенеп иҫләгән ололар бар. Ләззәтте улар аҡылын юйған саҡта ҡылған хата, тип уйлай. Ләкин үкенестәр аңды томаламай, үткәндәр - үҙендә яҙалау асылы түгел. Йәш саҡта татыған ләззәттәрҙе һағынып иҫләргә кәрәк. Әммә кеше үкенестәренән дә ләззәт таба икән, әйҙә, үкенһен.

Арағыҙҙа йәшлек дәрте һүнгән, әммә үҙен ҡарт һанамағандар ҙа бар. Ундайҙар эҙләнеүҙән һәм юғалтыуҙан ҡурҡып, күңел тыныслығын ләззәттән ҡасыуҙа күрә. Улар ләззәттән ваз кисеүҙә ләззәт таба. Ә ниңә йәндә рәнйетергә һуң? Һандуғас моңо төн тынлығын боҙмай бит, баҙлауыҡтың нуры йондоҙҙар яҡтылығын кәметмәй. Бәлки, йәндә теләгән ваҡытта ҡуҙғатып була торған, тын яткан һыу һымаҡ күрәһегеҙҙер? Шуға ла йыш ҡына ләззәттән баш тартып, теләктәрегеҙҙе үҙегеҙҙең "Мин"егеҙҙең төпкөлөнә йәшерә беләһегеҙ. Ләкин үкенергә ярамай, кем белә, бөгөн ҡулығыҙҙан ысҡынған ләззәт тойғоһо, бәлки, иртәгә килер. Хатта һеҙҙең тәнегеҙ ҙә үҙенең өҫтөн яҡтарын, хоҡуҡтарын белә, уны алдап булмай. Ә бит тәнегеҙ күңелегеҙҙең арфаһы. Ул тән-арфанан ниндәй көй сығыуы һеҙгә бәйле.

Үҙ-үҙегеҙҙән "Ләззәттең ҡайһы яғы һәйбәт тә, нимәһе насар?" тип һорайһығыҙҙыр. Улайһа, бал ҡортона ҡарағыҙ: уның өсөн хуш еҫле сәскәләрҙән бал йыйыу - ләззәт. Сәскәгә үҙ шәрбәтен бал ҡортона биреү ҙә ләззәт. Сөнки бал ҡорто өсөн сәскә - йәшәү сығанағы, ә сәскә өсөн бал ҡорто - һөйөү илсеһе. Уларҙың икеһе өсөн дә бүләк биреү һәм алыу - ләззәт тә, зарурлыҡ та. Шуның кеүек, ләззәтегеҙ бал ҡорто менән сәскә араһындағы мөғәмәләгә оҡшаш булһын".

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

---

әгәр һин өс мең йыл артҡа китһәң һәм Мысыр фирғәүене янына радиоалғыс менән килеп инһәң, үҙе һөйләй һәм йырлай торған был йыһаз боронғо йәмғиәттә ниндәй реакция тыуҙырыр ине? Фирғәүен һәм уның эргәһендәгеләр быны мөғжизәгә тинләп, ҡурҡып, ҡысҡырыша башлар ине. Сөнки был улар өсөн - абсурд, мөмкин түгел! Ә беҙ быны абсурд түгел, ә электродинамика закондарына буйһонған электромагнит тулҡындарҙың тирбәлеүе икәнен беләбеҙ.

Тарихтан бер миҫал. Колонизаторҙар самолет менән Африка урмандарына килеп төшә. Ҡырағай ҡәбиләләр ҡурҡыуҙарынан ергә йығыла, ҡоттары осоп, барабан ҡаға, шунда уҡ ҡорбан сала башлайҙар. Улар, күктән Алла үҙе төшкән, тип уйлай. Был улар өсөн бөтөн ҡағиҙәләрҙең аҫты-өҫкә килеүе. Ә беҙ улай түгеллеген беләбеҙ. Самолет физика һәм математика закондарына таянып оса. Ул ерҙең тартыу көсө закондарын боҙмай. Был закондар башҡа закондарға күсә. Был көс һәм ҡайтарылған көс законы. Был кәмселекһеҙ закондар, ә уларҙың боҙолоуы түгел.

Һыу, ерҙең тартыу көсө законына ҡаршы, ағас олоно буйлап өҫкә күтәрелә, әммә был законды боҙоу түгел. Ысынында иһә, был берләшкән физика закондары комплексы: капилляр үҙенсәлектәре законы һәм баҫым законы. Ошо закондар берлектә һыуҙы ағас олоно буйлап күтәрелергә мәжбүр итә.

Беҙ аҡыл һәм логика закондарынан ситкә сыҡмайбыҙ, фокус күрһәтмәйбеҙ. Ҡырағай ҡәбилә кешеләре был закондарҙы белмәгәнгә күрә, ҡаушап ҡалған. Муса ғәләйһиссәләмдең йыланды таяҡ итеп, йылға һыуын киҫеүе лә шуның кеүек һине ҡаушата. Ғайса ғәләйһиссәләмдең үлеләрҙе терҙеүе лә, Ибраһимдың уттан иҫән-һау сығыуы ла һине ғәжәпкә ҡалдыра. Һин былар логикаһыҙ, абсурд бер нәмә итеп күрәһең. Ә былар барыһы ла беҙ белмәгән илаһи закондарға ярашлы хәлдәр. Тимәк, был логикалыҡ статусы категорияһынан, ләкин ул беҙҙең аңдан өҫтөн, сөнки беҙҙең аҡылыбыҙ белемдең билдәле бер сиктәренә өлгәшерлек кенә булдырылған. Алла был мөғжизәләр менән бер логик нигеҙҙе лә боҙмай. Ул беҙҙе юғары статус, бөйөк закондар һәм оло аҡыл шаһиты итә, беҙ иһә уға өлгәшерлек түгелбеҙ.

Әйткәндәй, билдәле бер дин тәркөмә, мөғжизәләрҙе инҡар иткәндә, һинең кеүек уҡ, аҡыл ҡабул итмәҫлек мөғжизәләрҙе таныуҙы аҡылды хурлауға тинләгән һәм бик ныҡ яңылышҡан. Шуға күрә улар Ҡөрьәндә кире ҡаҡҡан, уның аныҡ мәғәнәһен үҙгәртеп, үҙҙәренсә аңлатма бирә башлаған. Улар, Муса ғәләйһиссәләм таяҡ менән йылғаны киҫмәгән, тигән, йәнәһе таяҡ - ул ялған менән хәҡиҡәтте айыра торған догматик символ. Шул рәүешле улар уның ҡулын да яҡшы ҡул образы итеп ҡалдырған. Ғайса ғәләйһиссәләмдең мәйеттәрҙе терҙеүен дә үҙҙәренсә аңлап, ул йәндә генә терелткән, тәндә түгел, тигәндәр. Күреү һәләтен ҡайтарыуҙы - кешене үҙ аҡылына ҡайтарыу, тип аңлатҡандар. Быны менән улар Ҡөрьәндең мәғәнәһен боҙған.

Был мөғжизәләрҙе дөрөҫ аңламауҙарынан, уларҙы логикаһыҙ, закон боҙоу, тип һанауҙарынан килә. Һинең менән дә шундай уҡ хәл. Әммә беҙ йәшәгән заманда бер нәмәгә лә ғәжәпләнерлек түгел. Беҙ кешенең Айға аяҡ баҫыуын да, алыҫ планеталарға ебәрелгән йыһан юлдаштарын да күрҙек. Әгәр кеше белеме шул дәрәжәгә еткән икән, илаһи белемдең күпкә кинерәк булыуында бер ниндәй шик юҡ. Ҡөрьәндең 55-се Әррахман (шәфҡәтле) сүрәһендәге 33-сө аятты тыңла әле: "Эй, һеҙ, ендәр һәм кешеләр мәғшәре! Әгәр һеҙ күктәрҙең һәм Ерҙең сиктәрен үтеп сыға алһағыҙ, әйҙә, үтегеҙ, ләкин фәҡәт хакимиәт менән үтерһегеҙ!"

Был - кеше белеменең көсө, әммә илаһи белем күпкә ҡеүәтлерәк. Һис шикһеҙ! Уны наҙан һәм динһеҙҙәр аңлауынан арындырамын. Ул бөтә нәмәнән көслө!

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Урындарығыҙға ултырығыҙ! Ҡуҙғалырға ваҡыт!

Тиҙҙән һеҙ киләсәктә ярҙам итәсәк мауыҡтырғыс сәйәхәткә юлланасаҡһығыҙ. Алға барырға ҡамасаулаған бығауҙарҙан нисек ҡотолорға икәнлеген аңларһығыҙ.

Әгәр көрсөккә терәлдем, ниндәйҙер кәмселегем бар, тормошҡа ышаныс һәм энтузиазм менән ҡарарға һәләтле түгелмен, тип уйлайһығыҙ икән - бында яҙылғандар тап һеҙҙең өсөн. Әгәр һеҙ гәҙәтилек борсой, элекке һөҙөмтәләрегеҙ менән ҡәнәғәт түгелһегеҙ һәм тормош йылғаһы ыңғайына ағырға теләмәйһегеҙ икән, артабан был тормоштан сығыу юлдарын күрерһегеҙ. Әгәр йөрәгегеҙҙәге яңы күҙаллауҙарға, ҡиммәттәргә, инаныуҙарға асырға әҙер икәнһегеҙ, фекерләү процесын нисек итеп ҡайтанан ҡорорға һәм яңы "Мин"егеҙҙе уятырға икәнлеген аңларһығыҙ.

Был принциптарға эйә булыу менән тормошоғоҙ бәхеткә, мөхәббәткә, иреккә, аҡсаға һәм ышанысҡа тулыр. Сөнки үҙеңдең сикһеҙ ҡеүәтеңдә азат итеүҙән һәм тулы ҡанлы ижади тормоштан башҡа дәрт һәм илһам биреүсе бер нәмә лә юҡ. Кем булыуығыҙға, нимә менән шөғөлләнеүегеҙгә, ниндәй хәл-торошта икәнлегегеҙгә ҡарамаҫтан, үҙ-үҙегеҙгә тулы ышаныс булдыра алаһығыҙ. Һәм быны эшләүе бик еңел!

### 21 көндә күп нәмә эшләп була

Тормошта бик ябай, әммә һөҙөмтәле ысул бар. Ул "21 көн ғәҙәте" тип атала. Мәғлүм булыуынса, иҫке деструктив ғәҙәттән ҡотолоп, яңы, ыңғай ғәҙәт булдырыу өсөн 21 көн талап ителә. Ошо яҙмаларҙа булғанды тулыһынса үҙләштереү өсөн дә һеҙгә тап шунса ваҡыт кәрәк буласаҡ. Әммә һеҙ уны шунда уҡ аңламаясаҡһығыҙ. Талап ителгән үҙгәрештәр булһын өсөн уларҙы аҡыл менән генә аңлау етмәй, ысын илһам аң аша килә. Һеҙ ябай аңлауҙан йөрәк менән аңлау кимәленә етергә тейешһегеҙ. Нимәнелер ныҡлы аңлау өсөн уны фекерләү, тойғо, эшмәкәрлек һәм реакцияларҙың бер өлөшө итергә кәрәк. Быны өсөн ваҡыт талап ителә. Шуға күрә, уҡып сыҡтыҡ та, барыһын да аңланыҡ, тип уйламағыҙ. Үҙләштерелгән мәғлүмәт яңы ғәҙәтегеҙгә әүерелмәйенсә, бер ниндәй ҙә һөҙөмтә булмаясаҡ.

Элекке, кире ғәҙәттәрҙе яңы, конструктив һәм ыңғайҙарына үҙгәртеү - азатлыҡ менән сағыштырғанда бик аҙ ғына ул. Әгәр ниндәйҙер мәлдә ҡәтги тонға күсәм икән, был барыбарытик һеҙҙең аяҡ терәп ҡаршышыуығыҙҙы емереп, хәҡиҡәтте ишетергә һәм ҡабул итергә мәжбүр итеү тип уйлағыҙ. Шул саҡта һеҙҙе юғары хис солғап алыр, эске тауышығыҙ: "Эйе, хәҙер һин нимәнең хәҡиҡәт икәнлеген аңланың", - тип әйтәсәк.

Юғары һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн, тәүҙә яҙылғандарҙы тотош уҡып сығығыҙ. Һуңынан уны ҡабаттан уҡып, үҙегеҙ өсөн мөһим тойолған урындарҙы ҡабаттан уҡып ҡулланығыҙ. Бындағы принциптарға аңығыҙға мөмкин тиклем тәрәнерәк үтеп инергә мөмкинлек бирегеҙ. Ә иң мөһиме - уларҙы кисекмәҫтән тормошҡа ашырығыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**

*✓ Хоҙайҙан һуң беҙ ҡатын-ҡыҙ алдында бурыслы: ул тәүҙә беҙгә ғүмер бирә, һуңынан шул ғүмерҙе мәғәнәле итеүгә бар көсөн бирә.*

*(Каролина Бови).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

## СУВЕРЕНИТЕТ ӨСӨН КӨРӘШТӘ УЛАР ҘА ҠАТНАШТЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



## ИММУНИТЕТТЫ НЫҒЫТЫУҘЫҢ ЕТЕ ЫСУЛЫ

● 300 г балға 500 г ваҡланған грек сәтләүеге, 3 лимондың һәм алоэның 100 мл һутын һығып ҡушырға. Көнөнә өс тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1 балғалаҡ ашарға.

● 100 г инжир емешенә ике стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға. 2-3 сәғәт төнәтеп, һөҙөп алырға һәм 100 мл күләмендә көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан эсергә.

● 1 ҡалаҡ мүк еләген иҙеп, шәкәр өҫтәп, 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға йә ҡара сәй яһарға. Мүк еләгенән эшләнгән сәй һыуһынды яҡшы ҡандыра, организмды тонуста тоторға ярҙам итә, арыуҙы бөтөрә, күңелде күтәрә.

● Ике ус ҡарағат япрағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2-3 минут тоторға һәм һөҙөп алырға. Шунан сәй итеп эсергә. Ҡарағат япраҡтарының сәйе арыуҙы бөтөрә, организмдан шлактарҙы сығара.

● 100 г фундукты еңелсә ҡыҙҙырып, тартырға. Өҫтөнә 500 мл ҡайнаған һөт ҡойоп, 2 ҡалаҡ бал һәм семтем ваниль онтағы ҡушып, 15 минут тирәһе ваҡыты-ваҡыты менән болғап һыуытырға. Көн дауамында әҙләп кенә уртлап эсеп йөрөргә.

● 2 ҡалаҡ киптерелгән мәрүәр емешенә 500 мл эҫе һыу ҡойоп, 10-15 минут тирәһе талғын утта ҡайнатырға, һөҙөп алырға. Емештәрҙе бер аҙ йомшартып, тағы ла 500 мл һыу өҫтәп ҡуйып, 5-10 минут ҡайнатып, һөҙөргә, артыҡ һыуын һығып алырға. Шунан ике ҡайнатма һыуын бергә ҡушып, өс ҡалаҡ шәкәр, саҡ ҡына лимон кислотаһы һалып, әҙер булғансы ҡайнатырға. Ҡайнатманы көнөнә бер нисә тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө йә ярты стакан күләмендә ҡойоп эсергә кәрәк. Ә һөҙөп алынған мәрүәр емештәренән бәлеш бешерергә мөмкин.

● 300 г аҡ май менән 600 г балды һыу эсенә ултыртып иретергә, өҫтөнә ике ҡәһүә сынаяғы тартылған гөлйемеш, бер ҡәһүә сынаяғы төйөлгән һары мәтрүшкә сәскәһе һәм ошо уҡ күләмдә меңъяпраҡ һалып, ағас ҡалаҡ менән яҡшылап болғатырға. Һыуыҡ үтеүҙән һәм бронхиттан дауаланғанда сәғәт һайын 1-2 балғалаҡ ашарға. Имунитетты нығытыу өсөн ашарҙан алда 1 ҡалаҡ ҡулланырға кәрәк.

● Ҡыҙыл яран сәскәһенең яңы өҙөлгән 20 япрағын ваҡлап турарға, 20 бөртөк миндалде төйөргә һәм 4 лимонды ҡабығын әрсемәй тартырға. Килеп сыҡҡан массаға 1 ҡалаҡ имбир онтағы, 15 г валерьян дарыуы, 15 г энәлек дарыуы һәм бал ҡушып яҡшылап болғатып, банкаға һалырға. Был ҡатышманы иртәнге аштан ярты сәғәт алда 1 ҡалаҡ ашарға, һыуыҡҡыста һаҡлап тоторға кәрәк.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Октябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (22) дүшәмбе | 5:56 | 7:26 | 13:30 | 17:11 | 18:41 | 20:11 |
| 6 (23) шишәмбе | 5:58 | 7:28 | 13:30 | 17:08 | 18:38 | 20:08 |
| 7 (24) шаршамбы | 6:00 | 7:30 | 13:30 | 17:06 | 18:36 | 20:06 |
| 8 (25) кесе йома | 6:02 | 7:32 | 13:30 | 17:04 | 18:34 | 20:04 |
| 9 (26) йома | 6:04 | 7:34 | 13:30 | 17:01 | 18:31 | 20:01 |
| 10 (27) шәмбе | 6:06 | 7:36 | 13:30 | 16:59 | 18:29 | 19:59 |
| 11 (28) йәкшәмбе | 6:08 | 7:38 | 13:30 | 16:56 | 18:26 | 19:56 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

**39-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Салбар. Коллоквиум. Ажар. Елбәҙәк. Строфа. Альманах. Ижау. Лампасый. Батман. Никотин. Хәкимов. Швартов. Ниәт. Йәмғиәт. Шартлау. Ҡот. Арҡа. Хөрриәт. Ассоциация. Скафандр. Неон. Иҙел. Сынға. Оптик. Йүкә. Сана. Мәке. Муллабаев. Олпат. Алма.

**Вертикаль буйынса:** Шлих. Әбүшахманов. Киндер. Оло. Тәпәй. Тарпан. Оҫта. Кәйеф. Субтропик. Латин. Символ. Сәләмәтлек. Аҡлан. Атлант. Әкиәт. Бивуак. Ярҙам. Бура. Ау. Сәсәк. Марал. Шыйыҡса. Ваба. Риза. Мамыҡ. Автор. Аумаҡай. Тайлаҡ. Оклад. Ханов. Торт. Рәшә.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 октябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури)
**4 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама
**7 октябрь "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия
**8 октябрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миннуллин), бишек йыры
**9 октябрь "Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** (Н. Асанбаев), тарихи драма

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 10.00, 12.00
**8 октябрь "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айытматов)

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**8 октябрь "Аҙашҡан ҡунаҡ"**, (Н. Птушкина), комедия
**9 октябрь "Йәшә, дөрлә, гәзиз халҡым!"** Республика көнөнә арналған концерт
**10 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БАШҠОРТ ТЕАТРЫ...

## яңы ижад миҙгелен аса

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры 96-сы ижад миҙгелен "Мәҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға" мюзиклы менән асты. Яңы миҙгел, ғөмүмән, яңы премьераларға бай булмаҡсы, был турала журналистар менән осрашыуҙа театрҙың художество етәксеһе Олег Ханов белдерҙе.**

16-17 октябрҙә ҡаҙаҡ авторы Олжас Жанайдаровтың "Йот" пьесаһы буйынса ҡуйылған документаль драманың премьераһы көтөлә. Спектаклдең режиссеры - Айрат Абушахманов. Төп ролде башҡарыусы актер Фәнис Рәхмәтов был трагедияның Ҡаҙағстанға ғына түгел, ә донъям илгә ҡағылышлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Әҫәрҙә тәүге тапҡыр уҡығанда уҡ кисергән тетрәнеүем үҙебеҙҙең ерлеккә, үҙебеҙҙә милләткә бәйле яңы материалдарҙы өйрәнә башлағас, тағы ла тәрәнәйҙе", - ти ул. Спектаклдең төп маҡсаты йотто күрһәтеү ҙә түгел, бары тик ошо ваҡиға аша кешелеккә баһа бирергә тырышыу.



"Аслыҡ мәлендә ҡорбандар һаны менләп түгел, миллионлап иҫәпләнгәнен, йәки аслыҡтан аҡылдан шашыу хәлендә еткән кешенең кеше ашау түбәнлегенә төшөүен телгә алыуы ла ауыр, автор был ваҡиғаларҙы кешелек намыҫы, быҙданы тураһында һөйләү өсөн этәргес нөктә итеп алған", - ти Олег Закир улы. - Спектакль "Ҡара йөҙҙәр" кеүек үҡ, бәләкәй форматта барасаҡ, был ҡурҡыныс хәл-ваҡиғалар тураһында ҙур сәхнәнән тороп һөйләү артыҡ булыр ине, шуға ла режиссер ҙа, рәссам да ошо форманы тәҡдим иткән. Әйткәндәй, Айрат Абушахмановтың Мәжит Ғафури әҫәре буйынса ҡуйған "Ҡара йөҙҙәр"е "Алтын битлек" Бөтөн Рәсәй театр фестивалендә тәҡдим ителгән һәм ай башында эксперт комиссияһы уны килеп ҡараясаҡ.

Театр коллективы тағы ла бер спектакль өҫтөндә эш башлаған, ул быйыл Республика Башлығы грантына лайыҡ булған "Йософ һәм Зөләйха" әҫәре. Ҡол Ғәлиҙең "Киссаи Йософ"ын Юныс Сафиуллин инсценировкалаған, спектаклдең режиссеры - Олег Ханов. Музыкаль легенда сәхнәгә 4 декабрҙә - театрҙың тыуған көнөндә сығасаҡ.

- Был матур мөхәббәт тарихы ғына түгел, - ти Олег Закир улы. - Ромео менән Джульеттаның мөхәббәте ике нәҫелдең араһындағы дошманлыҡты еңеп, улар һөйөүҙәрен тыныслыҡ хаҡына ҡорбан итһәләр, был әҫәр - үҙ тәҡдирен лайыҡлы күтәреп, кешеләргә иң бөйөк башланғысҡа инаныусы кешенең ихтыяр көсө тураһында.

6 октябрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ" спектакле Туфан Миңнуллин спектаклдәре фестиваленә Ҡазанға барасаҡ. Ә республика театрҙары, Ғ. Камал Татар дәүләт академия театры, Т. Миңнуллин исемендәге Түбәнге Кама дәүләт татар драма театры көсө менән был бөйөк һүҙ оҫтаһы, драматург, шағир, йәмәғәт эшмәкәренең тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе театрҙа 20 октябрҙә үтәсәк. 21 октябрь - Мостай Кәримдең тыуған көнөндә уның әҫәре буйынса "Ай тотолған төндә" спектакле тәҡдим ителәсәк.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

СӘНҒӘТ, МӘҘӘНИӘТ, ӘҘӘБИӘТ...

# БАШҠОРТ КИТАБЫ БӘЙГЕ ТОТА

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте "Китап - хеҙмәттәшлек һәм үҫеш юлы" X Халыҡ-ара китап күргәҙмә-йәрминкәһендә ҡатнашҡаны өсөн өс дипломға лайыҡ булды.**

Күргәҙмә Төркмәнстандың баш ҡалаһы Ашхабадта уҙғарылды. "Китап" нәшриәте "Балалар китабы" номинацияһында "Донъя әкиәттәре" китабы һәм "Нәфис баҫма" номинацияһында "Гөлли Мөбәрәкова. Тормошо һәм ижады" фотоальбомы өсөн ике диплом менән бүләкләнде. Шулай уҡ нәшриәткә конкурста әүҙем һәм даими ҡатнашҡаны өсөн диплом тапшырылды. "Төркмәнстанда уҙғарылған Халыҡ-ара күргәҙмәлә ҡатнашыу "Китап" нәшриәте өсөн үҙенде лайыҡлы күрһәтеү һәм төрлө илдәрҙең нәшерселәре менән тәжрибә уртаҡлашыу мөмкинлеге ул. "Гөлли Мөбәрәкова. Тормошо һәм ижады" фотоальбомы, "Башҡортостан операһы һәм балеты" баҫмаһы, Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" һәм "Донъя әкиәттәре" китаптары айырыуса ҙур һорау менән файҙаланды. 2016 йылға Мосолман календары тиҙ арала һатылып бөттө", - тип һөйләнеләр нәшриәттең матбуғат хеҙмәтендә. Килтерелгән барлыҡ китаптар ҙа Төркмәнстан китапханаларына бүләк ителгән. Халыҡ-ара китап күргәҙмә-йәрминкәһе сиктәрендә "Китап" нәшриәтенең презентацияһы уҙған.

# ҠОНШАҠТАРҒА БАЙРАМ ОЙОШТОРОЛДО

**Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ ауылында "Рәсәй башҡорттары" программаһы сиктәрендә Башҡорт киноһы көнө уҙғарылды. Был юлы киностудия белгестәре өс анимация, ике уйын һәм бер документаль фильм тәҡдим итте.**

"Башҡортостан" киностудияһының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, тамашасылар режиссер Рим Шәрәфетдиновтың "Алдар һәм һоро бүре", "Ай һәм Урал тауҙары нисек барлыҡҡа килгән", Айгөл Байрамғолованың "Урал менән Шүлгән мажаралары" анимация фильмдарын ҡыҙыҡһынып ҡараны. Руслан Юлтаевтың Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы башҡорт ауылы тормошон сағылдырған "Өс хат" драмаһы геройҙарының ҡайғы-шатлыҡтарын күңеленән үткәрҙе. Айнур Асҡаровтың "Пилорама"һын тамашасылар көлөп, күҙ йәштәре аша ҡараны, Вилүрә Иҫәндәүләтованың "Мөрйәләрҙән төтөн сыға әле..." документаль фильмы киләсәкһеҙ тип юҡҡа сығарылған тыуған ауылында яңғыҙы йәшәгән ҡарт хаҡында бәйән итте. "Фильмдар беҙгә бик оҡшаны, - тине Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы хакимиәтенең мәҙәниәт, спорт, йәштәр сәйәсәте һәм мәғлүмәт идаралығы етәксеһе Оксана Йосопова. - Залдар тулы ине, төрлө йәштәге, шул иҫәптән уҡыусылар һәм Ветерандар советы вәкилдәре килде. Фильмдарҙың тематикаһы һәм актерҙарҙың уйнауы оҡшаны. Тамашасылар Башҡорт киноһы көнөн ойоштороусыларға рәхмәт белдерә һәм беҙгә йышыраҡ килеүҙәрен һорай. Мин дә уларҙың теләктәренә ҡушылам".

"Башҡортостан" киностудияһы "Рәсәй башҡорттары" программаһы сиктәрендә төбәктәрҙә кино гастролдәрен 2012 йылдан бирле ойоштора. "Башҡортостан" киностудияһының фильмдары Мәскәүҙә, Силәбелә, Магнитогорскиҙа, Ҡурғанда, Төмәндә, Екатеринбургта, Ҡазанда, Пермдә һәм Ырымбур өлкәһендә ҙур уныш менән барҙы.

# БЕҘҘЕКЕЛӘР МӘСКӘҮҘӘ ЯУЛАЙ



**"Аҡ тирмә" фольклор ансамбле Мәскәүҙә "Хорҙар алышы" финалында Башҡортостан исеменән сығыш яһаны. Фестиваль "Йыһан" концерт залында тамамланды. Сара Халыҡ-ара ололар көнө уңайынан ойошторолдо.**

Ижади бәйгелә Рәсәйҙең 11 төбәгенән өлкән йәштәге кешеләрҙән торған хор коллективтары, шулай уҡ Болгария, Сербия, Молдова һәм Приднестровьенан килгән ҡунаҡтар ҡатнашты. Ике көнлөк фестивалдә тамашасылар һәм ҡатнашыусылар йырҙар тыңланы, сағыу милли кейемдәрҙе күрҙе. Бәйгеселәр жюри хөкөмөнә таҡмаҡтар, һуғыш тураһында балладалар, йола тамашаларын, тыуған төйәк хаҡында йырҙар тәҡдим итте.

"Аҡ тирмә" фольклор ансамбле 1996 йылда Балаҡатай районында ойошторолған. Ансамблдең репертуарында - башҡорт халҡының йолалары, йырҙар, ҡобайырҙар. "Аҡ тирмә" районда һәм республикала уҙғарылған сараларҙа даими ҡатнаша, "Салауат йыйыны" республика фольклор байрамында Гран-приға лайыҡ булған.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮРЕ ҠАРТАЙҺА ЛА...

## бер ҡуйлыҡ кеүәте ҡала

Берәү бар - абынғанға аяҡ сала, берәү бар - йығылғанды тотоп ҡала.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешелек йәмғиәтенең тормошо тәбиғәт ҡанундары менән билдәләнмәй.

**(Симона де Бовуар).**

Хоҙайҙан һуң беҙ ҡатын-ҡыҙ алдында бурыслы: ул тәүҙә беҙгә ғүмер бирә, һуңынан шул ғүмерҙе мәғәнәле итеүгә бар көсөн бирә.

**(Каролина Бови).**

Әгәр ҙә уңыштар һин эшләгән эштәргә ярашлы булһа, кешеләр араһындағы ихлас мөнәсәбәттәр байтаҡҡа кәмер ине.

**(Зигмунд Фрейд).**

Кәрәк саҡта тәүәккәллек күрһәтмәгән әҙәмде аҡыллы кеше тип иҫәпләп булмай.

**(Генри Бичер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Һәр кем үҙ исемен мәңгеләштерергә ынтыла: берәүҙәр ысынлап та быға изге эштәр атҡарып, икенселәр нимәгәлер үҙ исемен ҡушып өлгәшә...**

**Бер кеше, үлгәс уның исемен үҙе төҙөгән бер бинаға ҡушырға васыят әйтә. Күпмелер ваҡыттан һуң ул донъя ҡуя һәм баяғы бинаның ҡыйығында уның исеме уйылған матур таҡта барлыҡҡа килә. Ләкин берҙән-бер көндө янғын сығып, бина ла, баяғы яҙыулы таҡта ла арыу ғына зыян күрә. Ахмаҡ халыҡ яҙмыш ишараһын аңламай: улар бинаны һәм баяғы таҡтаны матур итеп ремонтлап ҡуя. Бер аҙҙан тағы янғын сыға һәм бинаға, бигерәк тә яҙыулы таҡтаға тәүге янғындағыға ҡарағанда ла ныҡыраҡ зыян килтерә. Халыҡты был да туҡтатмай һәм улар тағы ла бинаны ремонтлап, ялтыратып буяп ҡуя. Хәҙер инде берәү ҙә көтмәгән хәл була: көслө дауыл сығып, бинаны йәшен уты ялмай һәм тулыһынса емереп, яндырып, көлгә ҡалдыра. Халыҡтың бинаны тергеҙергә теләге лә, аҡсаһы ла ҡалмаған була. Ә шулай ҙа баяғы үҙен мәңгеләштереүҙе васыят итеп ҡалдырған кешенең исеме яҙылған таҡтаны ғына яңыртып, ергә һалып ҡуялар...**

**Ваҡыт үтә, был тирәлә яңы быуын кешеләре йәшәй башлай. Бер ваҡыт уларҙың кемеһелер баяғы бина урынында кеше исеме яҙылған таҡтаны табып ала. Уның кем икәнен берәү ҙә белмәй, берәүҙең дә хәҡиҡәткә төшөнөргә теләге лә булмай. Ләкин зыяратта ла шул уҡ исем яҙылған ҡәберҙе күргәс, "Ике тапҡыр үлеүсе кеше" тигән мәғлүмәтте генә теркәп ҡуялар..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 2 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 4530